✓ *Улың менән биш йәшенә саҡлы - батша һымаҡ, ун биш йәшкә саҡлы - хеҙмәтсе һымаҡ, ун биш йәштән һуң дуҫ һымаҡ күреп аралаш.*

*(Боронғо һинд аҡылы).*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

10 - 16 ИЮЛЬ (МАЙАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№28 (394)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Дөрөҫ итеп хыяллан -** хыялың тормошҡа ашыр



4-5

**Дастанлы халыҡ...** тарих башланмышынан алып йәшәгән халыҡ



8-9

**Иман кимәле...** ихластан башҡа булмай



12

**Аяҡ аҫтында бит дарыуың...**



15

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Башҡорт халҡының мәҡәл-әйтемдәргә һалынған аҡылы "Таш менән атҡанға аш менән ат", ти. Ул бөгөнгө көнгә тап киләме?*

***Фәүзиә УСМАНОВА, скульптор:*** Боронғо китаптарҙы уҡып белеүемсә, кешелектең тәүге осорондағы "Глаз за глаз, зуб за зуб" тигән ҡырағай ҡанун һуңыраҡ "Уң битеңә сәпәһәләр, һул битеңде ҡуй" тип үҙгәртелә. Әлеге ваҡытта был ҡанунға ҡағылышлы заманса көләмәс юҡҡа тыумағандыр, тим. Имеш, берәү икенсеһенең уң яңағына сәпәй. "Өлөш алыусы" һул яңағын ҡуя ла, яңағына йоҙроҡ эләгеүе була, яуап итеп үҙенең йоҙроғон эшкә егә. Бер ни аңламаған беренсе кеше: "Туҡта, һин теге аҡылды белмәйһеңме ни?" - тип һорай. "Беләм, унда уң яңағыңа һуҡһалар, һулын ҡуй, тиелгән. Артабан нимә эшләргә икәне әйтелмәгән", - тигән. Ошонан сығып, үҙегеҙ фекер йөрөтөгөҙ инде...

***Рәшит ШӘКҮР, филология фәндәре докторы:*** Минең формулам шундай: аш менән атҡанға таш менән атма, таш менән атҡанға аш менән атма. Йәғни, мин башҡорттоң боронғонан килгән бер ҡатлы изгелеген дә өҫтәп ҡуйҙым. Әгәр кемдер таш менән атһа, ни өсөн һин уға аш менән атырға тейеш? Үҙеңдең мәнфәғәтеңде яҡлай алырға, изгелекле кешенең изгелеген аңлай, шул уҡ ваҡытта яуыз кешенең яуызлығын да баһалай белергә тейешһең. Әгәр шулай булмаһаң, ул һинең өҫтөңә менеп, тапап үтеп китәсәк.

***Байбулат НИЯЗОВ, йәмәғәт эшмәкәре:*** Был мәҡәл-әйтем бөгөнгө көнгә тап килеп етмәй, тип уйлайым. Сөнки тап ошо менталитет арҡаһында ошо көнгә төштөк, киң күңелле, изге йәнле булыу сәбәпле, ауыр хәлгә ҡалдыҡ. Беренсенән, был ер мәсьәләһендә асыҡ күренә һәм ныҡ борсой. Беҙҙе Урал тауҙары һырттарына ҡыҫырыҡлап бөттөләр. Әбйәлил тигән илебеҙ ерһеҙ тороп ҡалып бара. Ошо бер район миҫалында ла мәҡәлдең заманса яңғырамағанлығын, унын актуаллеген юғалтыуын күрәбеҙ. Заман башҡа - заң башҡа, тигәнсә, заманға ярашлы принциптар буйынса эш итергә тейешбеҙ бөгөн. Ун биш йыл милли идеология тураһында һөйләйбеҙ, ләкин һаман ошо милли идея булмау сәбәпле, Ғәлимов Сәләмдең "Шоңҡар"ындағы кеүек, ҡайһы һуҡмаҡ менән китергә белмәй аптыранабыҙ. Бөгөн дә, киләсәктә лә үҙ-үҙебеҙҙе милләт итеп, телебеҙҙе, еребеҙҙе, динебеҙҙе һаҡлап ҡалырға теләһәк, аныҡ милли идеологияны булдырырға кәрәк, ата-бабаларыбыҙҙың әлеге мәҡәлдәге кеүек ҡайһы бер аҡылына ла икенсе күҙлектән ҡарамай булмай.

***Сөмбөл ӘСФӘНДИЙӘРОВА, Башҡорт медицина колледжының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы:*** Был әйтемдең мәғәнәһе, яуызлыҡты бары тик яҡшылыҡ менән генә еңеп була, тигәнгә ҡайтып ҡала. Мин үҙемдең миҫалдан ғына алып әйтәм. Сит милләт балаларына башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡыта башлағас, тәүҙә улар: "Нимәгә кәрәк һеҙҙең башҡорт телегеҙ!" - тип, шаярып, мыҫҡыллы көлөп ултыра торғайны. Уларға яҡшы мөнәсәбәт күрһәтеп, дәрестәрҙе ҡыҙыҡлы, ижади үткәрә торғас, яйлап ҡыҙыҡһыныу тыуҙы, башҡорт телен теләп өйрәнә башланылар. Яҡшылыҡ, изгелек яуызлыҡты һәр саҡ еңә икәнен ата-олатайҙарҙың быуаттар буйына тупланған тәжрибәһе иҫбат иткән. Быңдай мәҡәлдәр ҙә шул тәжрибә һөҙөмтәһе.

ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...

# БАШҠОРТ ҠАЛАҺЫН...

## элек бар донъя белгән, хәҙер ҙә беләсәктәр!



**Ошо көндәрҙә редакциябыҙға шатлығы йөҙөнә сыҡҡан тоғро дуҫыбыҙ, гәзитебеҙ биттәрендә Башҡортостандың боронғо тарихына арналған, бигерәк тә Өфө-II ҡаласығында табылған, үҙенә күрә фәнни сенсация булырҙай тарихи ҡомартҡылар тураһында күп тапҡырҙар ҡиммәтле мәғлүмәттәр баҫтырған арҙаҡлы тарихсы-археологыбыҙ, академик Нияз ағай Мәжитов килеп инде. Был юлы ул билдәле япон ғалимы Риичи Миякеның БР Президенты Мортаза Рәхимовҡа ебәргән хат-мөрәжәғәтенең күсермәһен алып килгәйне. Шатланырлыҡ та шул: башҡорт тарихсыһының Истанбулда уҙған Халыҡ-ара конференцияла тарихи Башҡорт ҡалаһы тураһында яһаған сығышы бар донъянан йыйылған ғалимдар араһында айырыуса ҙур ҡыҙыҡһыныу уятҡан. Тимәк, Өфө-II ҡаласығы хаҡындағы тарихи хәҡиҡәт бөгөн донъя аренаһына сыҡты! Ошо уңайҙан олуғ ғалимыбыҙға оло ихтирам белдереп: "Һай, афарин, ил ағаһы!" - тип һоҡланырға ғына ҡала. Һеҙҙең иғтибарығыҙға әле һүҙ барған Халыҡ-ара конференцияның ойоштороу комитеты рәйесе Риичи Миякеның Башҡортостан Президентына яҙған хатын тәҡдим итәбеҙ:**


**(Дауамы 6-сы биттә).**

ЙҮКӘ ТЕЛЕФОН




## ҠОРОЛОҠ ҒӘЛӘМӘТТӘРЕ

• "Yoka press" агентлығы хәбәр итеүенсә, Башҡортостаныбыҙҙың йөҙөк ҡашы булған Ағиҙел йылғаһы һайыҡҡандан-һайыға, уның ҡайһы бер урындарын хәҙер хатта көлүш менән дә кисеп сығырға мөмкин икән. Бер яҡтан, ҡыҙғаныс булһа, икенсе яҡтан... Ҙурлығы буйынса Бөрйән районында өсөнсө урынды биләгән Иҫке Монасип ауылы халҡы нисә йылдар буйы күперһеҙ ыҙалай, Ағиҙел йылғаһының арғы ягында урынлашҡан ауылға машинала сыға алмай этләнә ине. Уларҙың проблемаһы был йәйҙә ыңғай ғына хәл ителгән дә ҡуйған. Хәҙер монасиптар ҙа, ситтән килгәндәр ҙә Ағиҙелде еңел машинала елдереп кенә кисеп сыға икән. Шуға ҡыуанып, Хоҙайға рәхмәттәр уҡып бөтә алмай ти монасиптар...

• Тик бына туристар ғына йәлке... Һуңғы йылдарҙа Ағиҙел буйлап кәмәләрҙә аҡҡан туристар өсөн бар шарттар тыуҙырыла башлағайны Бөрйәндә. Йылға буйҙарында туктаткалар төҙөлдө. Урындағы халыҡҡа хәләл көсө менән тапҡан малын аҡсаға әйләндереү мөмкинлектәре лә асылды. Тик бына әлеге лә баяғы ҡоролоҡ арҡаһында туристар Ағиҙелдә рәхәтләнеп йөҙә алғаны юҡ. Инде йөҙөп кенә киттек тиһәләр, кәмәләренең морондары һыу төбөнә төкөлә лә ҡуя, төкөлә лә ҡуя икән. Ҡайһы ерҙә этеп, ҡайһы ерҙә һөйрәп аҙапланалар, ти, кәмәләрен. Былайға барһа... Юҡ, туристар барыбер килер ул. Бына йылғаларҙы һайығыуҙан нисек ҡотҡарырға икән һуң? Ғөмүмән, ҡоролоҡ ваҡытында тәбиғәткә нисектер ярҙам күрһәтеп буламы? "Yoka press" агентлығы хәбәр итеүенсә, әлегә әбей-бабайҙар ғына шөғөлләнә икән был эш менән: ямғыр теләп, доғалар уҡыйҙар, тәбиғәткә сығып, төрлө йолалар башҡаралар. Уларға Хоҙай ярҙам итә, ти бит...

• Быйылғы ҡоролоҡ әбйәлилдәрҙең дә башын ҡатырҙы. Был турала Yoka press мәғлүмәттәр еткерә. Бында ла сәселгән иген буйға күтәрелә алмаған, сараһыҙҙан, меҫкен баҫыуҙарҙы мал тамағына ебәреп яталар, ти. Ҡыҙҙырып торған ҡояш аҫтында күптән ҡурмасҡа әйләнергә өлгөргән бойҙайҙан хужалыҡ малдары өсөн махсус әҙерләнгән сенаж хасил булған. Тимәк, бөйрәкәйҙәр ас ҡалмаҫ, әммә төп аҙығы - хуш еҫле бесән эләкмәүе бик мөмкин. Тәбиғәт тә түрәләр кеүек, берҙе бирә, берҙе тартып ала шул. Yoka press: "Өлгөр кешеләр күптәнән тегенән-бынан, ағас төптәрендәге ҡуләгәләрҙән бесәнде ҡырып-сырып сабып алған, техникаһыҙҙар сараһыҙҙан ялҡауҙар менән ҡуша өйҙә эсәнән ҡасып ята", - тип хәбәр итә. Улар ямғыр яуырын көтә, имеш. Ямғыр көткәндәрҙең өмөтөн аҡлар сара эҙләп, баш ватҡан да, бер ауыл әбейе тишек сөгөнөнөң төбөн ағымға ҡаршы ҡуйып, тауыҡ кисерҙәй булып һайыҡҡан Кесе Ҡыҙыл йылғаһына һалып киткән. Шунан берике тамсы ямғыр күҙә төшкән, тип тә әйтәләр.

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА менән Сәриә ҒАРИПОВА әҙерләне.**

ИШАРА

# ӘЙТӘ АЛМАЙ ТҮҘЕП ҠАЛДЫМ,

## әлдә әле түҙҙем...

**Гәзитебеҙҙең "Аҙна шаңдауы" рубрикаһын алып барыусы аналитик Таһир Ишкинин бер мәҡәләһендә: "Аралашыр кеше таба алмаған, үҙе менән үҙе һөйләшеп йөрөүселәр барлыҡҡа килде..."- тип яҙғайны. Бына мин дә шундай кешегә әйләндем шикелле инде. Илебеҙҙә ниндәй генә яңы закон ҡабул ителмәһен, гел ябай халыҡҡа зыян килтерә. Быны кемгә барып әйтәһең инде - үҙ алдыңа ғына һөйләнә-һөйләнә ризаһыҙлыҡ белдерәһең дә, шуның менән бөтә...**

Һуңғы ваҡытта магазиндарҙа сертификат талап ителмәгән ризыҡтарҙы ла һатырға рөхсәт бирелеүе тураһында хәбәр ителде. Һәм китте "баҙар". Магазин кәштәләренән үҙебеҙҙә етештерелгән ризыҡтар юҡҡа сыкты, тигәндәй. Башҡортостанда етештерелгәндәре ҡайһы ҡалаға алып барып һатылалыр, әммә беҙҙең үҙебеҙҙә Мәскәүҙән, Ленинград, Киров өлкәләренән алып килеп һатыусылар күбәйҙе. Мин йәшәгән урамда юл аша ғына ит, һөт комбинаттары эшләй, ә ит ризыҡтарын Туймазы ҡалаһынан килтерәләр. Маркаһы "Савва" тип атала. Сифаты бик хөрт. Күптән түгел бер бәләгә лә юлыҡтым. Тауыҡ боттары (тундырылған) һатып алдым да, төргәкте асһам, эсендә тағы ла бер төргәк булыуын асыҡланым. Тышҡы төргәгендә бер төрлө яҙылған, ә эске төргәгендә бөтөнләй икенсе төрлө яҙыу: "Тоҙлап тундырылған тауыҡ бото". Етмәһә, етештерелгән ваҡыттары араһында ла ярты йыллап айырма бар. Йүгерҙем ҡабат "Полушка" магазинына, тик: "Чек булмаған, бер ней ҙә ҡылып булмай шул", - тинеләр унда. Чек алып ҡайтыу ғәҙәтем юҡ шул. Әлбиттә, тәүҙә тоҙлап, һуңынан тундырып һатылған ризыҡты иретергә ҡурҡтым, урамдағы сүп контейнерына урынлаштырҙым. Әхирәтем Фәриҙә: "Шик тыуҙырған ризыкты ауыҙ итмә", - тип өйрәтә мине.

Сертификатһыҙ, сифатһыҙ ризыҡ менән күпме шулай хитланырбыҙ икән? Урыҫтарҙың бик боронғо әйтемен ишеткәнегеҙ бармы: "Своя жизнь копейка, а чужая - полушка" (Борон ярты тин "полушка" тип аталған). Бына шул әйтемдән сығып, "Копейка", "Полушка" магазиндары ойошторолдо. Үҙ ғүмереңең ҡәҙерен белмәгәндәр бүтәндәрҙең ғүмерен ҡәҙерләрме? Иң мөһиме, килем алыу хәстәре бит ундайҙарҙа.

Мин Өфөнөң Черниковка биҫтәһендә йәшәйем. "Пролетарский район" тип йөрөтәләр был биҫтәне. Нимә генә етештерелмәй бында: һөт ризыҡтары, ит, икмәк, тик ул тауарҙар беҙҙә һатыуҙа юҡ. Хатта шырпы фабрикаһы ла бар беҙҙең биҫтәлә. Тик ниңәлер шырпыны Киров өлкәһенән алып килеп һаталар. Шулай ҙа һуҡранып үтмәйем мин урамдан. Атлап барғанда берәй шиғырҙы иҫемә төшөрәм дә, ҡулдарымды йәйеп, йылмайып ҡабатлайым:

Һинә килдем, әйтермен тип
Бер һүҙ, сихри һөйөү һүҙен.
Әйтә алмай түҙеп ҡалдым,
Әлдә әле түҙҙем.
"Гөрләүектәр гөрләй," - тинем,
Имеш һалдым хәбәр.
Ҡысҡырып бер көлдөң дә һин
Тынып ҡалдың мәгәр...

Әйтер һүҙҙәрен әйтә алмай, мизгелдәр, йылдар үтеүе, һуңынан үкенеү хисе генә ҡалып, "Нинә генә түҙҙем..." тип, мөхәббәтен бәйән итә шағир. Ә беҙ әйтер һүҙҙәребеҙҙе әйтә алмай, үҙ-үҙебеҙ менән һөйләшеп, түҙеп йәшәйбеҙ. Үкенмәҫбеҙме һуңынан?

**Айгөл АХУНОВА.**

ИҒТИБАР!

# ХӨРМӘТЛЕ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

***Гәзиткә яҙылырға оноҭҡандарға еткерегеҙ: 15 июлгә саҡлы яҙылһалар, гәзитебеҙҙе августан алдыра башлаясаҡтар. Был мөмкинлекте ҡулдан ысҡындырһалар, йыл аҙағына тиклем "Киске Өфө"һеҙ йәшәйәсәктәр. Тимәк, бик күп ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр барып етмәйәсәк, бик күп һорауҙары яуапһыҙ ҡаласаҡ. Хаҡтар: 50665 индекслы "Киске Өфө" биш айға 265 һум 20 тин, 50673 индекслыһы (предприятие һәм ойошмалар өсөн) - 295 һум 20 тин.***



**Йәрмәкәй районының башҡорт теле уҡытыусылары.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов "Башҡортостан Республикаһы муниципаль берәмектәренең III съезын үткәреү тураһында" бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Съезд 2010 йылдың 30 сентябрендә Өфөлә Нефтселәр мәҙәниәт һарайында үтәсәк.

✓БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев һәм РФ Эске эштәр министрлығының Экстремизмға ҡаршы эш итеү департаменты начальнигы Юрий Коков оператив штаб ултырышында ҡатнашты. Графикҡа ярашлы, 6 июлдән республика территорияһында терроргә ҡаршы масштаблы күнекмәләр үткәрелә башланы. Унда Башҡортостан Республикаһының оператив штабы составына ингән барлыҡ көс структуралары ҡатнаша.

✓БР Хөкүмәте Премьер-министры ғәҙәттән тыш хәл режимы иғлан ителгән райондарҙың исемлеген тулыландырҙы. Әлегә тиклем ҡоролоҡҡа һәм ауыл хужалығы культураларының һәләк булыуына бәйле ғәҙәттән тыш хәл режимы 36 муниципаль район һәм ике ҡала округы биләмәһенә индерелгәйне. Барлыҡҡа килгән гидрометеорологик хәлгә һәм синоптиктарҙың күҙаллауҙарына бәйле Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте бойороғо менән тағы ла 18 муниципаль район һәм Өфө ҡалаһы ҡоролоҡ зонаһына индерелде.

✓БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев һуңғы оператив кәңәшмәлә БР-ҙың Эшҡыуарлыҡ һәм сауҙа буйынса комитет рәйесе Ринат Зәйнуллинға Ватандың бәләкәй һәм урта эшҡыуарлығын үҫтереүгә индергән өлөшө өсөн РФ-ның иҡтисади үҫеш министры Эльвира Нәбиуллина ҡул ҡуйған грамотаны тапшырҙы. Иҡтисад көрсөгө булыуға ҡарамаҫтан, республикала былтыр эшҡыуарлыҡ субъекттары һаны 10,2 процентҡа үҫкән. Бөгөн Башҡортостан кесе предприятиелар эшмәкәрлеге күрһәткесе буйынса Волга буйы төбәгендә өс лидер араһында һәм Рәсәйҙәге иң яҡшы ун төбәк араһында. Бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ Башҡортостандың тулайым төбәк продуктының биштән бер өлөшөн тәшкил итә.

✓Республиканың ун дәүләт юғары уҡыу йортоноң бюджет урындарына быйыл 9410 студент ҡабул ителәсәк. Былтыр беренсе курсҡа 9554 егет һәм ҡыҙҙың уҡырға ингәнен иҫәпкә алғанда, бюджет урындары ҡыҫҡарыуы күҙ алдында. Тағы бер яңылыҡ: ҡабул итеү былтырғы кеүек өс этапта түгел, ә ике этапта үтәсәк.

***✓ Бер үк гәзиттең 20 көн эсендә республика тураһындағы фекерен бына шулай ҡырҡа үҙгәртеүен нисек аңларға? Парадокс бит был. Тик "Башҡорт парадоксы" түгел, ә Рәсәй матбуғатының парадоксы.***

*АҘНА ШАҢДАУЫ*

# "РӘСӘЙ ПАРАДОКСЫ",

## йәки Рәсәй Федерацияһы Президентына асыҡ хат

**Хөрмәтле Дмитрий Анатольевич!**

**Һеҙгә бер һорау бар ине. Һеҙ был донъяла нимәгә ышанаһығыҙ? Беләм, беләм. Сиркәүгә йөрөгәнегеҙҙе, майшәм ҡуйғанығыҙҙы, суҡынғанығыҙҙы Рәсәй телевидениеһы йыш ҡына күрһәтә. Христиан байрамдары һайын, йәғни. Мин үҙем дә "Алла бирһә"нән һәм "Аллаға шөкөр"ҙән айырылған юҡ. Ә Алланан тыш башҡаларға... ышанам, тип әйтә алаһығыҙмы?**

Мәҫәлән, Һеҙҙе тирә-яҡтан уратып алғандарға ышанырға мөмкин микән? Министрҙарға, уларҙың урынбаҫарҙарына, төрлө кимәлдәге етәкселәргә. Уларҙың ҡайһыһына ышанаһығыҙ, ә ҡайһыһына - юҡ. Ә төбәк етәкселәренә ышанаһығыҙмы? Уларҙың бөтәһе лә Һеҙҙең тарафтан тәғәйенләп ҡуйылған бит. Һеҙ уларҙың һәр береһе менән аралашҡан, ҡул биреп һаулашҡан кеше. Һеҙ йыш ҡына улар менән осрашаһығыҙ, улар Һеҙгә үҙ төбәктәренең проблемаларын, уңыштарын һәм ҡаҙаныштарын һөйләй, Һеҙҙән ниндәйҙер кәңәш йәки бойороҡ көтә, дәртләндереү, маҡтау һүҙҙәренә өмөт итә. Сөнки улар Һеҙҙең кешеләр, дәүләт кешеләре. Һеҙ уларҙы тәғәйенләп ҡуйғанһығыҙ.

Улар быға тиклем төбәк халҡы алдында яуап тота ине. Улар өсөн урындағы һайлаусылар тауыш бирә торғайны. Насар булған микән был процедура, әллә һәйбәт булғанмы - әлегә әйтеүе ҡыйын. Бәлки, ул ғәҙел булғандыр. Ни тиһәң дә, урындағы халыҡ етәкселәрҙе яҡшыраҡ белә. Һеҙ, мәҫәлән, улар менән тәүҙә анкеталары буйынса танышаһығыҙ. Ә унда бит ҡыҫҡа ғына яҙылған - ҡасан һәм ҡайҙа тыуған, ҡайҙа уҡыған, ҡайҙа эшләгән, ниндәй наградалары бар. Ә урындағы халыҡ етәкселәрҙе уларҙың эштәре буйынса баһалай. Эшләй, тимәк, етәкселек итергә лайыҡлы. Эшләй алмай, йәки белмәй икән, халыҡ уның өсөн тауыш бирмәй ҙә ҡуя. Төбәк етәкселәрен һайлап ҡуйыу урындағы һайлаусыларҙан әүҙем граждანлыҡ позицияһын талап итә ине. Йәғни, кеше уйһыҙ, аңһыҙ түгел, ә, киреһенсә, киләсәк хаҡында борсолоп, үҙ төбәгенең, тимәк, үҙ ғаиләһенең иртәгәһе хаҡында уйлап тауыш бирергә тейеш. Ә Һеҙҙең тарафтан тәғәйенләп ҡуйылғандар Һеҙҙең алдығыҙҙа ғына яуап бирә. "Демократия" тип аталған төшөнсәнең (ә ул "халыҡ власы" тигәнде аңлата түгелме шул) ниндәйҙер бер мөһим өлөшө юҡҡа сыға ла ҡуя түгелме?

Хәйер, мауығып киттем, шикелле. Өҫтәге һорауға әйләнеп ҡайтмаҡсымын. Ышаныс тураһындағы һорауға.

Ә Һеҙ, хөрмәтле Дмитрий Анатольевич, гәзиттәргә ышанаһығыҙмы? Ғөмүмән, ваҡытлы матбуғат сараларында яҙылған, күрһәтелгәндәргә ышанысығыҙ бармы? Юҡ, юҡ! Һүҙ "һары" матбуғат хаҡында бармай. Уларҙы беләбеҙ. Ҡыҙыҡ күреп ҡараштырабыҙ. Башҡортостанда ла ундайҙар бар. Әртистәр тормошо тураһында яҙыштырғылайҙар. Булмағанды бар итеп буш урында сүптән сүмәлә өйәләр. Ысынмы, түгелме - кем белә инде.

Ә бына етди гәзиттәрҙе ҡулығыҙға алаһығыҙмы Һеҙ? "Етди" тигәнем, бысранырға ҡурҡмай тоторға мөмкин булған баҫмаларҙы аңлата. Мәҫәлән, "Российская газета" тигән баҫманы уҡыйһығыҙмы? Уҡыһағыҙ, унда яҙылғандарға ышанаһығыҙмы? Рәсәй Хөкүмәте органы бит был баҫма. Унда төрлө рәсми документтар баҫыла, дәүләт етәкселәре менән әңгәмәләр донъя күрә. Ул гәзит сит илдәрҙәге хәлдәрҙе бик матур яҡтырта, үҙенә генә хас йөҙө, стиле бар. Ышанаһығыҙҙыр, тип уйлайым. "Российская газета" әкәмтөкәм түгел дә баһа. Әйтәйек, "Известия" гәзите һуңғы йылдарҙа боҙолдо. Башҡа баҫмалар ҙа (бөтәһен дә атап бөтөп булмай) үҙгәрҙе, ҡайһы берҙәре "һарғайҙы", ҡайһылары "ҡыҙарҙы". Уларға ышанып та булмай. Нимә яҙаларҙыр инде, тип аптырап ҡуйыла ҡай саҡ. Ә "Российская газета"ға ышанмау мөмкин түгел дә баһа.

Ә бына Башҡортостан халҡы был гәзиткә ышанып етмәй. Быға тиклем нисектер уға ҡарата йылыраҡ мөнәсәбәттә ине. Әле юҡ. Ни өсөн тиһегеҙме? Һуңғы бер ай эсендә генә был гәзиттең биттәрендә беҙҙең республика тураһында бер түгел, ике мәҡәлә донъя күрҙе. Тәүгеһе 11 июндә Башҡортостан Президенты Мортаза Рәхимов менән әңгәмә. "Слагаемые оптимизма" тип атала ул. Икенсеһе иһә, егерме көндән һуң, 30 июндә донъя күрҙе. Александр Сидреев тигән авторҙыҡы. Уның мәҡәләһе "Башкирский парадокс" тип исемләнгән. Ике гәзитте лә ҡулымда тотам. Бер нәмә лә үҙгәрмәгән кеүек. Бер үк шрифт, бер үк ҡағыҙ. Әллә баш мөхәррир алмашынғанмы? Юҡ. Бөтәһе лә элеккесә. Хәйер, юҡ, элеккесә түгел икән. Беҙгә, Башҡортостанға мөнәсәбәт үҙгәргән. Ҡырҡа үҙгәргән. 180 градусҡа, тимәк.

Тәүге материалда журналистарҙың һорауҙарында уҡ республикаға, уның етәксеһенә ихтирам, иғтибар, республика тормошо менән ҡыҙыҡһыныу ярылып ята. Хәбәрсе республика иҡтисады, инвестициялар тураһында һораша, Башҡортостандағы милләт-ара хеҙмәттәшлек кимәле менән ҡыҙыҡһына. Төбәк етәксеһенең дә яуаптары аныҡ, төплө, төрлө һандар, миҫалдар менән байытылған. Мортаза Рәхимов республикала торлаҡ һәм социаль объекттар (мәктәптәр, дауаханалар һ.б.) төҙөлөшө хаҡында, Башҡортостанда сит ил аҡсаһына төҙөлгән предприятиелар тураһында һөйләй. Уны уҡып сыҡҡан кеше Башҡортостандағы хәл тураһында тулы мәғлүмәт аласағына шигем юҡ.

Икенсе материал иһә тәүгеһенең ҡапма-ҡаршыһы. Уйҙырмалар һәм ялған менән тултырылған. Әйтәйек, журналистың республика Хөкүмәте тарафынан ойошторолған "Үҙ йортом" программаһының тормошҡа ашырылыуы тураһындағы фекерҙәрен алайыҡ. Был программаға бәйләнеүселәр күп. Берәүҙәр уға ярашлы төҙөлгән ҡасабаны махсус рәүештә Өфө эргәһендә булдырылған башҡорт "анклавы", хатта "гетто"һы тип атай һәм унда йәшәүселәр яҡын киләсәктә федераль үҙәккә ҡаршы ойоштороласаҡ сығыштарҙа (күрәһең, демонстрацияларҙа, митингыларҙа, хатта баш күтәреүҙәрҙә һәм фетнәләрҙә) ҡатнашырға бурыслы, тип белдерә. Ә Российская газета"ла яҙылыуынса, баҡтиһәң, унда торлаҡ алыусылар исемлеге Президент Мортаза Рәхимов тарафынан раҫлана, имеш. Йәнәһе, Президенттың башҡа эше юҡ! Ошонда уҡ Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Николай Ивконың "аяныслы" яҙмышы хаҡында бәйән ителә. Был ветеран беҙгә яҡшы таныш. Уның тураһында беҙгә (һәм, әлбиттә, бөтә Рәсәйгә) НТВ телеканалындағы "ЧП" тапшырыуынан бер тапҡыр һөйләгәйнеләр инде. Был мәғлүмәттең (һәм, ғөмүмән, һуңғы ун-ун биш көн эсендә Рәсәйҙең башҡа ваҡытлы матбуғат сараларында донъя күргән хәбәрҙәрҙең) бер үк сығанаҡтан алынғаны хәҙер көн кеүек асыҡ.

Бер үк гәзиттең 20 көн эсендә республика тураһындағы фекерен бына шулай ҡырҡа үҙгәртеүен нисек аңларға кәрәк, ә, Дмитрий Анатольевич? Парадокс бит был. Тик "Башҡорт парадоксы" түгел, ә Рәсәй матбуғатының парадоксы була инде.

Иң ҡыҙығы шунда - ваҡытлы матбуғат сараларына яҙылыу башланһа, ошо һәм башҡа үҙәк гәзиттәр мөхәррирҙәре республика етәкселегенә, Башҡортостандың ҡала һәм район хакимиәттәренә мөрәжәғәт итеп, подписка ойоштороуҙа ярҙам һорап хаттар яҙа башлай. Бөгөн беҙҙең халыҡ республика һәм район йә ҡала баҫмаларын яҙҙырыуҙы унай күрә. Улар, һәр хәлдә, алдамай, ялғанды яҙмай.

Ә хәҙер, әйтегеҙ әле, Дмитрий Анатольевич, Һеҙ кемгә нығыраҡ ышанаһығыҙ - 1990 йылдан бирле Рәсәй Федерацияһының иң ҡеүәтле һәм тотороҡло төбәктәренең береһе менән идара иткән, урындағы һайлаусылар тарафынан өс тапҡыр ҡабаттан Башҡортостандың юғары посына һайлап ҡуйылған, ә 2006 йылдың октябрендә Рәсәй Федерацияһы Президенты Владимир Владимирович Путин тарафынан Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайға яңы президент осорона тәғәйенләүгә тәҡдим ителгән, Федерация кимәлендә киң танылған абруйлы сәйәсмәнгә һәм етәксегәме, әллә...

Бөгөн ҡайһы бер матбуғат сараларында һәм Интернеттағы яңылыҡтар сайттарында Башҡортостан һәм уның етәксеһе хаҡында негатив мәҡәләләр күп баҫыла башланы. Уның авторҙары беҙҙе, Башҡортостан халҡын, Рәхимов осоро үтте, уның күп ваҡыты ҡалманы, тип ышандырырға тырыша. Белеүебеҙсә, 2006 йылдың октябрендә был поста тәғәйенләнгән етәксе 2011 йылдың октябренә тиклем эшләргә тейеш. Кем нимә тип яҙыуға, кем нимә тип һөйләүгә ҡарамаҫтан. Әллә беҙгә хәҙер Рәсәй Федерацияһы Президенты Һүҙенә лә ышанырға түгелме?

Ҡайнар сәләмдәр менән,

**Таһир ИШКИНИН.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Республикала "2012 йылға тиклем ауылды социаль үҫтереү" программаһы уңышлы тормошҡа ашырыла. Быйыл ғына БР Ауыл хужалығы министрлығына, торлаҡ төҙөүгә һәм һатып алыуға дәүләт ярҙамы күрһәтеүҙе һорап, 1600 ғаилә документ тапшырған. Шуларҙың 600-ҙән ашыуы тиҙҙән торлаҡҡа социаль түләү өсөн таныҡлыҡтар аласаҡ.

✓Асылыкүл буйында үткән йәш сәсәндәрҙең "Урал батыр" республика конкурсында Ишембайҙың Зәки Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт республика гимназия-интернаты уҡыусыһы Рәсилә Хисмәтуллина Гран-при яуланы. Өлкәндәр төркөмөндә беренсе урын Әбйәлилдән Зәлиә Әбдрәхимоваға бирелде. Командалар араһынан сибайҙарға етеүсе булманы.

✓Алкоголь һәм наркотиктар ҡолона әйләнгәндәр ярҙам һорап "Преображение России" тип аталған Бөтә Рәсәй мәрхәмәтлек йәмәғәт ойошмаһына мөрәжәғәт итә ала. Өфөләге филиалдың телефондары: 8-937-310-1111; 8-937-363-1111.

✓Федераль миграция хеҙмәтенең БР буйынса идаралығы һәм БР буйынса Эске эштәр министрлығы "Легаль булмаған мигрант" оператив-иҫкәртеү операцияһының беренсе этабын үткәрҙе. Тикшереү барышында Өфөнөң Октябрь район биләмәһендә генә лә сит ил граждандарының хеҙмәтен файҙаланыусы 84 эш биреүсе, уларҙа барлығы 225-тән ашыу сит ил кешеһе эшләүе асыҡланды. Сит ил граждандарына 198 административ протокол төҙөлдө, суд тарафынан 9 сит ил гражданын илдән сығарып ебәреү тураһында ҡарар ҡабул ителде.

✓БР Профсоюздар федерацияһы РФ Президенты Дмитрий Медведевҡа РФ Хеҙмәт кодексына төҙәтмәләр индереүҙе һорап мөрәжәғәт итте. Хеҙмәт өсөн түләүҙәрҙең минималь күләмен билдәләгәндә уға компенсация һәм башҡа өҫтәмә түләүҙәрҙе индермәүҙе тәҡдим итә профсоюздар.

✓"Салауат Юлаев" хоккей командаһына Омск "Авангард"ының элекке уйынсылары -Чехия йыйылма командаһы форварды Якуб Клепиш менән һөжүмсе Александр Свитов киләсәк. "Салауат Юлаев" командаһының "Авангард"тан көслөрәк икәнен беләм һәм ошондай сәмле командала уйнаясағым өсөн шатмын", - тигән үҙенең интервьюһында Якуб Клепиш.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# БЕЛЕМ АЛЫУ...
## кесе йәштән башлана

**Демография йылғанан ярға ҡаҡкан тулҡынға оҡшаған. Йә ул тынмай тулҡынлана, йә тағы тынып ҡала. Әҙ генә ел сыҡһа, тағы ярға ҡаға. Был сағыштырыу, бәлки, урынһыҙҙыр, әммә ҡасандыр, балалар юҡ, тип ҡалаларҙа ябылған балалар баҡсаларын бөгөн ҡабаттан асыу ошондай тулҡын ҡағышына оҡшап китә. Ул "тулҡын" иһә был мәсьәләне иң юғары кимәлдә тикшереүҙе талап итә. Бына тағы Өфө ҡала округы советының сираттағы ултырышында башҡа мәсьәләләр менән бер рәттән, мәктәпкәсә йәштәге белем биреү учреждениеларының эше лә ҡаралды. Был йүнәлештә баш ҡалала 221 балалар баҡсаһы һәм 7 балалар баҡса-мәктәбе эшләй. Уларға барлығы 39 мең бала йәлеп ителгән. Бынан тыш, дәүләттеке булмаған дүрт белем биреү төркөмө, шулай уҡ балалар тулы көн йөрөмәгән төркөмдәр бар.**

Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов белдереүенсә, һуңғы биш йылда ғына Өфөлә дөйөм 2500 урынға тәғәйенләнгән 17 балалар баҡсаһы файҙаланыуға тапшырылған. Уларҙың бер өлөшө яңы төҙөлһә, күпмеһелер элек балалар баҡсаһы булып, һуңынан ҡуртымға бирелеп, хәҙер ҡабаттан үҙ функцияһын башҡара башлаған. Шул уҡ ваҡытта булған ғына балалар баҡсаларының 60 проценты ремонт талап итә.

Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың белем алыуы йүнәлешенә яңы моделдәр һәм формалар үтеп инә. Улар - ҡыҫҡа ваҡытлы уҡыу, мәктәпкә әҙерлек һәм ғаилә тәрбиәһе.

Мегаполистың мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларында ата-әсәләрҙең балаларын әсә телендә тәрбиәләү һәм уҡытыу теләгенә лә иғтибар бирелә бирелеүен. Әммә Башҡортостандың баш ҡалаһында бер генә башҡорт балалар баҡсаһы-мәктәп булыуы был эштең тейешле кимәлдә алып барылмауы тураһында ла һөйләй. Белгестәр билдәләүенсә, бында миҙалдың ике яғы бар. Береһе - балаларҙы төркөмдәргә тейешле күләмдә туплау булһа, икенсеһе - кадрҙар мәсьәләһе. Әлеге көндә мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларында юғары белемле кадрҙар 45 процент тәшкил итһә лә, эш хаҡының әҙ булыуы сәбәпле, тәрбиәселәр, хеҙмәтләндереү, медицина персоналының йыш алышыныуы күҙәтелә.

Тормош булғас, төрлөһө була. Ниндәйҙер ғаиләлә һау-сәләмәт бала үҫһә, икенсе ғаиләләге балалар сәләмәтлегендә тайпылыштар, үҫешендә тотҡарлыҡтар күҙәтелеүе мөмкин. Ысынбарлыҡтан бер ҡайҙа ла ҡасып булмай, әммә балалар тормошҡа яраҡлашырға, үҙҙәрен кәм тоймаҫҡа тейеш. Бындай категория өсөн, мәҫәлән, баш ҡаланың һәр районында туберкулез интоксикацияһы хеҙмәте булған балалар баҡсалары эшләй, дүрт меңдән ашыу бала махсус учреждениеларҙа шөғөлләнә.

Заман һулышын һулайым, уның менән бергә атлайым, тиһәң, балаңдың мәктәпкәсә белем алыуына битараф ҡалырға ярамай. Сөнки ҡасандыр олатай-өләсәй тәрбиәһе иң лайыҡлы тәрбиә һаналһа, бөгөн заман менән бергә атлау зарурлығы ла өҫкә сыға.

**Зәйтүнә ЙӘНТҮРИНА.**

ҮҘ ӨЙӨМДӘ - ҮҘ КӨЙӨМ

# ДӨРӨҪ ИТЕП ХЫЯЛЛАН -
## хыялың тормошҡа ашыр

**Һуҡырҙың теләгәне - ике күҙ, тиҙәр. Баш ҡаланы яуларға тип килеүселәргә был әйтемде саҡ ҡына үҙгәртеп, йортһоҙҙоң теләгәне - ҡыйыҡлы булыу, тип ҡулланыу урынлы булыр. Сөнки хыялдар ҙур, оптимизм биш кешегә етерлек, әммә йәшәр мөйөшөң булмау ҡанаттарҙы тиҙ һындыра.**
**Былтыр Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең "Үҙ йортом" программаһына ярашлы, Өфө ҡалаһы эргәһендә Шамонин, Дорогин, Жуково ауылдарында бюджет өлкәһендә эшләүселәр өсөн аҙ ҡатлы йорттар төҙөлә башланы. Проект буйынса, мәҫәлән, Шамонин ауылында меңдән ашыу йорт төҙөү ҡаралған. Кемдер йорто ҡулланыуға тапшырылыу менән ремонт эштәренә тотонһа, бәғзеләр ремонтһыҙ-ниһеҙ күсенеп, йәшәй ҙә башланы. Ни тиһәң дә, баш осонда үҙ ҡыйығың бар - үҙеңде ышаныслы тотаһың, ергә ныҡлыраҡ баҫаһың, күңелдә "минеке" тигән төшөнсә нығына.**

### Көрсөккә рәхмәт!

Кемдер донъяны шаугөр килтергән көрсөктө һүгә, бәғзеләр, киреһенсә, уға рәхмәтле. Бәлки, был осраҡлы тап килеү генәлер, әммә беҙҙең осраҡта тап көрсөк арҡаһында күп кеше - уҡытыусылар, журналистар, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре йортло булды. Беренсенән, көрсөк тигән заманда кешеләрҙең банкала (өс литрлыламы, матрас аҫтындамы, нәски эсендәме - мөһим түгел) һаҡлаған аҡсаһы әйләнешкә сыҡты, ә инде республика төҙөлөш ойошмалары эш менән тәьмин ителде. Икенсенән, баш ҡалала ғүмер буйы йә ятаҡ ҡандалаһын һимертеүсе, йә кеше тупһаһын тапап, башҡалар кеҫәһен ҡалынайтыусылар бөгөн ерле булды. Ошондай мөмкинлек өсөн республика етәкселегенә рәхмәттән башҡа һүҙ юҡ.

Ҡасандыр, совет заманында, 2000 йылда коммунизмға барып етәсәкбеҙ, унда һәр кем үҙ фатирында йәшәйәсәк, тип өмөтләндерәләр ине. Билдәләнгән йыл да үтте, әммә йөк бит һаман урынында ҡалды, башҡорттар (статистика буйынса, ятаҡтарҙа һәм кеше тупһаһын тапаусылар араһында башҡорттарҙың һаны башҡа милләттәрҙекенә ҡарағанда байтаҡҡа күберәк) һаман йортһоҙ-ерһеҙ интекте. Бынан кем нығыраҡ зыян күргәндер, кемдеңдер фатирын ҡуртымға алып йәшәүсеме, әллә ҡаҙнамы, билдәһеҙ. Сөнки фатирына йәшәргә индереүселәрҙең береһе лә алынған килеменә һалым түләмәне. Ә инде баш ҡаланы ҡалдырып китергә теләмәүселәр һаман кемдеңдер кеҫәһен ҡалынайтты.

Шамонинда йорт төҙөп бирәләр икән, тигән хәбәр йортһоҙ, фатирһыҙ көн күреүселәр араһында тиҙ таралды. Аллаға шөкөр, тәүге исемлектәрҙең береһендә минең дә фамилиям бар ине. Документтар йыя башлағас, коллегаларым араһында ығы-зығы башланды, баҡтиһәң, ниндәй районда (ҡалала) теркәлгәнһең, шунда торлаҡҡа сиратта торорға тейешһең икән. Шул ваҡытта, күптәрҙе алдан күреүсәнлек, алдан хәстәрлек кеүек сифаттар ҡотҡарҙы ла инде. Тап бер йыл алдан, ашарға һорамай, сиратҡа торайым әле, тип, документтар туплап, сиратҡа баҫҡайным. Хәйер, үҙ фатирым йәки өйөм булырға тейешлегенә күңелемдә бер ваҡытта ла шик тә булманы. Хәҙер шуға инандым, көслө теләк булғанда, хыялдар тормошҡа аша!

Башҡортостан Республикаһының Торлаҡ төҙөлөш фондында биргән исемлек буйынса документтар йыйырға тотондоҡ (кемдер был эште айҙарға һуҙһа, минең өсөн бер аҙнанан саҡ ҡына ашыуыраҡ ваҡыт талап ителде, уны тапшырыу ҙа артыҡ ауырлыҡ тыуҙырманы, сират та әллә ни оҙон түгел ине). Әлбиттә, тыуған районында теркәлеүселәргә документ йыйыу процедураһы бер аҙ ҡатмарлыраҡ булды, сөнки һәр ҡағыҙҙы район үҙәгенән йә ауыл советынан алырға, ниндәйҙер етешһеҙлек булғанда, тағы ла районға юлланырға кәрәк ине. Әммә документ йыйыу сират күпере үтеү түгел, тырышлыҡ һәм түҙемлек кенә кәрәк. Түҙемлек тигәндән, бәғ-



# Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә наркотик матдәләрҙең законһыҙ әйләнешенә ҡаршы көрәш саралары тураһында мәғлүмәт тыңланды. Билдәләнеүенсә, быйыл алты айҙа ғына Өфөлә ошондай 1091 осраҡ теркәлгән. 7 кг наркотик законһыҙ әйләнештән тартып алынған. Әле республикала 31 октябргә тиклем "Мәк-2010" оператив-профилактик операция бара. Операция мәлендә Өфөнөң үҙендә генә 183 наркотиклы етен ҡыуаҡлыҡтары юҡ ителгән, 91 енәйәт эше ҡуҙғатылған, 20 административ протокол төҙөлгән. Енәйәтселәр хәҙер үҙ тауарын "электрон көшөлөк" аша ла тарата башлаған. Ошо схема буйынса эшләүсе төбәк-ара төркөмдөң эшмәкәрлеге асыҡланып, ике кеше ҡулға алынған.

✓Октябрь проспектындағы "Үҫмерҙәр китапханаһы" туҡталышы йылылыҡ магистрале ремонты менән бәйле 50 метрға алға табан күсерелде. 10 августан ул яңынан үҙ урынына ҡайтасаҡ.

✓БР Милли музейында "Ике донъя: иртә тимер быуатта Көньяҡ Уралда урман һәм дала" тигән күргәҙмә эшләй башланы. Музей хеҙмәткәрҙәре һәм археологтар беҙҙең донъя бынан меңәр йылдар элек нисек булғанын күҙ алдына баҫтырырға тырыша. Күргәҙмәнең төп идеяһы - Көньяҡ Уралдағы ике культураны - урман һәм дала культураһын сағыштырыу.

✓Өфөлә сәнәғәт предприятиелары арта барһа ла, уларҙан сыҡҡан ҡалдыҡтарҙың тирә-яҡ мөхитте бысратыу факттары кәмей бара. Ә бына автомобилдәрҙең экологик яҡтан хәүефе арта ғына. Социаль-гигиена мониторингы төбәк фонды мәғлүмәттәре буйынса, һуңғы биш йыл эсендә стационар сығанаҡтарҙан һауаға ташланған ҡалдыҡтар күләме 9,7 процентҡа кәмегән, ә транспорттан ташланған ҡалдыҡтар 33,1 процентҡа артҡан. Шулай итеп, тирә-яҡ мөхитте бысратыуҙың дөйөм күләмендә автотранспорт өлөшө 2008 йылда 61,7 процент тәшкил иткән.

✓Башҡортостан "Китап" нәшриәте башҡорт телендә открыткалар баҫтырып сығара башланы. Ассортиментҡа "Ҡотлайбыҙ!" тип яҙылған алты төр ингән. Открыткаларҙы Өфөләге "Башҡорт китабы йорто"нда күмәртәләп тә, ваҡлап та һатып алып була.

зәләр төҙөүселәрҙе яй ҡуҙғалыуҙа, яй эшләүҙә гәйепләп һүкте. Кеше тәбиғәте ҡыҙыҡ инде ул, нисәмә йылдар ятаҡта йәшәгәндә, кеше тупһаһын тапағанда үҙ мөйөшөн булдырыу хәстәрлеген күрмәнеләр, мөмкинлек килеп тыуғайны, тағы ла етешһеҙлек эҙләй башланылар. Кемдәрҙендер "аһ" та "уһ" килеп зарланыуы тағы бер һығымтаға этәрҙе: тормош ауырлыҡтарһыҙ, кәртәләрһеҙ булмай, мәсьәлә уға үҙең ниндәй мөнәсәбәттә булыуыңда ғына. Ауыр, минең хәлемдән килмәй, тип илаулап ултырһаң, юрағаныңдың юш килеүенә әҙер бул.

Төҙөлөш эштәре тиҙ атҡарылды. Тик махсус белем һәм тәжрибә булмағанлыҡтан, уларҙың сифаты тураһында әйтеүе ҡыйын әлегә. Уныһы йортта йәшәй башлағас беленер инде. Тәүге осорҙа, йәғни реклама осоро үткәндән һуң төҙөлгән йорттарҙы "тәп-ләп" кенә тиеүселәр бар барлыҡҡа. Нисек кенә булмаһын, иң мөһиме - үҙ ҡыйыҡың бар. Өй төҙөүҙе юҡҡа ғына "өйәһе лә өйәһе", тимәйҙәр бит.

Беренсе - барыбер беренсе инде, шул принципҡа нигеҙләнеп, күптәр ҡайһы бер эштәрҙе (коммуникация үткәреү) башҡаларҙан алдараҡ эшләтергә тырышты. Бынын үҙенә күрә ыңғай яҡтары ла бар, хаҡы ла осһоҙораҡ, сифаты ла яҡшыраҡ була. Сөнки тәүге эштең ниндәй булыуына ҡарап, башҡаларға рекомендация бирелә, реклама яһала. Ә артабан инде хаҡтар күтәрелә йәиһә сифат яғы ҡалыша.

## Сәм дә этәргес була

Шамониндан өй алдым, тиеүем ҡайһы берәүҙәрҙе сәмләндерҙе. Ни тиһәң дә, миллионлы ҡалала ҡасан фатир алыу форсаты сыға, сыҡҡан хәлдә лә ҡайҙан аҡсаһын табаһың... Ә бында 300 мең һумды биш йылға 8 процент менән кредитка ла бирәләр. Шулай итеп, өй алыуым тураһындағы яңылығым, моғайын, үҙем өсөн шул тиклем һөйөнөс булып, шатлығым шул тиклем ташып барғандыр, бер нисә ғиләнә лә сәмләндереп, улар ҙа был проектҡа ҡушылыу юлдарын эҙләне. Тәүҙә: "Эй, беҙгә уны кем бирһен, унда танышлыҡ кәрәк инде", - тип танауҙарын төшөрөүселәрҙе дәртләндереп тороп, үҙҙәрендә ышаныс, сәм уятып, һуңынан, теләктәренә ирешкәс, уларҙың рәхмәтен ишетеү үҙе бер ҡыуаныс булды. Баҡтиһәң, кешенең теләге ни тиклем ҙур булған һайын, уға ирешеүе бер ни тормай икән.

## Бында ҡасаба-баҡса буласаҡ!

Маяковскийҙың шиғырын хәтерләйһегеҙме? Килер заман, Шамонин ауылы ҡасаба-баҡсаға әүерелер. Әлеге ваҡытта бында инфраструктура юҡ тиергә була, шулай ҙа мәктәп, балалар баҡсаһы төҙөлә. Уҡыу йылына улар балаларҙы ҡабул итергә әҙер булыр, тип өмөтләндерәләр. Баш ҡаланың Дан бульварынан көн һайын иртәнге етенән киске һигеҙгә тиклем ярты сәгәт - 20 минут һайын маршрут автобустары ла йөрөп тора. Хәстәрлекле хужалар ихатаһын кәртәләргә лә, баҡсаһын ултыртырға ла өлгөргән - тормош ҡайнай. Әммә, тәжрибә күрһәтеүенсә, һәр кемдең дә өйөн тейешле кимәлгә еткереп инеү мөмкинлеге юҡ әлегә һәм ни бары 30 процент самаһы халыҡ ҡына нимәләр булһа эшләй. Кемдер төҙөүселәрҙән ҡалған етешһеҙлекте бөтөрөү менән мәшғүл. Бәғзеләр иһә булған ғына аҡсаһына нимәләр эшләтеп ҡалырға тырыша. Бәлки, коммуникация үткәреү өсөн түләүҙе кисектереү механизмы ла эшләнер, Алла бойорһа.

Шулай уҡ быйыл августа үҙәк урамдарға асфальт һалынасаҡ. Шуға күрә үткәреп ҡалыуың яҡшы, һуңынан инде күберәк сығымдар тотонолоуы ихтимал. Әлеге ваҡытта оператив штабта төрлө сауҙа үҙәктәренән коммуникациялар өсөн материалдар алыуға сертификаттар бирелә. Бынан тыш, 150 меңгә тиклем льготалы шарттарҙа кредит биреү мөмкинлеге лә ҡарала. Был инде үҙе бер бүләк, сөнки йортоңдо йәшәрлек кимәлгә еткереү өсөн (һүҙ йыһаз тураһында түгел, ә коммуникация үткәртеү тураһында ғына) бынан күберәк сумма сығып китә.

"Үҙ йортом" программаһы буйынса ҡыйыклы булыусылар менән аралашҡанда тағы шул проблема асыҡлана: бәғзеләр йорт һалғанда йәки һатып алғанда ғүмергә бер тапҡыр ике миллион һумға тиклем сумманан түләнгән һалымды кире ҡайтарыу мөмкинлеге барлығын белмәй (был айырым тема, уға тағы бер әйләнеп ҡайтырбыҙ). Күптән түгел генә бер танышыма: "Төҙөлөш материалдары алған чектарыңды ташлама, йыйып бар, һуңынан дөйөм сумманың 13 процентын кире ҡайтара алаһың", - тигәс, уның аптырауының сиге булманы. Бында инде һалым органдарының һәм матбуғат сараларының эшләп еткермәүе, халыҡҡа мәғлүмәттең барып етмәүе, шул сәбәпле күптәребеҙҙең хәбәрҙар булмауы сәбәпсе.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Алда яҙып үтеүемсә, проблемаға нисек ҡарайһың, уға ниндәй мөнәсәбәттә булаһың - барыһы ла шунан тора. Тотонмаҫ элек үҙеңә, аңыңа, күңелеңә "Был эш ауыр, газ, һыу торбалары үткәртеү минең ҡулдан килмәҫ", тигән программа һалып, үҙеңде шуға ышандырһаң, әлбиттә, алдыңа шул киләсәк. Шуға ла "мин булдырам", тип тотонайыҡ һәр эшкә.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**



## ХАҠТАР НИ ХАҠ?

# ЕР ЕЛӘККӘЙҘӘРЕ... кипһә лә



**Йәй айҙары тик ял итеү генә түгел, ә оҙон ҡышты хәстәрләү, йәғни еләк-емеш ҡайнатмалары, төрлө салаттар әҙерләү осоро ла. Кемдер еләк-емеш, йәшелсәне үҙ баҡсаһында үҫтереп кинәнһә, кемдер иһә бөгөнгө көндә күпләп һатыуға сығарылған йәшелсә-емештәрҙән генә файҙалана. Улар өсөн ҡайһы бер баҙар хаҡтарын еткерәбеҙ.**

Ҡыяр, помидор магазин кәштәләрендә 20-40 һум торһа, үҙ баҡсаларынан сығарып һатыусылар иһә хаҡты байтаҡҡа артығыраҡ ҡуя, помидорҙың хаҡы 100 һумға етә хатта. Сөгөлдөр, кишер, таш ҡабаҡ, тәмле ҡыҙыл борос әлегә тик магазин һәм баҙар кәштәләрендә генә күренә, хаҡтары 30-50 һум тирәһендә тирбәлә. Укроп, йәшел һуған, петрушканың бер бәйләмен урамда 10 һумға, баҙар һәм магазиндарҙа 15-20 һумға һатып алып була. Һуғандың килограмы 15-20 һум. Салаттар эшләүҙә ҡулланылған көнбағыш майы 70-90 һум тирәһе.

Төрлө ҡайнатмалар эшләү өсөн еләк-емешкә ҡытлыҡ юҡ. Йылдың ҡоро килеүе сәбәпле, күп райондарҙа ер еләге кипкән, шуға күрә хаҡы ла ярашлы рәүештә ҡыйбат һәм бер килограмы 200-300 һумдан да кәм түгел. Файҙалы үҙенсәлектәре юғары булған ҡара һәм аҡ ҡарағаттың хаҡы 80-100 һум, ҡурай еләге ҡайнатмаһын яратыусыларға был емеш 150-180 һумға төшәсәк. Баҡса еләгенең бер килограмын 150-200 һумға, сливаны 85-95 һум, абрикосты 60-100 һумға һатып алып була. Шулай уҡ алма, груша емештәренән дә ҡайнатма, компот эшләргә теләүселәр барҙыр, уларға алманы 40-100 һум, грушаны 50-100 һумға алыу мөмкинлеге бар. Ҡайнатмаларҙы әҙерләүҙә кәрәк булған шәкәр ҡомонон килограмы 19-24 һум тора.

**Баҙарҙа һатыу итеүселәр белдереүенсә, халыҡ бөгөн сит илдән килтерелгәнгә ҡарағанда, үҙебеҙҙә етештерелгән йәшелсәләргә өҫтөнлөк бирә. Шәхси баҡсаларҙан үҙҙәре үҫтергән йәшелсәне һатыусылар ҙа, әйтеүҙәренсә, һатып алыусыларға ҡытлыҡ кисермәй. Еләк-емеш тә, хаҡтары ҡыйбат булыуға ҡарамаҫтан, үҙ һатыусыһын тиҙ таба.**

**Гөлназ САФУАНОВА.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

## Организмды таҙартыу



Эштән, донья мәшәҡәттәренән арып, хәл бөтөп киткәндә дарыу ҡулланмай, үлән менән файҙаланыу яҡшы. 4 ҡалаҡ ҡыҙыл миләш, 3 ҡалаҡ гөлйемеш, 4 ҡалаҡ ҡара ҡарағат, 2 ҡалаҡ әрем (кипкәне лә ярай) алып, ярты литр ҡайнаған һыуҙа төнәтеп, һыуынғас, һөҙөһөң һәм көнөнә 3 мәртәбә ярты стакан эсәһең.

## Ауыр эштән бил ауыртҡанда

❖ 2 флакон спиртлы йодҡа бер лимон һутын ҡушып болғатырға һәм ятыр алдынан бөтә арҡа буйлап бер сирек киңлектә һөртөргә.

❖ 2 яңы һалынған йомортҡаны банкаға һытып, ҡабығы менән һалғас, өҫтөнә сыҡҡансы һеркә кислотаһы ҡояһың. Йомортҡа ҡабығы иреп бөткәс, тиресәһен алып ташлайһың да, бер ҡалаҡ май ҡушып болғатаһың. Бер көн ултырғас, ауыртҡан ергә һөртәһең һәм мамыҡ шәл менән бәйләп, өҫтөнә грелка ҡуяһың.

## Ҡан баҫымын төшөрөү

Сепрәкте алма һеркәһендә йәки 5 процентлы аш һеркәһендә сылатаһың һәм 5-10 минутҡа үксәләргә ҡуяһың. Баҫымды нығ төшөрә, үтә мауығырға ла ярамай.

## Оҙайлы гастрит

1 стакан балды, 1 стакан каланхоэ япрағы һутын, 1 стакан таҙа араҡыны бергә болғап, 45 көнгә ҡараңғы урынға ҡуяһың. Шул төнәтмәне ас ҡарынға көн һайын 1 ҡалаҡ эсергә.

## Картуф

Ашҡаҙан, үңәс елһенгәндә, йәрәхәт булһа, уртаса ҙурлыҡтағы картуфты ҡырғыстан үткәрәһең һәм бер ай буйы ашар алдынан 20-30 минут ҡалғас, көнөнә 3 мәртәбә эсәһең.

## Әрекмән (репейник) япрағы

Гангренанан ҡотолоу өсөн иртәле-кисле 3-4 япраҡты ҡайнар һыуға тығып алып, гангреналы урынға ябаһың һәм полиэтилен менән урайһың. Файҙаһы 2-3 көндән беленә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*✓ Башҡорт ҡалаһы һәм уның менән бәйле тарихи-археологик ҡомартҡылар башҡорт халҡының ғына милли байлығы түгел, ә бөтөн Дала Евразияһы ҡәүемдәренең төрки халыҡтарының уртаҡ хазинаһы.*




# ОЛОЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

## Ир әҙәбе

● Ҡатындарығыҙға донъя һәм дин кәрәктәрен өйрәтегеҙ. Тура юл менән йөрөүҙәренә һәр ваҡыт ярҙам итегеҙ. Аҡылдарын һәм диндәрен камиллаштырыу һәм сәләмәт тотоу өсөн тырышығыҙ. Уларға шәфҡәтле һәм асыҡ йөҙлө булығыҙ. Уларҙың ихлас мөхәббәттәренә ҡаршы хыянат итмәгеҙ. Хөрмәттәрен юҡҡа сығармағыҙ. Хәдис шәрифтәр бойорғанса мөнәсәбәт ҡороғоҙ.

● Ашау-эсеү, кейем-һалым кеүек нәмәләрҙе яҡшы итеп хаҡтарын үтәгеҙ. Көстәре етмәҫлек хеҙмәт менән көсләмәгеҙ. Золом итмәгеҙ, ҡул күтәрмәгеҙ. Яҡшы йәки яман булһағыҙ ҙа, уларҙы ҡол, тик һеҙҙе риза итер өсөн яратылған кеше тип иҫәпләмәгеҙ.

● Ғаилә башлығы булһағыҙ ҙа ҡатынығыҙ холоҡһоҙлоҡ күрһәткәндә сабыр итегеҙ, һәр ваҡыт миһырбанлы булығыҙ. Уларҙы асыу һәм көс менән түгел, ә шәфҡәтлек менән еңегеҙ.

● Ҡатындарҙың алдаҡсы һәм хәйләкәр, мәкерле булыуының төп сәбәбе ирҙәрҙер. Уның холҡон боҙоусы, ысын кешелектән сығарыусы ла ирҙәрелер. Шуның өсөн ҡатынығыҙҙы тәрбиәләгәндә уларҙы алдаҡсы, мәкерле һәм фәлән тип һөйләмәгеҙ. Иң тәүҙә үҙегеҙ яҡшы булығыҙ, һуңынан ҡатындарығыҙға яҡшы тәрбиә бирегеҙ. Ҡатындарығыҙ һис шөбһәһеҙ яҡшы булыр. Ирҙәр боҙоҡ булмаһа, ҡатындар яҡшы булыр.

## Ҡатын әҙәбе

● Ирегеҙҙең хосусан йорт эсендәге хеҙмәттәрен гүзәл һәм рәхәтләнеп эшләгеҙ. Әмерҙәренә итәғәтле булығыҙ. Тыйған әйберҙәренән йыраҡ тороғоҙ. Һытыҡ йөҙ менән ҡарышмағыҙ. Өндәшмәй үпкәләп йөрөмәгеҙ. Юҡ-бар нәмә өсөн мығырҙамағыҙ һәм ыңғырашмағыҙ. Ҡаршы һүҙ ҡайтармағыҙ. Ир хәтерен ҡалдырырлыҡ эш эшләмәгеҙ. Уның рөхсәтенән тыш өйҙән сыҡмағыҙ.

● Оялсан, әҙәпле, намыҫлы булығыҙ. Иргә гүзәл мөнәсәбәттә булығыҙ. Хөрмәтенә кәмселек килтермәгеҙ. Вәғәҙәләрен юҡҡа сығармағыҙ. Серҙәрен фашламағыҙ. Малдарын исраф итмәгеҙ. Уларҙың рөхсәтенән тыш һис кемде янығыҙға саҡырмағыҙ. Кейем-фәлән өсөн артыҡ нәмә теләмәгеҙ.

● Ирегеҙҙең ата-әсәһенә итәғәтле булығыҙ. Башҡа яҡындарын ҡарындаш иҫәпләгеҙ. Балалары булһа, ирегеҙ хәтере өсөн яҡын күрегеҙ.

● Замана мәшәҡәттәренә ҡаршы торған ирегеҙгә ярҙам итегеҙ. Шатлыҡлы йәки хәсрәтле көндәрендә уның менән бергә булығыҙ. Был донъяның әсе-сөсөһөн уның менән уртаҡлашығыҙ. Уға һис бер ваҡыт ялған һөйләмәгеҙ. Күрше ҡатындарҙың: "Иремә ялған һөйләнем, белмәне", - тип әйтеүҙәренә алданмағыҙ. Белегеҙ, ҡатындың ялған бер һүҙе булһа ла, иренә һиҙелһә, ире күҙендә ғүмерлек хөрмәте бөтә.

● Ҡатындарҙы мөхәббәтле күрһәтәсәк нәмә матурлыҡ түгел, гүзәл холоҡтор. Күп ҡатындарҙың матурлығы камил булмаһа ла, һәр кем алдында һөйкөмлө күренә һәм хөрмәтләп телгә алына. Шуның өсөн гүзәл холоҡло һәм миһырбанлы булығыҙ.

● Асыулы йөҙлө булмағыҙ. Асыулы йөҙ менән бер кемгә лә күренмәгеҙ. Асыуланған ваҡытта һөйләшмәгеҙ, бигерәк тә башҡаларға яуап биреүҙән һаҡланығыҙ. Сөнки асыуланғанда яуап биреү асыуҙы көсәйтә. Асыуҙы баҫтырыу өсөн тәһәрәт алығыҙ. Мөмкин булһа, намаҙ уҡығыҙ.

**(Дауамы бар).**

*ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...*

# БАШҠОРТ ҠАЛАҺЫН...

## элек бар донъя белгән, хәҙер ҙә беләсәктәр!

**(Башы 1-се биттә).**

**Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов әфәндегә (Истанбул, 22 май, 2010 йыл).**

**Ғали йәнәптәре!**

2010 йылдың 20-21 майында Истанбул ҡалаһында уҙған халыҡ-ара конференция айҡанлы Һеҙгә хат аша мөрәжәғәт итеү - беҙҙең өсөн ҙур хөрмәт билдәһе. Евразия коридорында ҡала төҙөлөшө сәйәсәтенең үҫеш һәм һаҡлау буйынса Халыҡ-ара Форумы координаторы булараҡ, беҙ барса континенттарҙың ғалимдарын, шул иҫәптән Башҡортостан вәкилдәрен ҙур ҡәнәғәтләнеү менән ҡабул иттек. Улар Һеҙҙең республикағыҙҙың тарихи ҡомартҡылары һәм ерҙәренең төрлө аспекттарына арналған матур сығыштар яһаны. Дала Евразияһында ҙур сауҙа-һөнәри һәм мәҙәни-сәйәси үҙәктәрҙең береһе булған Башҡорт исемле урта быуат ҡалаһы темаһы буйынса археологик күҙәтеү презентацияның төп предметтарының береһе булды.

2006 - 2009 йылдарҙа киң күләмдә алып барылған археологик ҡаҙыныуҙар һөҙөмтәһендә Башҡорт ҡалаһының IV - V быуаттар сигендә үк барлыҡҡа килеп, XVI быуат урталарына тиклем бер өҙлөкһөҙ йәшәүе асыҡланды. Өфө ерендә ҡәлғәләр, ауылдар һәм некрополдәр, шул иҫәптән ошо иң киткес тарихи-мәҙәни ҡомартҡының цитаделе (Өфө-II ҡаласығы) кеүек бик һәйбәт һаҡланған матди тормош эҙҙәре булыуы уғата ҡыуаныслы.

Боронғо цивилизацияларҙы өйрәнеү һәм пропагандалау буйынса бөтөн донъя ғалимдарын берләштереүсе Евразия коридорында ҡала төҙөлөшө сәйәсәтенең үҫеш һәм һаҡлау буйынса Халыҡ-ара Форумы Башҡортостан Республикаһының Фәндәр Академияһы вице-президенты Нияз Мәжитовтың йөкмәткеле сығышын тыңланы, фекер алышты һәм шундай һығымтаға килде.

Башҡорт ҡалаһы һәм Өфө территорияһында уның менән бәйле тарихи-археологик ҡомартҡылар башҡорт халҡының ғына милли байлығы түгел, ә бөтөн Дала Евразияһы ҡәүемдәренең, иң элек, төрки халыҡтарының уртаҡ хазинаһы. Монументаль архитектура объекттарын һаҡлау, консервациялау, тергеҙеү йәһәтенән ул дәүләттең һаҡсыл мөнәсәбәтенә лайыҡ, уның базаһында тарихи-мәҙәни ҡурсаулыҡ, Башҡорт-Өфө ҡалаһының тарихи музейын булдырыу фарыз.

Ошо сараларҙың башҡорт халҡының, Евразияның һәм донъяның барса төрки ҡәүемдәренең тарихын өйрәнеү йәһәтенән бик әһәмиәтле икәнен иҫәпкә алып, конференцияла ҡатнашыусылар уларҙы ғәмәлгә ашырыу буйынса Башҡортостан етәкселеге һәм ғалимдары менән хеҙмәттәшлек итергә әҙер булыуын белдерә. Конференцияла ҡатнашыусыларҙың бер күңелдән белдерелгән фекеренә ярашлы, яҡын йылдарҙа Башҡорт ҡалаһының барлыҡҡа килеүен һәм үҫеш этаптарын, уның Дала Евразияһы халыҡтары тарихында тотҡан ролен һәм урынын асыҡлауға арналған халыҡ-ара ғилми конференция уҙғарыу әйтелгәндәрҙе ғәмәли рәүештә бойомға ашырыу юлында тәүге аҙым булыр ине.

Конференция делегаттарының тәҡдиме буйынса ошо мөрәжәғәтте Һеҙгә ебәрәм. Беҙҙең башланғысыбыҙҙы аңлап ҡабул итерһегеҙ һәм уны ғәмәлгә ашырыуҙа ярҙам итерһегеҙ, тип ышанабыҙ.

Мин Һеҙгә оло ихтирам белдерәм.

**Япон Архитектура Институты вице-президенты, Халыҡ-ара конференцияны ойоштороу комитеты рәйесе, тарих фәндәре докторы Риичи Мияке.**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.**

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

Әлеге ваҡытта Өфө-II ҡаласығы территорияһында БДУ доценты Әлфиә Нияз ҡыҙы Солтанова етәкселегендә археологик ҡаҙыныу эштәре дауам итә. БДУ-ның тарих факультеты студенты Резеда Илсебаева менән һөйләшкәндә, ул түбәндәгеләрҙе һөйләне: "Нәҡ был урында ҡаҙыныуҙарҙы быйыл 23 июндә башланыҡ. Беҙ айырым бер территорияла ҡаҙынабыҙ, ә материкка тиклем еткәс, эшебеҙҙе тамамлаясаҡбыҙ. Әлеге ваҡытта тикшеренеүҙәребеҙҙең һөҙөмтәһе - керамика, һөйәктәр, муйынсаҡтар, гәрәбәләр, бәләкәй генә алтын ярсыҡтары кеүек археологик табыштар. Һөйәктәрҙе айырым һалабыҙ, керамиканы таҙартабыҙ. Һуңынан уларҙы махсус лабораторияларға ебәреп тикшерәсәктәр, ҡайһы быуатҡа ҡарағанлығын билдәләйәсәктәр. Әле беҙ тапҡан керамика һәм һөйәктәр күберәк бахмут, турбаслы һәм кушнаренко мәҙәниәтенә, ә күптән түгел тапҡан орнаментлы керамикалар бахмут мәҙәниәтенә һәм һун осорона тура килә. Шулай уҡ тапҡан әйберҙәрҙең күбеһе иртә тимер быуат осорона ҡарай".

Ошо уҡ уҡыу йортоноң IV курс студенты Резеда Әхмәтшина: "Кисә иң үҙенсәлекле һәм беҙҙең өсөн көтөлмәгән табышҡа юлыҡтыҡ, - тип шатлығы менән уртаҡлашты. - Ағас түшәм фрагменты таптыҡ, әлбиттә, ул әҙерәк янған һәм онталған, шулай ҙа уны студенттар һаҡ ҡына ҡаҙып ала алды. Беҙ уның сығып торған ерҙәрен йәбештерҙек, эшкәрттек. Ағас түшәмдәр йыл һайын табыла ул, иң ҙурына 2008 йылда юлыҡҡайныҡ. Бөтә ағас түшәмдәр был урындарҙа торлаҡтар булыуы тураһында һөйләй, бәлки, улар иҙән йәки стена булғандыр. Ағас түшәмдәр иң ҡиммәтле табыштарҙан һанала".

**Өфө-II ҡаласығы тулыһынса тикшерелеп бөтмәгән, тикшеренеүҙәр дауам итәсәк әле. Күренеүенсә, ҡаҙыныуҙар табыштарға бик бай. Киләсәктә был урындарҙа Башҡортостан тарихының боронғолоғон күрһәтеүсе археологик табыштар күберәк табылыр һәм берәй заман был урында асыҡ һауалағы музей ойошторолор, тип ышанабыҙ.**







ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# ИВАН ЛЕПЕХИН СӘЙӘХӘТНАМӘҺЕ,

## йәки XVIII быуаттағы башҡорт донъяһына бер ҡараш



Тунап алынған сей тирене ҡояшлы урынға йәйеп һалып, таяҡсыҡтар менән беркетеп ҡуялар. Киреп ҡуйылған тиренең йөнөн ҡырғыс кеүек агаска беркетелгән кәкре салғы киҫәге менән ҡырып алалар һәм, тире кипкәнсе, шулай ҡалдыралар. Башлыса, кипкән тирене яҙға тиклем һаҡлайҙар. Яҙ еткәс, тиреләрҙе ыҫлайҙар. Бының өсөн мөгәрәп ҡаҙып, аҫ яҡтан ике аршин оҙонлоғонда өң яһап, унан өҫкә таба мөрйә сығаралар. Мөгәрәп ауыҙына ҡабыҡтан яһалған төпһеҙ ҡап ултыртыла, уның аҫҡы ягы ер менән ҡаплана. Ҡап һәм мөгәрәп ауыҙына бау һуҙылып, йәниһә нәҙек кәртә һалынып, уларға киптерелгән тиреләр элеп ҡуйыла. Мөрйәгә серек киҫәктәрен төшөрөп, яндырып ебәргәс, төтөн канал буйлап мөгәрәпкә үтһен һәм тиреләр һәр саҡ төтөн эсендә булһын өсөн мөрйәне томалап ҡуялар. Тиреләрҙе, ҡалынлығына ҡарап, өс аҙна йәиһә бер ни тиклем аҙыраҡ ваҡыт дауамында бер өҙләкһеҙ ыҫлайҙар, шунан һуң ғына тире эшкә яраҡлы, тип иҫәпләнә. Ошо рәүешле әҙерләнгән күндән улар аяҡ кейеме генә текмәй: биҙрә, сапсаҡ һәм ҙур шешә кеүек йорт кәрәк-яраҡтары ла күндән эшләнә. Турһыҡ тип аталған ҙур күн шешә бер-ике һәм унан да күберәк биҙрә һыйҙырышлы була, ул, башлыса, бер бөтөн күндән яһалып, төбө генә тегеп ҡуйыла. Бының өсөн улар һыйыр йәиһә аттың алғы аяғы тиреһен киҫмәй генә тубығынан кире тотошлайы менән һыҙырып ала һәм шул рәүешле бөтөн көйө ҡалған күн тарая барыусы һауыт (һүлейә) фигураһын һаҡлап ҡала.

Башҡорттар үҙҙәрендә ҡулланыу өсөн байтаҡ ҡына тарма сәсә һәм ул бик һәйбәт үҫә; шулай ҙа улар аяҡ кейемен һәм төрлө кәрәк-яраҡ теккәндә бер ҡасан да еп ҡулланмай: улар еп урынына һеңер ҡуллана, шуның өсөн уларҙың аяҡ кейемдәре оҙаҡҡа сыҙай һәм бер ҡасан да тейерлек һүтелеп бармай.

Ауылдан йәйләүгә күсеп китеүсе башҡорттарҙың йорт ҡоштары аҫрауға артыҡ иғтибар итеп бармауын күрҙек. Уларҙың ҡайһыларының тауыҡ һәм ҡаҙҙары бар, әммә йәйләүгә күскәндә былар ҡышлауҙа торғоҙоп ҡалдырыла һәм ейәр аҙығын үҙҙәре табырға мәжбүр ителә. Хужалары көҙөн ауылға кире ҡайтҡанда уларҙы таба алһа, шуның менән дә ҡәнәғәт ҡала. Күрәһең, был ҡарсыға, ыласын, бөркөт кеүек йыртҡыс ҡоштарҙы ылыҡтырыу өсөн шулай эшләнә. Улар ошо ҡоштарҙы тотоуға бик әүәҫ; әйтергә кәрәк, улар ошондай ҡоштарҙы тотоуҙа һәм аҫрауҙа махсус өйрәтелгән оҫталарҙан да ҡалышмай. Башҡорттар был ҡоштарҙың ҡанат һәм ҡойроҡ ҡаурыйҙарын уктарына ҡуя, бөркөттәрҙе төлкө, ҡуян, бүре кеүек йәнлектәргә һунар итеү өсөн тота. Тауҙар араһында йәшәгәнлектән һәм төрлө яҡтан заводтар менән уратып алынғанлыҡтан, башҡорттар мәғдән эҙләүгә лә бик һәләтле; әммә ҡайһы саҡта заводчиктарҙан йәбер күргәнлектән, үҙҙәре тапҡан мәғдән тураһында әйтә һалып бармай, мәғдән эҙләүселәр үҙҙәренең яҡташтарының да төрлө яңауҙарына, бәғзе осракта хатта тукмауына дусар була: шулай ҙа аҙ ғына булған ажер тиҙҙән улар кисергән ауырлыҡтарҙы оноттора.

Ғәҙеллеккә тоғро ҡалып, Уралда баҡыр һәм тимер заводтары булыуы, шулай уҡ мәғдәнселеккә яраҡлы урындар табылыуының башлыса башҡорттар менән бәйле икәне хаҡында әйтеп үтергә кәрәк.

Көсәпкол ауылында ошондай ике мәғдән эҙләүсе башҡорт беҙгә килеп, алтын тауҙары вәғәҙә итте. Әммә беҙ йыш ҡына үҙебеҙҙең ҡышлауҙа башҡорттарҙың вәғәҙәләренә алдана инек; беҙ бесәй алтыны тип йөрөткән, күҙҙәренә ялтырап күренгәндә лә улар ысын алтынкөмөш, тип ҡабул итә. Шулай ҙа, бер нәмәне лә хурлама, тигәндә иҫкә алып, башҡорттар менән алтын тауына киттек. Ул Агиҙел ярынан ғибәрәт икән, әле аталған ауылдан 5 саҡырымда булып, Ҡыҙылъяр тип йөрөтөлә. Башҡорттар беҙгә бер ниндәй ҡоралһыҙ үҙҙәренең алтынын күп итеп ҡаҙып ташланы, ә ул аҡ колчедан булып сыҡты...

Агиҙел йылғаһы ярын ҡалдырып, Сәйтәк тип исемләнгән башҡорт ауылына йүнәлдек. Беҙ бында ҙур булмаған Болаҡ йылғасығы буйына йәйләүгә сыҡҡан башҡорттарҙы осраттыҡ. Көнитмештәре үҙгәргәнлектән, беҙгә уларҙың мөнәсәбәттәре үтә шәп булыр кеүек тойолгайны. Йәйләүҙә үҙҙәре эскән ҡымыҙ тәьҫиренән улар етди һәм һөйләшеп бармаҫ халәткә инде, һәм үҙебеҙҙең юлыбыҙ өсөн кәрәкле нәмәләрҙе алыр өсөн беҙ үтә ағымлы булырға мәжбүр булдыҡ. Әммә ағымлы мөнәсәбәтебеҙ беҙгә терәк булманы, тик ҡаты киҫәтеү, ҡыҫҡырыуы ҡулланырға мәжбүр булыуыбыҙ менән теләгән нәмәләребеҙҙе тиҙ арала алыуға өлгәштек: оло юлдарҙан алыҫ йәшәүсе башҡорттар юлаусылар тураһында яңылыш фекерҙә булып, үҙҙәре менән уҫал тотҡандарҙы ғына ысын һәм хаҡлы рәүештә юл йөрөүселәр, тип иҫәпләй. Беҙҙең юл күрһәтмәһе ҡағыҙы уларҙың шаулашыуын арттырып ебәрҙе, сөнки уның татарса тәржемәһе булһа ла, төйөндәре юҡ ине: бында уҡый белеүселәр һирәк булғас, юл күрһәтмәһендә кем нисә ылау бирергә тейеш, шунса төйөнө булған бау һүрәтләнә; ошо төйөндәр башҡорттарҙа губернатор йәиһә воевода ҡағыҙҙарынан да мөһимерәк, тип һанала.

Ошо ауылдан 30 саҡырымдар тирәһе ситтәрәк Төйбәмәш йылғаһына ҡойоусы шәп ағымлы Берғамыт йылғасығы буйында Хазина исемле башҡорт ауылы бар. Ул ошо ауылды уратып алған Тирмән Тау һыртындағы ҡарап таныышыуға лайыҡ мәмерйәһе менән билдәле. Ошо ауылға беҙ төштән аҙаҡ барып еттек һәм йәйләүгә күсеп өлгөрмәгән башҡорттарҙы осраттыҡ; уларҙы мәмерйәгә юл күрһәтеүгә ауырлыҡ менән күндерә алдыҡ: улар миңә билдәһеҙ сәбәптән мәмерйә ҡарауҙы ниндәйҙер мөһим ғәмәлгә һанап, быны үҙҙәренең тенкәһенә тейерлек эш булыр, тип хәүефләнде. Ошо саҡта линия хеҙмәтендә йыш булып, ярайһы уҡ урыҫлашҡан йөҙ башы (сотник) әлеге башҡорт ауылында ине, һәм ул беренсе булып беҙҙе оҙата барырға ризалыҡ бирҙе; уның артынан башҡалар ҙа эйәрҙе. Шулай итеп, беҙ уҡ-һаҙаҡтар менән ҡоралланған башҡорттар менән, һөжүмгә барғандағылай, мәмерйәгә табан ҡуҙғалдыҡ.

**(Дауамы.**
**Башы 21-22-се, 24-25-се, 27-се һандарҙа).**

ВӘЛИДИ КӨРӘШТӘШТӘРЕ



# ХӘСӘН ӘХМӘРОВ



**Хәсән Нурый улы Әхмәров - Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан, революцияға тиклем батша армияһында полковник дәрәжәһенә күтәрелгән башҡорт офицеры. Ул 1866 йылда Ырымбур ҡалаһында тыуған.**

Ҡалалағы Неплюев кадет корпусын (әйткәндәй, бында башҡорттоң күп кенә данлы улдары белем алып сыҡҡан) һәм хәрби училище тамамлай. Революцияға тиклем 49-сы Себер уҡсы бригадаһында полк командиры булып хеҙмәт итә. Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә 1918 йылдың йәйендә ҡушыла.

Башҡорт хөкүмәте уны үҙенең уполномоченныйы итеп Үҫәргән кантонына ебәрә. 1919 йылда Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡандан һуң, Һамар ҡалаһында урынлашҡан Көнсығыш фронттың Көньяҡ төркөмө штабындағы Башревком вәкиле Муллаян Халиҡовтың хәрби эштәр буйынса ярҙамсыһы итеп тәғәйенләнә. Бында ул башҡорт ғәскәрҙәрен ойоштороу һәм тәьмин итеү эштәре менән шөғөлләнә. Артабан Хәсән Әхмәров Башҡортостан хәрби эштәр комиссариатына тәьминәт булеге начальнигы ярҙамсыһы сифатында Саранск ҡалаһына күсерелә.

1919 йылдың йәйендә Башҡортостандың көнбайыш өлөшө аҡтарҙан азат ителгәс, Бәләбәй ҡалаһында Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһын ойоштороу эше башлана. Әхмәтзәки Вәлиди бригаданы ойоштороуҙы тәжрибәле полковник Әхмәровҡа йөкмәтә. "Полковник Әхмәров 5 июндә Бәләбәйгә килгәс тә, хәрби хеҙмәткә саҡырыу иғлан итеп, 3-сө һәм 4-се йәйәүле һәм 3-сө һыбайлы полктар ойоштора башлаған. Фрунзе ҡорал һәм башҡа кәрәк-яраҡтарҙы мул биргәйне...", - тип яҙа Зәки Вәлиди "Башҡорттар тарихы" китабында.

1919 йылдың августа полковник Әхмәровтың тырышлығы менән Бәләбәйҙә өс полктан торған Башҡорт уҡсылар бригадаһы һәм Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһының 3-сө полкы ойоштоpола. 17 августа Хәсән Әхмәров Хәрби эштәр буйынса комиссариаттың фарманы менән Башҡорт уҡсылар бригадаһына командир итеп тәғәйенләнә. 1919 йылдың сентябрендә, Петроград фронтында Ҡыҙыл Армияның хәле хәртәйеү сәбәпле, Реввоенсовет рәйесе Троцкий Зәки Вәлидигә башҡорт ғәскәрҙәрен Петроградҡа ебәрергә бойора: "Троцкий Бәләбәй ойоштоpолған 3-сө һәм 4-се йәйәүле, 3-сө һыбайлы полктарҙы Петроградҡа һөжүм итеүсе генерал Юденичҡа ҡаршы ебәреүҙе талап итә. Мин ул ғәскәрҙе өйрәтеү, кәрәк-яраҡ менән тәьмин итеү эштәренең әле тамамланмауын әйтеп, полковник Әхмәровҡа хәҙергә ике батальонды бер-ике аҙна эсендә әҙерләргә әмер бирергә иттем. Бәләбәйҙәге полковникты телеграфҡа саҡыртып, хәлде аңлаттым. Ул хәҙергә хатта ике батальондың да әҙер түгеллеген белдерҙе. Мин быны иртәнсәк Троцкийға еткерҙем. Был иһә башҡорт ғәскәренең Юденичҡа ҡаршы һуғышта ҡатнашыуының башланғысы ине", - тип яҙа Вәлиди.

Тулыһынса ойошторолоп бөтмәүгә ҡарамаҫтан, Ленин менән Троцкийҙың бойороғона буйһоноп, 1919 йылдың 15 сентябрендә Башҡортостандың Хәрби эштәр буйынса комиссариаты башҡорт ғәскәрҙәрен Петроградҡа ебәреү тураһында фарман сығара. Унда былай тиелә: "§. 2. Командиру Отдельной Башкирской Стрелковой Советской бригады тов. Ахмерову развернуть в Петрограде 1-й и 2-й Башкирские Стрелковые Советские полки, использовав для этой цели прибывающие пополнения из Запасного Стрелкового Башполка и изъяв из Сводного Башкирского полка всех служивших в 1-м и 2-м Башкирских Стрелковых Советских полках.

§. 4. Прибывающему в Петроград 3-му Башкирскому Стрелковому Советскому полку совместно с развертываемыми 1-м и 2-м Башкирскими Стрелковыми Советскими полками составить Отдельную Башкирскую Стрелковую Советскую бригаду".

Шулай итеп, полковник Әхмәров 1919 йылдың сентябрендә Петроградҡа килеп, Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы полктарын артабан ойоштороу эше менән мәшғүл була. Һөҙөмтәлә 1919 йылдың октябрь аҙағында: "Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһының (командиры Әхмәров иптәш): 1-се полкы - 36 комсоставтан, 1650 штыктан, 3 пулеметтан; 2-се полкы - 47 комсоставтан, 2160 штыктан, 2 пулеметтан; 3-сө полкы 25 комсоставтан, 950 штыктан, 7 пулеметтан тора ине", - тип яҙа үҙенең китабында Муса Мортазин.

1919 йылдың октябрендә Юденичҡа ҡаршы һуғышҡа Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһынан 3-сө полк ебәрелә. Ул Айырым башҡорт кавалерия дивизияһынан 3-сө кавалерия полкы һәм дә Айырым Башҡорт артиллерия дивизионы менән Петроград фронтының Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмөн тәшкил итә.

Юденич армияһы ҡыйратылғас, 1920 йылдың февралендә Хәсән Әхмәров Башҡорт уҡсылар бригадаһын Хәлил Әлишевҡа тапшырып, Башҡортостанға ҡайта. Бында уға Зәки Вәлиди тағы ла яуаплы вазифа йөкмәтә. Уны Башҡорт республикаһының запас ғәскәрҙәре идаралығы начальнигы итеп тәғәйенләй. Полковник Әхмәровтың командалығында Башҡорт запас уҡсылар полкы, Айырым Башҡорт уҡсылар батальоны, Айырым Башҡорт запас кавалерия дивизионы, Айырым Башҡорт эскадроны, Айырым Башҡорт енел батареяһы һәм башҡа частар, йәмғеһе 10 мең кешелек ғәскәр була. Уларҙы төрлө кәрәк-яраҡтар менән тәьмин итеү, өйрәтеп, әҙерләп һуғышҡа оҙатыу эштәре менән булыша.

1920 йылдың октябрендә республиканың запас ғәскәрҙәренең байтағы көнбайыш фронтҡа оҙатыла, идаралыҡ бөтөрөлә. Полковник Хәсән Нурый улы Әхмәровтың артабанғы яҙмышы билдәһеҙ.

**Азат ЯРМУЛЛИН.**

## Тәүкешеләр беҙ

Дастанды яңыраҡ тағы ла уҡып сыҡтым да, "Урал-батыр" - бөтә донъя мәҙәниәте ҡаҙанышының иң даһи әҫәре, иң даһи ҡомартҡыһы, тигән фекеремә ҡабаттан инандым. Һығымталарымды ҡыҫҡаса ғына тәҫдиҡ итәм.

Барлыҡ илдәрҙең ғалимдары раҫлауынса, һынар ғына булһа ла эпос (йәғни дастан) ижад иткән милләт - тарих башланмышынан бирле йәшәгән халыҡ һанала. Төп милли эпосыбыҙ "Урал-батыр"ға ҡушып, "Аҡбуҙат", "Минәй батыр менән Шүлгән батша", "Заятүләк менән Һыуһылыу", "Алпамыша", "Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу", "Аҡһаҡ ҡола", "Ҡуңыр буға" һәм башҡа ике тиҫтәнән ашыу дастандарыбыҙҙы һәм иртәктәребеҙҙе лә иҫәпләһәк, башҡорт халҡының йәш арауығы әллә нисәмә меңъйыллыҡтар төпкөлөнә барып тоташа, тигән һүҙ был. Былай тип әйтер өсөн бушалағайымға ғына тел сарлап маһайыу ҙа, шапырыныу ҙа кәрәкмәй, был иҫбатлауҙы ошо эпос-дастандарыбыҙҙың йөкмәткеһе, сюжет ҡоролошо, уларҙа тасуир ителгән хәл-ваҡиғалар үҙҙәре үк һөйләп тора. Эйе, беҙ, башҡорттар, Ер йөҙөндәге иң боронғо, иң оло халыҡтарҙың береһебеҙ, бугай. "Урал-батыр" эпосында, мәҫәлән, Туфан һыуы ҡалҡҡанға тиклемге һәм Туфан һыуы һүрелеп, әйләнә-тирәлә ҡоро ер хасил була башлағандағы дәүер телгә алына. Әгәр ҙә мәгәр логика буйынса фекер йөрөтәбеҙ икән, шул асыҡлана: эпосты иң беренсе булып ижад итеүсе шәхес (автор тиекме уны, сәсән тиекме) ошо факттарҙы үҙ күҙҙәре менән күрепбелгәне өсөн, ошо хәл-әхүәлгә шаһитлыҡ ҡылғаны өсөн бәйән итә ләһә был хаҡта! Аҙаҡтан ғына эпос, бер авторҙың ижадынан икенсеһенең ижадына мираҫ булып ҡала-ҡала, бер ауыҙҙан икенсеһенә күсә-күсә, беҙҙең көндәргә хәтлем килеп еткән.

# ДАСТАНЛЫ ХАЛЫҠ...

## тарих башланмышынан алып йәшәгән халыҡ

Хәтерегеҙгә дастандың тәүге юлдарын төшөрөгөҙ : "Борон-борон-борондан, /Кеше-маҙар булмаған, / Килеп аяҡ баҫмаған / Ул тирәлә ҡоро ер / Барлығын һис кем белмәгән), /Дүрт ягын диңгеҙ уратҡан / Булған, ти, бер урын. / Унда булған, ти, борон / Йәнбирҙе тигән ҡарт менән / Йәнбикә тигән бер ҡарсыҡ.../ Был ҡарт менән был ҡарсыҡ / Ҡайҙан бында килеүен, / Ата-әсә, ер-һыуы / Ҡайҙа тороп ҡалыуын / Үҙҙәре лә онотҡан, ти..."

Йә булмаһа, Йәнбирҙенең: "Ерҙең өҫтөн һыу ҡаплап, / Ҡаҫҡан-боҫҡан кешеләр / Ул тирәнән киткән һуң..." - тигәнен, йәки: "Беҙ килгәндә, бында әле / Йәнлектәр ҙә аҙ ине, / Ере лә йүнле кипмәгән, / Ваҡ-ваҡ күллек, һаҙ ине..." - тип әйткәнен ни тип аңларға? Минеңсә, тура мәғәнәһендә аңларға кәрәк: донъяны Туфан һыуы баҫып алыуы, аҙаҡтан Туфан һыуының ҡайтыуы тураһында һүҙ бара бында!

Әлмисаҡ замандарҙа Ер йөҙөндә фәнни телдә шартлы рәүештә кроманьонсылар һәм неандерталселәр тип аталған, хәҙер археологтар тарафынан фәҡәт һөлдәләре генә тупраҡ ҡатламдары араһынан ҡаҙып алып өйрәнелгән ике аяҡта йөрөгән йән эйәләренең, йәғни неантроптарҙың, беҙҙең көндәрҙән йөҙҙәрсә мең йылдар әүәл йәшәгәнлеге билгеле. Уларға алмашҡа 30-40 мең йылдар элек һомо сапиенстар (йәғни аҡыл-аң менән эш итеүселәр, беҙҙең кеүек үк әҙәми заттар) килгән, ти ғалимдар. Дөрөҫтөр был. Сөнки Ҡөрьән дә, башҡа диндәрҙең изге китаптары ла шул турала һөйләй бит! Аллаһы Тәғәлә беҙҙе тәүкешеләр итеп, аҡыл эйәләре итеп яратҡан.

## Тыуыу тураһында таныҡлыҡ ул

"Урал-батыр" дастанының төп персонаждары - Йәнбирҙе менән Йәнбикә нәҡ ана шул һомо сапиенстарҙың, яңы дәүер кешеләренең, башланмыш тарихын сағылдыра, ахыры. Һомо сапиенстар беҙҙең бөгөнгө көндәрҙән әллә ни алыҫ түгел бер осорҙа, йәғни беҙҙең эраға тиклемге 11650-се һәм 11542-се йылдар араларында (яҡынса йөҙ йылдан ашыуыраҡ ваҡыт һуҙымында) Туфан ҡалҡыу һәләкәтен кисерәләр ҙә инде. Был һәләкәт хаҡында тау дәүмәле ғилми әҙәбиәт бар. Климатология, гидрография, археология асыштарына һәм мәғлүмәттәренә таянып, был һәләкәттең датаһын, мәҫәлән, яҙыусы һәм ғалим Александр Горбовский ҙа үҙ китабында тоҫмаллап күрһәтә (уҡығыҙ: "Загадки древнейшей истории", "Знание" нәшриәте, Мәскәү, 1971, 28-се бит).

Тимәк, беҙҙең эраға тиклемге 11542 йылды һәм беҙҙең эраның бөгөнгө 2010 йылын бергә ҡушҡан хәлдә, Туфан һәләкәте бынан (бөгөнгө көндән!) яҡынса 13 мең ярым йылдар самаһы элек булған икән, тип фаразлаһаҡ, халҡыбыҙҙың башланмыш тарихы ла тап ана шул 13 мең ярым йылдар әүәлге заманға барып тоташа, тип әйтергә нигеҙ бар! Әлбиттә, ул тиклемге боронғо дәүерҙәрҙә беҙ, моғайын, бөтөнләй икенсе исем менән аталғанбыҙҙыр; балки, беҙҙе сираталап, тарихи осорҙарға ярайлаштырып, гиперборейҙар, массагеттар, савроматтар, сарматтар, этрусктар, скифтар, һундар, төркиҙәр тип йөрөткәндәрҙер... Был фекеремә бер дәлил: ана лаһа, Николай Карамзиндың "История государства Российского" исемле 4 томлыҡ китабында (әле ҡуптан түгел генә - яңы эраның урта быуаттарында ғына!) хәҙерге Башҡортостан һәм беҙгә күрше өлкәләр урынлашҡан ҙур территорияға "Торки " (йәғни: "Төркиҙәр") тигән карта ғына төшөрөлгән; беҙ ҡөҙрәтле һәм көслө ҡәүем, тирә-яҡҡа нык билдәле ҡәүем булып йәшәһәк тә, ул хеҙмәттә халҡыбыҙҙың этнонимы сифатында башҡорт һүҙе бөтөнләй ҡулланылмай; Карамзиндың хеҙмәтендә мин Каспий диңгеҙенән төньяҡта йәйрәп ятҡан ҙур илдең хакимы - бер хандың исем-шәрифе генә Башҡорт тип аталыуын осраттым. Әммә-ләкин эштең әтнәкәһе беҙҙе боронғо замандарҙа кем тип, нисек тип атауҙа түгел, эштең иң төп асылы - "Урал-батыр" тигән аҫылдарҙан-аҫыл ҡомартҡыны һәм егерменән ашыу дастан-иртәктәрҙе беҙҙең даһи халҡыбыҙ тыуҙырыуында һәм быуаттарҙан-быуаттарға юғалтмай һаҡлап алып килеп, бөгөнгө көнгә еткереүендә! Халҡыбыҙҙың был тиңһеҙ ҡаһарманлығы менән беҙ хаҡлы рәүештә ғорурланырға тейешбеҙ! Халҡыбыҙ - боронғо халыҡ, тарихҡа йәштәш халыҡ, мәшһүр эпостар ижад итеүсе талантлы, шөһрәтле-шанлы халыҡ!



Эйе, эпос ул (донъя ғалимдары хаҡты раҫлай!) - милләттең йәшен билдәләүсе тыуыу тураһындағы таныҡлыҡҡа, паспортҡа тиң ҡомартҡы ! Быны онотorға тейеш түгелбеҙ!

**_Фараз буйынса 13 мең йылдан ашыу тарихыбыҙ була тороп та, ниңә әле беҙ, башҡорттар, үҙ боронғолоғобоҙҙо үҙебеҙ оран һалып, бар донъяға ҡысҡырып иҫбат итергә тартынабыҙ?! Тартынабыҙмы, әллә үшәнлек еңәме беҙҙе?! Халҡыбыҙҙың йәш кимәлен меңәр йылдар үлсәме менән иҫбатлаусы матди һәм рухи миҫалдарға таянып, етди тикшеренеүҙәр алып барған, шул тикшеренеүҙәрҙе үҙ хеҙмәттәрендә һәм китаптарында ҡат-ҡат баҫтырып сығарған Йыһат Солтанов, Салауат Ғәлләмов, Нияз Мәжитовтарҙың фекеренә ни өсөн беҙ ҡолаҡ һалмайбыҙ, уларҙың асыштарын ниңә ихласлап күтәрмәләмәйбеҙ?!_**

## Боронғолоғобоҙ оран һалырлыҡ

Фараз буйынса 13 мең йылдан ашыу тарихыбыҙ була тороп та, ниңә әле беҙ, башҡорттар, үҙ боронғологобоҙҙо үҙебеҙ оран һалып, бар донъяға ҡысҡырып иҫбат итергә тартынабыҙ?! Тартынабыҙмы, әллә үшәнлек еңәме беҙҙе?! Халҡыбыҙҙың йәш кимәлен меңәр йылдар үлсәме менән иҫбатлаусы матди һәм рухи миҫалдарға таянып, етди тикшеренеүҙәр алып барған, шул тикшеренеүҙәрҙе үҙ хеҙмәттәрендә һәм китаптарында ҡат-ҡат баҫтырып сығарған Йыһат Солтанов, Салауат Ғәлләмов, Нияз Мәжитовтарҙың фекеренә ни өсөн беҙ ҡолаҡ һалмайбыҙ, уларҙың асыштарын ниңә ихласлап күтәрмәләмәйбеҙ?! Ни өсөн битарафбыҙ беҙ?! Ошо ҡыйыу шәхестәребеҙҙән мөйөш-һәйештәрҙә тороп, шырҡ-шырҡ көлгән булабыҙ ҙа, тарихилыҡҡа, быуаттар төпкөлөнә мөрәжәғәт итеп, ниңә үҙебеҙ бер аҙым да яһамайбыҙ?!

Йә, ярай, мин "Урал-батыр" һәм бүтән дастандарыбыҙҙың йөкмәткеһен һөйләп сығырға йыйынмайым. Минең әйтәһе һүҙем - бөтөнләй икенсе юҫыҡта. Һуңғы ваҡытта Интернет каналдарында башҡорт милләтен мыҫҡыллап сығыш яһауҙар, "Уфа-губъ", "Уфа-губерния" кеүек сайттарҙа беҙгә, беҙҙең тарихыбыҙға бысраҡ ағыуҙар ҡөбәйҙе, тип хәбәр итә гәзиттәр : йәнәһе лә, башҡорттар тотошлайы ғына меҫкен һәм назан халыҡ, имеш... Ә нинә "Уфа-губъ", "Уфа-губерния" һәм шулар ише әшәке программаларҙы ватып-емереп кереп, шул мәсхәрәле сығыштарҙың йәнәшәһендә үк (бик күптәргә фәһем булһын өсөн!) "Урал-батыр"ҙың һәм бүтән егерменән ашыу эпостарыбыҙҙың, башҡа гүзәл фольклор ҡомартҡыларыбыҙҙың йөкмәткеһен һәм бөйөклөгөн һөйләгән мәғлүмәттәр, ошо мәҙәни байлыҡтарҙы тыуҙырыусы даһиҙарҙан даһи башҡорт халҡы тураһында белешмәләр биреп бармаҫҡа?! Шулай иткәндә, өрөп-шыңшып беҙҙе тешләп маташыусы, үҙҙәренең бысраҡ яҙмаларында ерәнгес ҡуралмауcанлыҡ, назанлыҡ сәсеүсе бәндәләргә ҡаршы беҙҙең яуабыбыҙ төплө лә, лайыҡлы ла булыр ине ләһә! Компьютер техникаһын яҡшы белгән илһөйәр рухлы йәштәребеҙ ҡайҙа беҙҙең?! Был бурысты тап бына улар, йәштәр, башҡарырға тейеш, минеңсә.

## Бүлмәйек!

"Урал-батыр" һәм бүтән рухи хазиналарыбыҙға ҡағылышлы йәнә лә бер күҙәтеүем менән уртаҡлашмаҡсымын. Бөгөн республикабыҙҙа теге йәки был мәҙәни ҡомартҡыларыбыҙҙы анау ырыуҙыҡы, бынау ырыуҙыҡы тип бүлгеләүҙәр, өләшеп алырға тырышыуҙар тенденцияһы башланды. Дебет (мамыҡ) шәл, имеш, үҫәргәндәрҙеке генә; ҡурай, йәнәһе, тәнгәүерҙәр уйлап сығарған мөғжизә; эпостарыбыҙҙы, имеш тә мимеш, фәҡәт бөрйән ҡәбиләһе генә ижад иткән; кейеҙ баҫыуҙы, йәнәһе, тамъяндар башлаған; аҫалы балаҫ һуғыу, имеш, мең ҡәүемекен генә шөғөлө... Йәнәһе, башҡа ырыуҙар халҡы дебет шәл дә ябынмаған, ҡурай ҙа уйнай белмәгән, эпостар ҙа тыуҙырмаған, кейеҙ ҙә түшәп ятмаған, аҫалы балаҫ та һуҡмаған... Был турала матбуғат баҫмаларында күпләп мәҡәлә ойоштороп та шау-шыу киләләр, сәхнәләрҙән дә тороп дыу ҡуптаралар...

Теге йәки был мәҙәни ҡомартҡының тәүбашлап барлыҡҡа килеүендә, әлбиттә, айырым төбәктәрҙең әүҙемлеге, айырым шәхестәрҙең ижади роле бәхәсһеҙ нәмә. Ләкин ни өсөн әле, Марк Твен геройҙары Том Сойер менән Гекльберри Финн үле ҡомаҡты ҡойроғонан һөйрәтеп алып йөрөткән

шикелле, "беҙҙеке!" йә "минеке!" тигән һөрһөп бөткән дәғүәләрҙе һөйрәтәбеҙ ҙә сығарабыҙ, һөйрәтәбеҙ ҙә сығарабыҙ? Мәҫәлән, 1975 йылда халыҡ артисы Мулләйән Сөйәрғоловтың 60 йәше уңайы менән үткәрелгән Өфөләге юбилей кисәһендә (кисәнең барышы аҙаҡтан телеэкранда бер нисә тапҡыр ҡабатланды) шағирә Таңһылыу Ҡарамышева : "Урал-батыр" менән "Аҡбуҙат" эпостары Бөрйән районы ерлегендә, Шүлгән күле тирәһендә ижад ителгән !" - тип алабарман белдереү яһап аптыраттҡайны. Шағирәнең дәғүәләрен мин "Башҡортостан" гәзитенән 1976 йылғы 18 июль һанында "Урал-батыр"ҙы беҙгә еткергән ул" тигән мәҡәләмдә тәнҡитләп яҙып сыҡҡайным... Таңһылыу Ҡарамышеваның һүҙҙәрен быйыл "Башҡортостан" гәзитенең апрель айындағы ике номерында хөрмәтле ғалимыбыҙ Әхмәт Сөләймәнов йәнә ҡабатланы : "Бөрйән-Шүлгән ере - милли эпостар иле", - тип ҡәтғи рәүештә тәкрәрләй ул. Төптәнерәк уйлап ҡарағанда, "Урал-батыр", "Аҡбуҙат" һәм башҡа дастандарыбыҙ донъяға тыуған саҡтарҙа Бөрйән тигән һүҙ, Бөрйән тигән төшөнсә үҙе булдымы икән әле? Ә ошо милли эпостарҙы һаҡлап алып ҡалып беҙгә еткереүсе бүтән сәсәндәрҙең (йәғни текстарҙы артабан да шымартыпэшкәртеп бәйән итеүсе һүҙ оҫталарының, икенсе төрлө әйткәндә, иң беренсе ижадсының авторҙаштарының) Бөрйән төбәгенән булмауын нисек аңлатырға? Мөхәмәтша Буранғоловҡа һылтанайыҡ: бөйөк эпостарҙы сал быуаттар төпкөлөнән отоп алып, быуындарҙанбыуындарға еткереүсе реаль кеше - Ишмөхәмәт Мырҙаҡаев-Балапановтан башҡа бүтән берәй шәхестең исеме быға са башҡорт фольклористикаһында мәғлүм түгел бит! Әйҙә, ярай, шартлы рәүештә генә булһа ла Ишмөхәмәт сәсәндең гипотетик остазы Байыҡ сәсәнде лә ошо исемлеккә индерәйек, ти. Мәгәр Ишмөхәмәт сәсән - Әбйәлил яҡтарынан, Байыҡ сәсән - хәҙерге Салауат районы биләмәләренән... "Урал- батыр" эпосында, мәҫәлән, башҡорт теленең күбәләк һөйләше һүҙҙәре, Әбйәлил тарафтарындағы топонимик атамалар бихисап. Был хәҡиҡәтте нисек итеп аңлатырға йәки кире ҡағырға һуң?

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөгөнгө тарҡылашыуҙар тенденцияһы, минеңсә, бик аҫтыртын, бик усал, бик ҡурҡыныс нәмә: теге йәки был милли-мәҙәни байлыҡтарыбыҙҙы "беҙҙеке!" лә "беҙҙеке!" тип бүлгеләй башлаһаҡ, артабан да шулай ҡыланһаҡ, реакцион шовинистарҙың "Разделяй и властвуй! А потом уничтожай!" тигән тирмәнәнә мул итеп һыу ғына ҡояσаҡбыҙ: беҙҙе патологик рәүештә күрә алмаған, беҙҙе сәйнәп төкөрөргә ашҡынып йөшәгән даирәләрҙең татлы хыялы (беҙҙе айырым ырыуҙарға тарҡатып, берәм-берәм юҡ итергә тырышыуҙары!) бик тиҙ арала тормошҡа ашыуы ла ихтимал. Әгәр ҙә мәгәр беҙ быны теләмәйбеҙ икән, ырыуҙарҙы бер-береһенән өҫтөн ҡуйыуҙы, ырыуҙар идиллияһын күккә күтәреп маҡтауҙы туктатырға кәрәк, ырыуҙар флагын һелтәмәйенсә, киреһенсә, берҙәм халыҡ, берҙәм милләт (единый башкирский народ, единая башкирская нация) байрағын юғарыраҡ күтәрергә, берегеп, тупланып йәшәргә бурыслыбыҙ!**

**Башҡорт халҡының бөгөн милли идеяһы юҡ, тип ҡаңғырабыҙ... Ҡабатлап әйтәм: ырыуҙар идеяһы түгел, ә ҡаҡшамаҫ берҙәм халҡыбыҙ идеяһы беҙҙең йөрәгебеҙ ҡәғбәһе булырға тейеш! "Урал-батыр" эпосы ла, бүтән аҫылдарҙан-аҫыл рухи байлыҡтарыбыҙ ҙа, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙ ҙә, йола-ырымдарыбыҙ ҙа, һәммәһе лә, һәммәһе лә - беҙҙең, барса башҡорттарҙың, бөтә халҡыбыҙҙың, дөйөм ырыуы ул. Беҙ ошо берҙәмлек, ошо тупланғанлыҡ менән көслө һәм ҡеүәтле булырға саҡырылғанбыҙ!**

**Әсхәл ӘХМӘТ-ХУЖА.**

# "ТЕЛ", ТИП ТЕЛМӘР ТОТАЛАР ҘА,

## тик ... балалары телде белмәйҙәр

**Булып үткән Өсөнсө Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы, күңелдәргә әйтеп бөткөһөҙ тәьҫораттар эркелдереп, милләтебеҙ өсөн сикһеҙ ғорурлыҡ тойғолары уятты. Башҡорттарыбыҙҙың иң кәрәк ваҡытта, иң мөһим урында, йөрәгендә һаҡлаған иң мөһим һүҙен ярып әйтә алыуына тағы ла бер тапҡыр инандым. Әлбиттә, Рәсәй баш ҡалаһындағы иң юғары урынды биләүселәр, "демократ" булып уйнаусылар, Башҡортостан һәм башҡа республика-өлкәләрҙең суверенитетын сүп урынына күрмәсқә тырышыусылар бөтә донъянан йыйылған башҡорттарҙың, шулай уҡ республикала йәшәгән башҡа милләт вәкилдәренең хаҡ һәм гәҙел дәғүәләрен ишетмәмешкә һалышасаҡ. Ләкин, халҡыбыҙ әйтмешләй, һаңрауҙы ла ишеттерер дарыу бар - уны уларға туктауһыҙ тамыҙып торорға кәрәк. Ә быға милләтебеҙҙең түҙемлеге лә, зирәклеге лә, көс һәм аҡыл ҡеүәһе лә етәсәк!**

Был әйткәндәрем - ғорурлыҡ уятҡан ҡоролтай тураһында дөйөм тәьҫирем. Тәьҫирҙәремдән тыш, уйланыу-борсолоуҙарым да, бер ни тиклем тәҡдимдәрем дә бар. Сөнки алда тағы ла ҡоролтайҙар үтәсәгенә ышанам.

Иң тәүге дәғүә һәм тәҡдимем - Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына һайланған делегаттар хаҡында. Уларҙың бик күптәре, минеңсә, беренсе һәм икенсе ҡоролтайға һайланған вәкилдәрҙән тора. Биш йылға бер үткән бындай ҙур форумға бер тапҡыр ғына һайланыу ҙа оло мәртәбә ул. Делегатлыҡҡа лайыҡ, хөрмәтле, арҙаҡлы шәхестәр әҙме ни беҙҙә?! Мин бында ошо ҡорҙо ойоштороусыларҙы, башҡорт халҡы өсөн ғүмерен, хеҙмәтен, бөтә тормошон, талантын арнаған делегат-шәхестәрҙе күҙ уңында тотмайым. Уларҙың ҡоролтайҙар үтер инеме ни! Һүҙ "башҡорт" тиеп дөйөм һүҙ һөйләүсе, әммә тормоштарында, ғаиләләрендә башҡортлоҡто тота алмаған кешеләр тураһында бара. Улар академик, профессор, атаҡлы яҙыусы, арҙаҡлы сәйәсмән, сәнғәт йондоҙо - кем генә булмаһын, ғаиләһендә уның менән үҙ телендә һөйләшерлек, уҡырлыҡ, хатта әйткәнен генә аңларлыҡ бала үҫтерә, уға милли тәрбиә бирә алмай икән, был инде һәр яҡтан мәғәнәһеҙлек һәм мәҙәниәтһеҙлек тип уйлайым. Мин ошо "Киске Өфө"лә ундайҙар тураһында шиғыр ҙа баҫтырғайным. Унда шундай юлдар ҙа бар:

"Тел" тип улар телен талдыралар,

Хеҙмәт яҙа, тота телмәрҙәр.

Тик шуныһы: туған телдәрендә

Балалары бер һүҙ белмәйҙәр.

Ҡыҙғаныսҡа ҡаршы, делегаттар араһында бына шундай "башҡорт милләтен үҫтереүселәр" ҙә байтаҡ күренде.

Милләтте тотоп торған, үҫтергән - ул ғаилә. Шулай булды, шулай булып ҡаласаҡ! Әсә телендә тәрбиәләгән, уҡытҡан күпме генә балалар баҡсалары, мәктәптәр асылмаһын, һүҙҙәр һөйләнмәһен, дәреслектәр, методик әсбаптар сығарылмаһын - улар әсә-ата теләгән ғаилә йөгонтоһон бер нисек тә алмаштыра алмаясаҡ. Башҡортто ла, башҡа милләт вәкилдәрен дә һәр йәһәттән үҫтереүҙә төп сығанаҡ булып ғаилә торасаҡ. Был - тормош раҫлаған хәҡиҡәт!

Быны шуға ла киләһе ҡоролтайҙа биш һәм унан да күп балалар үҫтергән иң өлгөлө ғаиләләрҙән - ата-әсәләрҙән дә күпмелер дәрәжәлә делегаттар мотлаҡ булырға тейеш, тип уйлайым. Беҙгә биләгән урыны, мәнфәғәтенән сығып, дөйөм һүҙҙәр һөйләп, башҡа милләтте арттырып йөрөүсе "дәрәжәле башҡорттар" түгел, бер-береһенә яҙмыштарын бәйләп, халҡы өсөн патриот балалар үҫтергән, бөтә йәһәттән өлгө була алған ысын милләт вәкилдәре кәрәк! Шундайҙарҙы йыйғанда, ҡоролтайҙарыбыҙ ҙа мәртәбәлерәк буласаҡ.

Башта әйткән ғорурлығымдың тағы ла бер сәбәбе - Өсөнсө Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы йәштәргә бөтә йәһәттән ҙур ышаныс күрһәтеп, ҡалай яҡшы эшләгән. Йәштәр үҙҙәрен тотошо, бигерәк тә ҡыйыу сығыштары, аныҡ уй-фекерҙәре, тәҡдимдәре, ҡорған пландары менән, минеңсә, күрһәтелгән өмөт-ышанысҡа лайыҡ булдылар. Ун ике мең башҡорт егете һәм ҡыҙҙарының, башҡорт ғаиләһе ҡороп, һәр береһе кәмендә бишәр балаға йән биреп, милләтебеҙҙе үрсетеүгә йүнәлеш тотҡан аныҡ план ҡороуы ғына ла маҡтауға һәм данлауға лайыҡ. Ышанам - һүҙ генә булып ҡалмаҫ был! Милләт шулай аныҡ план ҡороп алға атларға тейеш! Атай-бабайҙарыбыҙ иң кәрәкле мәлдә, иң кәрәкле мәсьәләләрҙе шулай ҡорған, шулай еңеп сыҡҡан.

Оҙаҡ ваҡыт матбуғат баҫмаларында эшләгән журналист һәм яҙыусы булараҡ, ошо хаҡта ла бер нисә уй-фекерем бар. Заман башҡа - заң башҡа, ти халыҡ. Компьютер һәм башҡа алдынғы техника килеп инеү, әлбиттә, иҫ киткес алға китеш, әммә бер үк ваҡытта матбуғат баҫмалары өсөн артҡа китеш күренештәре лә бар. Гәзит-журналдар, әҙәби китаптар уҡыу архаизм - боронғолоҡ, иҫкелек күренешенә әйләнеп бара. Миңә ҡалһа, быға ҡаршы ҡуйыр иң мөһим сара - журналистарҙың, яҙыусыларҙың, шағирҙарҙың, уҡытыусыларҙың, сәнғәт оҫталарының, ғөмүмән, зыялыларҙың, аҡыллы һүҙ һөйләй, әҫәрҙәрен уҡый белгән ижад кешеләренең осрашыуҙарын уҙғарыу был мәсьәләлә ҙур этәргес булыр ине. Әйтәйек, совет заманында Башҡортостан Яҙыусылар союзында әҙәбиәтте пропагандалау бюроһы эшләне. Күпме осрашыуҙар үтте! Теге йәки был шиғырҙы уҡығандан һуң, әйткәндәрегеҙҙе ҡайҙан уҡып, китабығыҙҙы ҡайҙан табып була, тигән һорауҙар менән мөрәжәғәт итеүселәр әҙ булмай торғайны.

Хәҙер гәзит-журналдарға яҙылыу эше бары редакцияла эшләүселәрҙең етәкселәр менән телефон аша һөйләшеүҙәренә, йәки ике, өс тапҡыр командировкаға сығып йөрөштөрөүҙәренә генә ҡайтып ҡалды. Был һирәк күренештә лә пассивлыҡ күҙәтелә. Совет заманында университетта, институттарҙа (хәҙер инде улар университет дәрәжәһендә) гөрләп үткән даими әҙәби кисәләрен дә хәҙер һағынып һөйләргә генә ҡала. Дөрөҫ, үткәрелә ундай кисәләр, тик улар ниндәйҙер дата-ваҡиғаға арналған була. Ундай сараларҙа ижад кешеһе асылып китә аламы ла, кәрәкле һүҙен еткерә аламы ни? Юҡ, әлбиттә!

Филармония, башҡа урындарҙа булған әҙәби кисәләргә хатта буласаҡ журналист-студенттарҙың, филологтарҙың бөтөнләй йөрөмәүе бөгөнгө көндә иң ғәжәп хәл, ысынбарлыҡ. Уҡыусыларына улар нимә һөйләр ҙә, нимә яҙырҙар икән?

Телевидениела ла элекке һөйбәт традицияларҙы тергеҙәһе ине. Башҡорт халҡының поэтик фекерләүе быуаттар буйы көслө һәм һәр саҡ үҫештә - һәр башҡорт йә шағир, йә йырсы, йәки бейеүсе булған. Бөгөн дә шуны раҫлап йәшәй, ижад итә халҡым. Хәҙер һәр быуынға, бигерәк тә йәш йырсыларға ҙур мөмкинлектәр асылды. Уларҙы зәңгәр экрандарҙан тәүлек әйләнәһенә күрергә мөмкин. Ә нинә шағирҙарға бындай мөмкинлек юҡ? Киреһенсә, был хәл телевидениеның мәртәбәһен генә күтәрер ине. Беҙ бит Мәскәү каналдарындағы бик түбән кимәлдәге юмор, сатира менән йәшәргә, күңел асырға тейеш түгелбеҙ. Башҡорттоң иң көслө, иң юғары рухы поэтик новаторлығы, сәсәнлеге шиғриәтендә нығыраҡ асыла. Быны иҫәпкә алмау - үҙ халҡың ижадына битараф булыуҙан, бер яҡлыраҡ һорауҙан киләлер, тип уйлайым.

Ғорурланыу ҙа, бына шундайыраҡ уй-фекерҙәр, әйтелер теләктәр ҙә тыуҙы өсөнсө тапҡыр үткәрелгән ҡоролтайҙан һуң. Алда тормошҡа ашырыр ҙур һәм етди эштәр, мәсьәләләр тора. Уны бары күмәкләшһәк, берҙәм булһаҡ ҡына башҡарып сыға алырбыҙ. Маҡсат берҙәмлеге, рух ныҡлығы булһын!

**Риф МИФТАХОВ.**

***✓ Ул ваҡытта Илһамды оҡшатмай ине... Ә хәҙер ул унан башҡа бер көн дә тора алмай. Шуға күрә... бер генә юл ҡала: көтөргә, барыһының да яҡшы тамамланырына өмөтләнергә, ысын күңелдән Алланан ярҙам һорарға.***




"Ы-ыһ! Ни ғәйептәрем өсөн язалайһың мине? Шулай уҡ әҙ генә бәхеткә лә хаҡым юҡмы ни?.." - тип иламһыраны китеп барышлай. Илһам... Күҙ алдына иренең мөләйем йөҙө килеп баҫты. "Ғәфү ит мине..." Ҡапыл уға барыһы ла төш кенә кеүек тойола башланы. Әйтерһең, Илһам - ни бары хыял һәм күҙҙәрен асыу менән юҡҡа сыҡты. Уның урынына Сәйеттең һөмһөҙ йөҙө генә тороп ҡалды. Резеданың йөрәге тағы ла нығыраҡ ҡыҫты. Илағыһы килде, әммә тамсы ла йәше сыҡманы, ауыр, ҙур бер төйөр булып тамағына килеп тығылды.

Резеда кухняға әйберҙәрен индереп ҡуйғас ҡына килеп сыҡты Сәйет. Күрәһең, йәшеренеп торған. Ҡарлыҡҡан тауыш менән:

- Йә, ашарға ҡасан әҙер була? - тип һораны. Резеда тиҙ генә банкалағы ашын бәләкәй кәстрүлгә бушатты, газды тоҡандырып, йылытырға ҡуйҙы, икмәк киҫәктәрен тәрилкәгә сығарып һалды. Һыуытҡыстан май, ҡайнатма кеүек ашамлыҡтар алып теҙҙе. Сәйнүкте ҡайнатырға ултыртты. Резеда иртән сығып киткәндән бирле йоҡлаған, ахырыһы, йөҙө иҙелеп, һөмһөрө ҡойолған, күҙ ҡабаҡтары баҡаныҡылай булып шешенгән, ҙур ирендәре һалынып төшкән.

- Ниңә оҙаҡланың? - тип ҡаштарын емерәйтте Сәйет. Резеда уның һорауын яуапһыҙ ҡалдырҙы. Һүҙһеҙ генә тәрилкәгә аш һалып, алдына ҡалаҡ ҡуйҙы. Шуның менән эшем бөттө тигән ҡиәфәт менән ишеккә ыңғайламаҡсы итте.

- Ҡайҙа киттең?! - Резеда ҡурҡышынан шып туҡтаны.

- Мин китәйем инде... - Уның бында бер минут та артыҡ торғоһо килмәй ине, тиҙерәк, тиҙерәк ҡотолорға...

- Мин ашап бөткәнсе эргәмдә ултыр!

Резеда бүлмә уртаһында ҡатып ҡалды. Бер аҙ торғас, тыныс ҡына тауыш менән, артына әйләнмәйенсә генә өндәште:

- Мине өйҙә көтәләр...

- Көтһөндәр! Минең унда эшем юҡ. Һин - минең ҡатын, мин һине һатып алдым. Кәрәк булһа, иреңә үҙеңде һатып бирермен, - Сәйет бөтөн тештәрен күрһәтеп ыржайҙы. - Йә, ултыр тим!

Резеда тағы бер аҙ торғандан һуң, барыбер һүҙен һүҙ итәсәк, иң һәйбәте - ҡыҙҙырмау, үсектермәү тип, үҙен көсләп тигәндәй Сәйеттең ҡаршыһына килеп ултырҙы. Тегеһе инде бер нәмәгә иғтибар итмәй ҡарһаланып ашарға керешкәйне. Нисек күрә алмай уны Резеда! Хәленән килһә, бына хәҙер үк муйынынан һығып ҡына үлтерер ине! Исмаһам, ер йөҙөндә бер енәйәтсе кәмер ине. Әммә ул - ҡатын, уларҙың көстәре тигеҙ түгел. Резеданың сәскә кеүек ғүмерен урланы бит ул! Туғандарынан, ата-әсәһенән айырҙы, тыуған еренә ҡайтмаҫлыҡ итте. Әллә үҙе ғәйеплеме ҡыҙ? Ирғәлене яратам, тип күҙҙәре томаланды түгелме? Мөхәббәт тигәне, нимә менән шөғөлләнеүе менән ҡыҙыҡһынманы. Хәҙер терһәген тешләрҙәй ҙә бит, тешләп булмай. Әллә тағы ла милицияға шылтыратырғамы, тигән сая уй килде Резеданың башына, әммә шунда уҡ кире һүрелде. Сәйет, һиңә бер кем дә ышанмаясаҡ, сөнки мине үле тип беләләр, тип әйтте бит... Унан, ҡурҡа... Ҡурҡа һәм ғәрләнә. Былай ҙа Илһамға барып ишетелеп ҡуймаһын тип кенә теләй. Сәйет барыбер бында оҙаҡ йәшеренеп ята алмаҫ, үҙе лә әйтте бит, артынан машина килергә тейеш. Шулай булғас, нимә тиһә лә, нимә эшләһә лә өнһөҙ булырға, түҙергә кәрәк. Резеда йылдар буйы сабыр итеп өйрәнгән инде.

Ашҡа һалынған ит киҫәген ҡулы менән алып, тәүге тапҡыр күргәндәй йәбеште Сәйет. Тәмләп, супылдай-супылдай һурҙы һөйәкте. Ҡулы буйлап әллә май, әллә һурпа аҡты, ауыҙ тирәләре майға ялтыраны. Ике тәрилкә ашты бер тынала ялт иттереп ҡуйғас, ғыҡ итеп кикереп алды ла, ҡулдарын йәйеп ебәреп, башын ҡайҡайтып, ултырғыстың артына һөйәлеп ултырҙы.

- Аһ, шәп булды. Кискелеккә тағы килтерергә онотма! Мунсаға ас ҡорһаҡҡа барырға яратмағанды беләһең! - тип бойорҙо Резедаға. - Сәй яһа!

Резеда тиҙ генә һөтләп, ул яратҡанса ҡуйы итеп сәй яһаны. Сәйет тирләп-бешеп кинәнес менән сәй шөрпөлдәтергә кереште.

- Һине үлгән, тигәйнеләр бит һуң?.. - Резеда Сәйетте күргәндән бирле борсоған һорауын бирҙе. - Бында нисек килеп сыҡтың?

- Үлгән? Ха-ха-ха! Мин һеҙҙең күбегеҙгә ҡарағанда ла оҙағыраҡ йәшәрмен әле! Һин генә, тауыҡбаш, кем нимә әйтә, шуға ышанып бараһың... Төрмәгә ултырғым килмәй! Хәҙер минең исемшәрифтәрем бөтөнләй икенсе буласаҡ, өр-яңы тормош башланасаҡ! Эҙләп табып ҡараһындар әйҙә. Һин дә йыйын, бергә китәсәкбеҙ!

- Бергә? Ҡайҙа?

- Һинең ике ятып бер төшөңә инмәгән ерҙәргә, тауыҡ баш! Әллә ошонда һыйыр тиҙәгенә батып ятырға уйлайһыңмы?

- Нишләп һыйыр тиҙәгенә булһын?..

Ишеткән хәбәренән Резеда шаңҡып ҡалды: тағы нимә уйлап сығарҙы был?

- Мин китә алмайым, Сәйет. Бик киткем килһә лә...

Сәйет уға аҡайып ҡараны:

- Нимә? Был һүҙҙәрҙе һуңғы тапҡыр ишеттем тип һана! Ғүмеремде ҡурҡыныс аҫтына ҡуйып, мин бында юҡҡа килгән тип беләһеңме әллә? Яңғыҙыңды тап итә алмай күпме урманда йөрөргә була ҡасып? Ярай әле Ынйыбикә китте, өй иркен ҡалды... - Тамағы туйған Сәйет асылып китеп һөйләп ташланы. - Әммә һине бер кемгә лә бирмәйәсәкмен, ишетәһеңме? Бер кемгә лә! Һин минеке генә... Беҙҙе һин генә һаттың. Быны мин йөрәгем менән тоям... Шуның өсөн үлергә тейеш инең. Һине яратыуым ғына һаҡлап алып ҡалды үҙеңде. Бөгөн кис йә иртәгә иртән кейемдәреңде бында килтереп ҡуй. - Әҙерәк уйлап торғандан һуң: - Хәйер, кәрәкмәй! Аҡса хәҙер беҙҙә бер муҡса! Алырбыҙ! - тип өҫтәне.

Резеда өйҙән нисек сыҡҡанын да хәтерләмәй. Бер туҡтауһыҙ мейеһен "бергә китәбеҙ" тигән һүҙҙәр сүкене. Резеда бөтөн кәмһетеүҙәренә, мыҫҡыллауҙарына түҙергә риза, әммә уның менән китә алмаясаҡ. Үлеүең мең артыҡ. Элегерәк, Сәйеттең ҡулы аҫтында йәшәгән сағында, бәлки, ул әйткән ергә эйәрер ҙә китер ине. Хәҙер булдыра алмай. Хәҙер уның Илһамы бар. Бәхеттең нимә икәнен белә. Ни йәне менән кире ҡоллоҡҡа китеп барһын ти инде?!

Резеда өйгә баяғынан да нығыраҡ иҙелеп, ҡобараһы осоп ҡайтты. Тиҙ генә йоҡо бүлмәһенә үтергә уйлағайны ла, һаман аш-һыу тирәһендә ураланған ҡәйнәһе күреп тә ҡалды.

- Ни булды, килен?

- Бер ни ҙә булманысы.

- Йөҙөң ап-аҡ, нур әҫәре юҡ. Ысынлап та, өҙлөктөң, ахырыһы, эш тип йөрөп. Ял ит, бөгөн тороп йөрөмә. Ынйыбикәнең мал-тыуарын үҙем теүәлләрмен әле.

Быны ишетеүгә, Резеда ҡото осоп:

- Юҡ! Үҙем барам! Өҙлөкмәнем мин! - тип ҡысҡырҙы. Үҙе яңылыш эшләгәнен аңлап, көсләп йылмайҙы. - Барыһы ла һәйбәт, борсолма, - тип ҡәйнәһен тынысландырырға ашыҡты.

Күңелле күренергә тырышһа ла, йөҙөнә нур ҡунманы барыбер. Аптыранған Миңзифа ай-вайына ҡуймай киленен йоҡо бүлмәһенә ҡыуҙы. Тынысландыра торған үләндәрҙән төнәтмә яһап эсерҙе. Оят ине Резедаға. Ҡәйнәһе әсәләрсә хәстәрлек менән температураһын үлсәгәндә, маңлайына һыуыҡ ҡулдарын ҡуйып ултырғанда ер тишегенә инерҙәй булып ятты. Әммә, ҡәйнәм ятырға ҡуша, тип иркәләнеп ятырға ла ярамай, бәлки, ул быларҙың барыһын да Резеданы һынап ҡарау өсөн эшләйҙер. Торорға кәрәк. Төнәтмәнең дә файҙаһы тейҙе, әҙәмсә фекерләр хәлгә килде бит, бирешмәҫ. Бөгөн ҡәйнәһе уны аш-һыуға яҡын ебәрмәҫ, баҡсала булһа ла соҡсоноп инһен. Ҡурай еләктәрен йыйырға ҡулы теймәйенсә йөрөй ине, йәтеш булды. Көрөшкә эләктереп, баҡсаға сыҡты. Баҡсалары ҙур ғына уларҙың. Ҡәйнәһе буш ваҡытын ошонда үткәрергә ярата. Ана бит, ниндәй генә сәскәләр юҡ бында! Ә Резеда бер нәмә лә үҫтерә белмәй. Хатта сәскәләрҙең исемдәрен дә йүнләп хәтерләмәй...

Был баҡса шәп булды Резедаға, ҡәйнәһенең дә күҙенә күренеп йөрөмәй, эшһеҙ ҙә тормай, ваҡыт та үтә. Кисен ниндәй һылтау менән мунса яғыр, бына быныһы ауыр мәсьәлә.

- Аһ, килен, бында ни эшләп йөрөйһөң ул? - Урамдан ҡәйнәһенең тауышы ишетелде. Күреп тә ҡалған! Бөгөн унан ҡотолоу юҡ...

- Ҡойолоп әрәм булмаҫ борон, ҡурай еләктәрен йыйып, ҡайнатып ҡуяйым тигәйнем.

- Мин бит һиңә ятырға ҡуштым! - Шәп-шәп атлап килеп еткән ҡәйнәһенең тауышында асыуланыу сағылды. - Ҡайһылай әйткәнде тыңламайһың! Хәс тә бала-саға инде!

- Ятҡым килмәй минең, ҡәйнәм, еләк йыйыу ҡыйын түгел бит!

- Ҡыйын булмай ни! Көнө буйы ҡояш аҫтында йөрөп ҡара һин! - Ҡояш ҡыҙыу булмаһа ла, ҡәйнәһе был һүҙҙәрҙе ғәҙәт буйынса әйтеп ҡуйҙы, ахырыһы.

- Ни, ҡәйнәм, бөгөн мунса яҡҡанда яҡшы булыр ине. Хәҙер тиҙ генә һыу ташыйым да...

- Үҙем дә шулай уйлай инем әле! - Ҡәйнәһе ҡыуанысынан ни эшләргә белмәй өлтөрәп алып китте. - Мунса бигерәк шифалы бит ул. Сабындырырға үҙем инермен. Шәп серен беләм мин уның! Бөтөн сирҙәрең, арыу-талыуың ҡул менән һыпырып алғандай юҡҡа сығыр. Ҡана, хәҙер үк яғайым!

Хәҙер үк тисе, иртәрәк бит әле! Резеда йәштәрсә бер дәрт менән өй яғына йүгереп ултырған ҡәйнәһен туҡтата һалды.

- Ҡәйнәм, һин борсолма улай. Мин уны һуң ғына яғып, сабынып сығырмын да, шунда уҡ йоҡларға ятырмын тип уйлағайным. Эштәрҙе бөткәс...

Ҡәйнәһе йәнә шунда уҡ ризалашты. Тик үҙенекендә ныҡ торҙо: һыу ташырға, утын индерергә ҡушманы. Ҡатынҡайға ризалашыуҙан башҡа әмәл ҡалманы. Ул хәҙер нимә ҡушһалар ҙа риза ине, тик Сәйетте генә белеп ҡалмаһындар. Көрөшкәһе тулғансы йөрөргә сабырлығы етмәне уның. Һәйбәт нәмәләр тураһында уйларға тырыша, юҡ, Сәйет килә лә төшә иҫенә. Тотона шунан күңеле болоҡһорға. Үҙенә лә юлға йыйынырға ҡушыуын иҫләһә, йәне көйөүҙән йөрәге болғана, башы әйләнергә тотона. Әллә барыһын да Динәгә һөйләргә, уның менән кәңәшләшергәме? Ни тиһәң дә әхирәте бит әле, бында иң яҡын кешеһе. Әммә нисек? Нисек һөйләһен ул барыһын да? Динә уны фәхишә, һатылған ҡыҙ тип башына ла индермәй бит. Уның өсөн әхирәте саф, изге күңелле. Ниңә генә эйәреп килде лә Динәгә, ниңә генә кейәүгә сығырға ризалашты! Ул ваҡытта Илһамды оҡшатмай ҙа ине... Ә хәҙер ул Илһамдан башҡа бер көн дә тора алмай. Шуға күрә... бер генә юл ҡала: көтөргә, барыһының да яҡшы тамамланырына өмөтләнергә, ысын күңелдән Алланан ярҙам һорарға.

- Килен, һине телефонға! - Ҡәйнәһе күтәрмәгә сығып ҡысҡырҙы.

- Кем? - Резеда аптырап китте, уны бында бер кем дә белмәй ҙә баһа. Әллә бер-бер хәл булып, ауылдан әсәләре шылтыратамы? Әй, моғайын, Динәлер...

- Белмәйем, исемен әйтмәне, ниндәйҙер бер ир.

Ир тигән һүҙҙе ишетеүгә Резеданың йөрәге жыу итеп ҡалды. Ул! Сәйет! Резеда өйгә нисек йүгереп барып ингәнен һиҙмәй ҙә ҡалды.

- Алло, алло! Кем был?

- Кем, имеш, мине танымай башланыңмы! - теге баштан ҡатлы-ҡатлы һүгенеү һүҙҙәре килеп етте.

Сәйеттең тауышын ишетеүгә, Резеда йәшелле-күкле төҫкә инде. Таныш түгел ир тауышын ишеткәс, ҡәйнәһе лә уның артынан инеп, ишек төбөндә тыңлап тора, етмәһә. Резеда ҡурҡышынан нимә әйтергә белмәй ыҡ-мыҡ килде, үҙенең йөрәге сығырҙай булып типте, әйтерһең, бөтә өйгә яңғырап ишетелеп тора.

- Ә-ә, Рәфҡәт ағай, һинме ни? Һаумы! - тип саҡ әйтә алды, ҡәйнәһе яғына әйләнеп, йөҙөнә йылмайыу ғәләмәте сығарҙы. Бөтә тәненә тир бәреп сыҡты, аяҡ быуындары ҡалтыраны.

- Атаң башына ағайың булайыммы мин һиңә?! - Сәйет аҡырып ебәрҙе. Резеда уның һайын трубканы ҡолағына нығыраҡ терәне.

- Хәлдәр нисек, ағай? Әсәйем менән атайым ауырымайҙармы? - Башына тәүге килгән һорауҙы бирҙе Резеда.

- Мин асыҡтым! Ҡасан киләһең? - тип мыжыны Сәйет.

- Үҙең беләһең, ағай, яҡын ара түгел, тиҙ генә ҡайта алмайым инде. Һағынып та өлгөрҙөгөҙмө ни?

- Ә мине не волнует! Һин минең янда булырға тейешһең! Ишетәһеңме?

- Беләм дә бит... Ниндәй яңылыҡтар бар, ағай? Күрше-тирә нисек көн күрә? Уларға минән күп сәләм! - Телефонды һалып ҡына ҡуйырға ла булыр ине, әммә Резеда уны ҡолағынан айыра алмай, нисек матҡып тотҡан, шулай тора бирә. Исмаһам, ҡәйнәһе сыҡмай!

**(Дауамы. Башы 20-22-се, 24-27-се һандарҙа).**

ИНТЕРНЕТТАН



# ОҘОН БУЙЛЫҺЫҢМЫ?

## Тимәк, һин бәхетле

■ Йәй ҡояшта тигеҙ һәм матур итеп яныу өсөн дөрөҫ туҡланыу ҙа мөһим. Бристоль университеты ғалимдары әйтеүенсә, аҙыҡ-түлектең сифаты тиренең торошона һәм төҫөнә йоғонто яһай ала. Бер ай дөрөҫ туҡланғандан һуң, тире күпкә матурыраҡ күренә икән. Файҙалы аҙыҡ-түлеккә ҡарбуз, ҡауын, персик, абрикос, борос, кишер, шпинат инә. Был йәшелсә һәм емеш-еләктәрҙе ашаһағыҙ, тирегеҙ тигеҙ ҙә яныр, шымарып, таҙарып та ҡалыр.

■ Ҡара ҡарағаттың яман шеш барлыҡҡа килеүен иҫкәртеүе табиптар тарафынан күптән асыҡланған. Огайо штатының яман шеште өйрәнеүсе үҙәге, Джеймс онкологик госпитале һәм Solove институты тикшеренеүселәре әйтеүенсә, көртмәле, ҡыҙыл ҡарағат, ер һәм баҡса еләктәре лә файҙалы, улар ҡыҙыл үңәс яман шешен булдырмай икән. Экзотик үҫемлектәр емеше - нони, акаи пальмаһы һәм бүре емеше лә яман шеш күҙәнәктәре үҫешен туҡтатырға һәләтле.

■ Әгәр ҙә эштән арып китһәгеҙ йәки икенсе эшкә күсеү тураһында уйлана башлаһағыҙ, ҡабаланмағыҙ, иң тәүҙә ултырғысығыҙҙы алыштырып ҡарағыҙ. Америка ғалим-психологтары асыҡлауынса, хеҙмәткәрҙең эш урыны уның кәйефенә туранан-тура йоғонто яһай. Тикшеренеүселәр билдәләүенсә, кешенең психологик торошо күп осраҡта физик комфорт менән бәйле. Эшлекле осрашыуҙар мәлендә партнерығыҙ унайһыҙ креслола ултыра икән, уның ыуышҡа өлгәшеүе еңел булмаясаҡ. Был офис хеҙмәткәренә лә ҡағыла. Әгәр ҙә ул оҙаҡ ваҡыт унайһыҙ урында ултыра икән, унда көсөргәнеш барлыҡҡа килә һәм ул эш алыштырыу тураһында уйлана башлай.

■ Буйы уртасанан саҡ ҡына оҙонораҡ булған кешеләр үҙен бәләкәй буйлыларға ҡарағанда күпкә бәхетлерәк тоя, тип яҙа Time. Бындай фекергә Американың иҡтисади тикшеренеүҙәр милли бюроһы хеҙмәткәрҙәре килгән. Әгәр ҙә ир-егеттең буйы - 177, ҡатын-ҡыҙҙыҡы 162 сантиметрҙан оҙонораҡ икән, улар тормошта күпкә уңышлыраҡ иҫәпләнә. Белгестәр әйтеүенсә, оҙон буйлылар аралашыусан, еңел ҡуҙғалыусан. Үҙҙәренә иғтибар йәлеп итеү өсөн уларға артыҡ тырышлыҡ һалыу кәрәкмәй, оҙон буйлы кеше башҡалар араһында шунда уҡ күҙгә ташланып бара. Былар барыһы ла кешенең үҙенә ҡуйған баһаһын бермә-бер арттыра һәм үҙен бәхетле тойорға мөмкинлек бирә.

■ Британияла ортопедтар йәмғиәте тарафынан үткәрелгән һорау алыу күрһәтеүенсә, ҡатын-ҡыҙҙарҙың 40 проценты уңайһыҙ аяҡ кейеме кейә. Уларҙың 37 проценты модалы, заманса, әммә унайһыҙ булған аяҡ кейемен йышыраҡ һайлай. 17 процент ир-ат махсус рәүештә аяҡ кейеменең ҙурырағын һайлай, 80 процент ғүәэл зат тар аяҡ кейеме кейеү һөҙөмтәһендә һөйәлдәрҙән яфаланһа ла, бер ҡасан да белгестәргә мөрәжәғәт итмәй.

■ Бейек үксәле аяҡ кейеменең зарарлы булыуын барыһы ла белә. Әммә бөтөнләй үксәһеҙ аяҡ кейеме кейергә лә кәңәш ителмәй. Ортопедтар әйтеүенсә, бөгөн кешелектең яртыһы, үҙе лә һиҙмәйенсә, унайһыҙ һәм бәләкәй үлсәмдәге аяҡ кейеме кейә. Көндәлек аяҡ кейеме түңәрәк башлы, үксәһе 4 сантиметрҙан бейек булмаҫҡа тейеш, ти белгестәр. Әлбиттә, матур аяҡ кейеме кейеүҙән бөтөнләй баш тартырға кәрәкмәй, әммә ваҡыты-ваҡыты менән аяҡтарға ял биреп алыу мөһим.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ИМАН КИМӘЛЕ...

## ихластан башҡа булмай

**Ғәрәпсәнән "ихлас" һүҙе - "кире сифаттарҙан таҙарыныу, ғәмәлдәрҙе күҙ буяу өсөн эшләүҙән баш тартыу, ихласлыҡ һәм саф күңеллелек күрһәтеү" тип тәржемә ителә. Был һүҙ "халяс" - "ниндәй ҙә булһа ғәмәлдә, башҡа һыҙтаныуҙар ҡушмайынса, бер генә маҡсат менән үтәү" йәки "ниндәйҙер ғәмәлдең ботҡа табыныуҙан һәм хатта уға ишараланған нәмәләрҙән дә таҙарыныуы" тигәндән килеп сыҡҡан.**



Шулай итеп, үрҙә күрһәтелгән аңлатмаларҙы күҙ уңында тотоп, "ихлас" һүҙенең Исламда "Аллаһтың ҡәнәғәтлеген яулар сифат"ты аңлатҡанын раҫлай алабыҙ. Йәки тағы ла тулыраҡ итеп әйткәндә, ул "Аллаһҡа кемделер тиңләштермәй, ике йөҙлөлөктән, күҙ буяуҙан, дан, файҙа көҫәүҙән азат булып, тик бер генә ниәт - Аллаһтың ризалығы өсөн башҡарылған ниндәй ҙә булһа ниәт йәки ғәмәл, шулай уҡ ғибәҙәт".

Исламда Аллаһ ҡаршыһында мәғәнәгә һәм көскә эйә булған ғәмәлдәр һәм ҡылыҡтар ниндәйҙер шарттар менән бәйләнгән. Әлбиттә, ғибәҙәттәрҙең йәки ниндәйҙер ғәмәлдең Аллаһ тарафынан ҡабул ителеүе өсөн күп кенә ҡанундарҙы үтәргә кәрәк, әммә дөрөҫ ғибәҙәт ҡылыуҙың төп шарты Исламда икәү: айырым ғәмәлдәрҙе үтәп, Исламдың ҡағиҙә һәм закондарын үтәү; Аллаһтың ҡәнәғәтлеген яулар өсөн үҙ теләгең менән ғибәҙәт ҡылыу. Һуңғы шарт Исламда төп нигеҙ булып тора, сөнки мосолмандың ниндәйҙер эште башҡарыуы нигеҙендә Ислам ята. Ҡөрьән буйынса тик иман һәм ҡаҡшамаҫ ихласлыҡ менән башҡарылған эштәр генә Аллаһ тарафынан ҡабул ителә.

Был турала Мөхәммәт бәйғәмбәр ҙә (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) иҫкә төшөрә: "Эй, кешеләр, үҙегеҙҙең ғәмәлдәрегеҙҙе ниндәй ҙә булһа кәрәкмәгән сифаттарҙан таҙартығыҙ, уларҙы тик Аллаһ хеҙмәтенә ҡуйығыҙ".

"Ғәрсә уларға: Аллаһҡа, уның диненә ихласлыҡ менән иман килтереп, изгелек ҡылып, намаҙҙарҙы ҡалдырмайынса, дөрөҫ уҡырға, зәкәт бирергә кәрәк, тип әйтелде. Иң дөрөҫ дин - ошо дин!" ("Бәййинә", 5).

Күреүебеҙсә, Изге Ҡөрьән аяттары таҙа ниәт, йөрәк менән ғибәҙәт итергә саҡыра. Мосолмандарҙы бөтә төр ширҡ менән дә көрәшергә саҡыра Аллаһ илсеһе Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм). Әбү Һөрәйрә (радиаллаху анх) еткергән: "Бер көндө бер кеше, Бәйғәмбәргә килеп, былай тигән: "Эй, Аллаһтың илсеһе, саҙаҡа биргән, йә башҡа изге эш башҡарған ваҡытта, минең Аллаһ Тәғәләнең ризалығын да, шулай уҡ кешеләрҙең маҡтау һүҙҙәрен дә яулағым килә". Быға Бәйғәмбәр: "Ант итеп әйтәм, Аллаһ ширҡ буталған бер нәмәне лә ҡабул итмәҫ", - тип яуаплаған. Ошонан һуң Мөхәммәт бәйғәмбәр ошо Ҡөрьәндең аятын уҡыған: "Аң бул! Пак дин бары тик Аллаһтан ғына килә..." ("Зүмәр", 3).

Ихлас тураһында әйтелгән аят һәм хәҙистәрҙә, Аллаһ ризалығы өсөн башҡарылған ғәмәлдәргә нәфсе теләгененң әҙ генә өлөшө ҡушылһа ла был ихласлыҡҡа ҡамасаулай, тип әйтелә.

Исламда ихласлыҡты юҡҡа сығарыусы өс ҡурҡыныс бар:

Ширҡ, ул "Аллаһҡа тиңдәшлек килтереү һәм Аллаһтан башҡа илаһтар ҡулланыу" тип аңлатыла; Рия, йәғни "ниндәй ҙә булһа ғәмәлдә ысынында Аллаһ ризалығы өсөн түгел, ә күҙ буяу, йә бүтән файҙа алыу өсөн башҡарыу"; Хева - "нәфсенең көслө теләге".

Үҙеңдең теләктәреңә юл ҡуйыу, дини вазифаларыңды шәхси мин-минлегеңдән сығып башҡарыу, нәфсегә хеҙмәт итеү - былар Аллаһы Тәғәләнең ризалығын эҙләү түгел. Бөтә был торомштар ҙа ихласлыҡтың киреһе.

Донъяла һәм әхирәттә тик үҙеңдең саф күңелең менән генә Шайтан мәкеренән ҡасырға, тик Аллаһ тарафынан хупланған ихлас эштәр ярҙамында ғына Аллаһ яҡлауын ҡаҙанырға мөмкин. Сафлыҡҡа эйә булыр өсөн дә шуға ярашлы ихласлыҡ кәрәк. Ҡөрьәндә, ихлас инаныусылар ғына ҡотолор, тип әйтелә. Кем үҙенең иманын кәрәкмәгән сифаттарҙан таҙарта, Аллаһтан башҡа бер кемгә лә табынмай - шуны бөйөк ҡотолоу көтә.

"(Иблис) әйтте: "Раббым, мине (тура юлдан) яҙҙырғаның күрә, мин дә Ер йөҙөндәгеләргә гонаһтарын ләззәтле һәм гүзәл ғәмәл итеп күрһәтермен һәм юлдан яҙҙырырмын. Ихлас ҡолдарыңдан башҡа барсаһын да, - тине" ("Хижр", 39-40)

"Ихлас иманлы булған кешеләр яҙаланмаҫ" , тиелә "Саффат" сүрәһенең 40-сы аятында.

Ошоларҙан сығып, ихласлыҡты ошо шарттарҙа һаҡлап ҡалып булыр, әгәр ҙә Бер Аллаһҡа инаныусы: бер кемде лә Уға тиңдәш ҡуймаһа: Аллаһ диненә тоғролоҡта Ҡөрьән әмерҙәрен үтәһә; нәфсе ҡушыуы буйынса китмәһә; был донъяға ҡыҙыҡып ҡарамаһа; әхирәт тураһында онотмаһа.

Шулай итеп, бер ниндәй ҙә иман кимәле ихласһыҙ мөмкин түгел, бер доға ла ихласһыҙ ҡабул булмаҫ, саф йөрәктән эшләнмәгән бер ғәмәл дә Аллаһ тарафынан хуплау тапмаҫ. Икенсе һүҙҙәр менән әйткәндә, мосолман булыу, - ул тик Аллаһҡа ғына табыныу, үҙеңде һәм үҙеңдең эштәреңде тик Уға ғына арнау, Уның ризалығын алыу.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ЗЫЯРАТ ҠЫЛЫУ ЙОЛАҺЫН...

## Бәйғәмбәребеҙ хуплаған

**Әҙәм балаһы был донъяла ике аралыҡта тора: йәшәү һәм үҙе кисектерә алмаған үлем. Ошонан сығып, беҙҙең был донъяла ике кәңәшсебеҙ булыуы тураһында һығымта яһай алабыҙ. Беренсеһе - Ҡөрьән, икенсеһе - ҡәбер.**

Мөхәммәт бәйғәмбәребеҙ мәрхүмдәрҙең ҡәберенә йыш ҡына зыярат ҡылған, улар өсөн доғалар уҡыған. Үҙенең сәхәбәләренә һәм өммәтенә васыят әйткән: "Зыярат ҡылығыҙ, сөнки ҡәбер ҡиәмәт көнөн иҫегеҙгә төшөрәр". Шулай уҡ мәрхүмдәр рухына Ҡөрьән, бигерәк тә "Йәсин" сүрәһен бағышлап уҡыуҙы хуп күргән. Шул уҡ ваҡытта Ахли Сунна ғалимдары мөьминдәрҙе зыярат ҡылғандағы ҡайһы бер хаталарҙан иҫкәртә. Ҡәберҙәргә тәрлә еп, сепрәк бәйләү, ҡәбергә ултырыу, үбеү, мәрхүмгә мөрәжәғәт итеү, йә иһә зыярат ҡылыуҙы бизһәт һанау ярамаған эш. Мөхәммәт бәйғәмбәребеҙ әйткән: "Кем Аллаһы Тәғәлә ризалығы өсөн, Мәҙинәлә булып, минә зыярат ҡылһа, ҡиәмәт көнөндә мин уның шаһиды һәм ҡурсалаусыһы булырмын".

Шулай итеп, зыярат ҡылыу беҙҙең өсөн сөннәт. Кеше мәрхүм булғас, ҡәбергә артынан өс әйбер эйәреп бара: балалары, байлығы, ҡылған ғәмәлдәре. Тәүге икеһе кире ҡайтһа, ғәмәлдәре мәрхүм менән ҡала, тиелгән хәҙистәрҙә. Бәйғәмбәребеҙ әйткән: "Әгәр ҙә берегеҙ мәрхүмгә зыярат ҡылһа, мәрхүм шул тиклем шатланыр, һәм зыярат ҡылыусы киткәнсе уны сәләмләр". Шуға ла ҡәберлеккә килгәс, мәрхүмдәр менән иҫәнләшеү хәйерле һанала. Ҡиблаға ҡарап доға ҡылыу, ҡәберлектәрҙе тәртиптә тотоу, мәрхүмдәр исеменән хәйер-саҙаҡа өләшеү сауаплы ғәмәлдәр. Башҡа диндәгеләргә оҡшап, ҡәберлеккә ашамлыҡ, аҡса һалыу тыйыла.

Әле Башҡортостанда зыярат ҡылыу йолаһы тергеҙелеп килә. Ҡәберлектәр тәртипкә килтерелә. Был юлда хаталар ҙа булыуы ихтимал. Исламда ғилемһеҙлек сәбәпле ҡылынған хаталар арҡаһында талаш ойоштороу ҡәтғи тыйыла. Ошо юлда яңылышлыҡтар булһа, үҙара һөйләшеп, ололарҙың кәңәшен тыңлап, Ислам ҡушҡанса эшләү зарур. Динебеҙ ғилемгә ынтылыуҙы, берҙәм ҡылған ғәмәлдәребеҙҙе дөрөҫ үтәүҙе сәләмләй.

**Сәғит хажи ИСМӘҒИЛЕВ.**

ДОНЪЯ - ҠУЛАСА

**Тормош ығы-зығыһы, тирә-яҡҡа күҙ һалырға ла әмәл тапмай донъя малы артынан ҡыуыу, бөтә нәмәгә битарафлыҡ... Тормошобоҙ күҙ эйәрмәҫ тиҙлектә алға тәгәрәй. Бер көн килеп, ҡыш үткәнен, инде ергә яҙ килеп, тирә-яҡ йәшеллеккә күмелгәнен аңғараһың. Әммә уйланып, үткән тормошто барлап, һығымта яһап торорға ваҡыт юҡ - бөтмәҫ-төкәнмәҫ эштәр, йомоштар артынан сабабыҙ. Ниндәй тормош был! Күңелебеҙгә тыныслыҡ, йөрәгебеҙгә илһам, илаһи көс, бәхет өҫтәйме ул сабыулауҙар? Юҡтыр...**

# ЙӘШӘҮ РӘҮЕШЕНӘ ӘЙЛӘНҺЕН...

## мосолманлыҡ

... Түшәктә хәрәкәтһеҙ ҡалған бала көүҙәһе. Уның ғүмере мәңгелеккә өҙөлгән. Ул үҙ-үҙенә ҡул һалған. Әле ғүмер баҫҡысын да һанап өлгөрмәгән, алда күпме аяҙ күкле, ҡояшлы көндәре булырын, ата-әсәһен ҡыуандырыр киләсәген күҙалламаған бала һыны ҡатып ҡалған... Йә, Хоҙай, ошо баланың башына ниндәй уй төштө һуң? Ни өсөн ул үҙ-үҙенә ҡул һалыуға барҙы? Быға яуапты табыуы ауыр, шулай ҙа уйланып ҡарайыҡ.

Ул киләсәген күҙалламаған, күңелендә бушлыҡ булған. Ул яҡындарына ышанысын, өмөтөн юғалтҡан, рухы һүнгән... Ә эргәһендәге ололар уның күңеленә инеп, хәлен һорашырға ла ваҡыт тапмаған. Уларса эшләмәһә - әрләнгән. Үҙенең яҡындарының һөйөүен тоймаған, әрләнгән, йә булмаһа тукмалған баланың күңеле китек булыуын белмәйбеҙме ни? Бала бар ғәйепте үҙенә алып, үҙенең был донъяла артыҡ йән булыуын күтәрә алмағандыр. Был хәлдән сығыу юлын да белмәгәндер, сөнки тормошто ул әле йүнләп аңламай ҙа бит. Балаға өлгө булырҙай, аҡыл өйрәтерҙәй ололар аҙ шул. Өлкәндәрҙең дин тотмауын, балаларына, ейәндәренә насар өлгөһөн күреп үҫә бит бөгөн күп бала...

Минең өләсәйем намаҙ уҡып, беҙҙе өшкөрөп, дауалап, күңелебеҙгә бала саҡтан дини доғаларҙы һалған кеше ине. Шул доғалар әле булһа онотолмай күңел түрендә һаҡлана. Өләсәйем һеңдергән рух юлдан яҙҙырмай, хилафлыҡ ҡылырға рөхсәт итмәй, игелеккә өндәй.

Шундай тәҡдимем бар: балалар баҡсаларына, мәктәптәргә дини дәрестәр индереү мәсьәләһен хәл итергә ине. Әгәр беҙ балаларыбыҙҙы әхлаҡлы, тәрбиәле итеп күргебеҙ килә икән, дини дәрестәр индереү файҙаға ғына буласаҡ. Балалар бәләкәй саҡтан дингә яҡын булып үҫер, ата-әсә үҙе лә дингә ынтылыр, балаһына өлгө булырға тырышыр. Шул ваҡытта балалар хилаф эштәрҙән йыраҡ тороr, әхлаҡлы булыр, киләсәктә сабыйҙарын ташлап киткән әсәләр ҙә булмаҫ. Бәлки, кемдер, дин тергеҙелгән, мәсеттәр бар ҙа инде, тип минең тәҡдимем менән килешмәҫ. Мәсеттәр булыу менәнме ни! Исем ҡуштырғанда, йәиһә никах уҡытырға кәрәк булғанда ғына иҫкә төшә мәсет, мосолман булыуыбыҙ. Мосолманлыҡ йәшәү рәүешенә әйләнергә тейеш. Динһеҙ булмай, динебеҙҙә - киләсәк көнөбөҙ.

**Хәлисә ФӘХРЕТДИНОВА, Әбйәлил районы.**

БЫЛ -ГОНАҺ!

## ӘҘӘПЛЕ ҠАТЫН-ҠЫҘҒА ЯЛА ЯҒЫУ

Изге Ҡөрьәндең "Нух" сүрәһенең 23-сө аятында: "Зина кеүек эштәрҙән пак булған, әшәкелек даны сыҡмаған, намыҫлы мөьминәләргә (ғәйбәт) нахаҡ яла яғыусылар донъяла ла, әхирәттә лә ләғнәтләнер. Уларға бик тә хәтәр ғазаптар әҙерләнгән", ә ошо уҡ сүрәнең 4-се аятында: "Намыҫлы һәм саф ҡатындарға (зина ҡылды тип) нахаҡ һүҙ әйткән кешеләр дүрт шаһит килтерә алмаһа, һәр беренә һикһән тапҡыр ҡамсы менән һуғылыр. Бынан һуң уларҙан бер ҡасан да шаһитлыҡ һоралмаҫ. Улар фәсиҡтәрҙең дә фәсиғе - боҙоҡ әҙәмдәрҙер", - тип әйтелгән.

Аллаһ илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) беҙгә ете һәләкәтле гонаһтан ҡасырға бойорған һәм улар араһында саф ҡатын-ҡыҙҙарға яла яғыуҙы ла әйтеп үҙған. Ул: "Мосолман - ул башҡа мосолмандарға теле менән дә, ҡулы менән дә зыян килтермәҫ", - тиген.

Ҡөрьәндең "Әгзәб" сүрәһенең 58-сы аятында: "Гонаһ ҡылмағандары көйөнсә, был ир менән был ҡатын гонаһ ҡылды, тип нахаҡ яла яғыусылар, һис шикһеҙ, үҙ өҫтәренә ҙур гонаһ алыр", - тип әйтелгән.

Аллаһ илсеһе: "Ҡиәмәт көнөндә үҙенең ҡолон зина ҡылыуҙа ғәйепләүсене ҡаты язаға тарттырасаҡтар. Әгәр теге ҡол ысынында ла ундай булмаһа", - тиген.

Кем дә кем Ҡөрьәндәге аятты ҡарамайынса, мосолмандарҙың әсәһе Ғәйшәгә (радиаллаху анху) яла яға, ул дөрөҫ булмай, сөнки ул Ҡөрьәнгә ҡаршы килә.

ШУЛАЙ ҘА БУЛА!

# ТУЙ ТЕЛӘКТӘРЕ...

## үҙебеҙсә яңғыраһын

**Һәр кем үҙ йомошо менән ашыға. Ана бит, автобус туктартуктамаҫтан салонға бер-бер артлы пассажирҙар шыпа тулды ла ҡуйҙы. Башына мамыҡ шәл ураған һөйкөмләкле инәй менән ап-аҡ бөйләмалы бабай әллә ауылса кейенеүҙәре, әллә ҡулдарындағы ҙур төйөнсөк - мендәрҙәр менән иғтибарымды йәлеп итте. Бындай бүләкте оло йәштәгеләр исем туйына, йәштәр туйына бүләк итеп һала хәҙер.**

Салонға ингәс, минең алдағы буш урынға ултырҙы ҡарттар, улар менән тынсыу автобусҡа ниндәйҙер сафлыҡ, таҙа һауа тулғандай булды. Беҙҙең автобусты ҙур тиҙлектә уҙып киткән туй кортежын ҡарашы менән оҙатҡан бабай әбейенә боролмай ғына:

- Балалар эргәбеҙҙә булһа, беҙ ҙә һинең менән сит байрамға түгел, үҙ ейән-ейәнсәребеҙҙең никах туйына юллан-ған булыр инек, бәлки, - тип ауыр көрһөндө.

- Бошонма, атаһы, ашар аштары сит ерҙә булғандыр, яҙмышты хәҙер үҙгәртеп булмай инде. Иҫән-һау булһындар, урыҫмы, нимесме, барыбер кеше бит, иң мөһиме, бер-береһен аңлап, яратып йәшәһендәр...

Бабай әбейенең һүҙҙәре менән ризалашманы, күрәһең, ярты көүҙәһе менән тәҙрәгә боролоп, фекере менән килешмәгәнде белдереп, ҡаты ғына тамаҡ ҡырҙы ла:

- Мин өс улымдың да үҙ милләтенән кәләш алыуын теләнем, ейән-ейәнсәрҙәремдең ауыҙ тултырып үҙ телендә һөйләшеүе хаҡында хыялландым, ҡоҙа-ҡоҙағыйым менән мәжлес ҡороп, күңелем булғансы үҙ моңомдо һуҙырға тигән уй ташламаны. Ә улдарыбыҙҙың уҡып сығып кеше булыуын мәрйә килендәр көтөп кенә торған һымаҡ, әлектерҙәләр ҙә, беҙҙән айырып, әллә ҡайҙа алып киттеләр. Йә, әйт, ни эшләп ауылда беҙҙең улдар ғына башҡорт ҡыҙҙарын иш итә алманы? Уларҙың был холҡо өсөн әҙәмдән оят. Туйға бармағанымды ла аңлайһың - улдарым минең фатиханан тыш сит милләттән кәләш алып, аҡ өмөттәремде селпәрәмә килтерҙе...

- Ярай, атаһы, - тип тынысландырырға тырышты ҡатыны. - Иң мөһиме, ситтә булһа ла, иҫән-һауҙар, эштәре бар, вазифалы урын биләйҙәр. Ванюша, Ксюша, Станиславтарҙа, бәлки, үҫкәсерәк беҙҙең башҡорт ҡаны өҫтөнлөк итер. Сабыр итәйек, улдарыбыҙҙы улай уҡ ҡаты күңеллелектә ғәйепләмә, ҡайтырҙар әле бер заман. Килендәребеҙ мәрйә булһа ла бер аңларҙар беҙҙең күңелде, ейән-ейәнсәрҙәребеҙҙе тейәп, ҡумаҡлашып ҡайтып та төшөрҙәр, Аллаһ бойорһа. Балаларыбыҙҙың балаһын етәкләп урам уртаһынан башыбыҙҙы юғары тотоп үтер, йылға-күл буйҙарына алып барыр, атта йөрөтөр инек үҙҙәрен, эйеме, атаһы?..

ЗАГС бинаһына еткәс, автобустан төшөп ҡалдым. Ғүмер буйы балаларын уҡытып кеше итеү теләге менән янған, уларға үҙ милләтенән кәләш әйттереп, Салауат, Иҙел, Ғәлиә исемле тупылдап торған ейәндәрен яратырға, күккә сөйөргә, килен изгелеге күрергә хыялланып та, уның тормошҡа ашмаҫтай хыял икәнлегенә әле лә ышанып бөтмәгән изге күңелле ауыл инәйе менән бабайын ихлас йәлләнем. Ҡулдарындағы бүләккә тип тәғәйенләнгән ап-аҡ мендәрҙәр, моғайын, үҙ балаҡайҙарына тип инсеәләнгән булғандыр инде...

Етәкләшеп, никах йортона табан йүнәлгән йәш егет менән ҡыҙҙың туған-тыумасалары менән үҙ телебеҙҙә һөйләшкәнен ишетеп, күңелем ғорурлыҡ тойғоһона тулды. Ата-әсәләре, туғандары кәләш менән егеткә башҡортса теләк юллаясағын күҙ алдыма килтереп, шатландым...

**Тимерлан МӨХӘМӘҘИЕВ.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Әҙлән һәм үҙгәрештәр яһа

**1633 йылда Англия колонистары Джеймс һәм Йорк йылғалары тамағы араһында Виргинияға нигеҙ һалған. Улар уны, ярымутрауҙың уртаһында урынлашҡанлыҡтан, Урта Плантация тип атай. 1699 йылда был урынды Англия короле Вильям хөрмәтенә Вильямсбург тип үҙгәртәләр һәм ул Виргиния колонияһының баш ҡалаһы булып китә.**

Бер ваҡыт Вильямсбург был колонияның төп ҡалаһына әүерелә, әммә Америка революцияһынан һуң уның әһәмиәте кәмей башлай. 1926 йылда кесе Джон Д.Рокфеллер Вильямсбургты терегеҙеү һәм һаҡлау буйынса эш башлай, һәм бөгөн был ҡала йылына миллиондан ашыу кешене ҡабул итә. Тарихи урынға әйләнгән Вильямсбургты барып күреү - матур ваҡиға, сөнки беҙ элекке тормошто, шулай уҡ кешелектең шул замандан алып күпме үҙгәреш кисереүен күрә алыу мөмкинлегенә эйә булабыҙ. Әгәр ҙә был ҡаланың тәүге йәшәүселәре һәм унан һуң килгәндәр барыһын да элеккесә эшләһә (мәҫәлән, аҙыҡты усакта бешереүен дауам итһә), беҙ микротулҡынлы мейес менән ҡуллана алмаҫ инек. Әгәр хәрби эштә улар мушкеттан ҡулланыуҙарын дауам итһә, бөгөн оборона системаһы бөтөнләй мөшкөл хәлдә булыр ине.

Беҙҙең дөйөм кешелек үҫеше үҙгәрештәрҙән тора. Шулай уҡ шәхси тормошобоҙға килгәндә лә беҙ даими рәүештә яҡшыраҡ юлдар эҙләргә тейешбеҙ. Нимәнелер һәр ваҡыт билдәле бер ысул менән эшләгән өсөн генә беҙ быны мөмкин булған берҙән-бер юл тип ҡарарға тейеш түгелбеҙ. Барыһын да тормошобоҙға бәләкәй генә үҙгәрештәр индереүҙән башлай алабыҙ. Мәҫәлән, эшкә барыу өсөн яңыса маршрут һайлау йәки төшкө ашты төрләндереү. Әммә тормошҡа яңы ҡараш менән ҡарау өсөн беҙ аңыбыҙҙы яңынан-яңы ғилемдәргә асыҡ тоторға тейешбеҙ.

Һәр кемдең үҫеү һәм йәмғиәттең файҙалы һәм бәхетле ағзаһы була алыу һәләте бар, ә был үҫеш мөмкин булһын өсөн беҙ тормошобоҙға тәбиғи рәүештә үҙгәрештәргә юл ҡуйырға тейешбеҙ. "Тормош - ул үҙгәреш, ә үҙгәреш - ул тормош" тигән мәҡәл бар. Бүтәнсә итеп әйткәндә, үҙгәреш беҙҙең үҙебеҙгә ҡағыла. Беҙ уға ҡаршылашһаҡ, үҫеш туҡталып ҡала. Әммә йәшәйештең яңы һәм төрлө ысулдарын эҙләү артынан ҡыйыу рәүештә алға табан барһаҡ, беҙ үҙебеҙгә һәм бүтәндәргә ҡарата ла рухи һәм матди үҫешкә булышлыҡ итә алабыҙ.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**



## 12 ИЮЛЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Жди меня"
21.00 "Время"
21.30 "Большая нефть", 1-я серия. Драма
22.20 "Познер"
23.20 "Коко Шанель и Игорь Стравинский". Драма
01.30 "Американская семейка". Сериал
02.00, 03.05 "Капитан Зум и академия супергероев"
03.00 Новости
03.40 "Дурнушка". Сериал
04.20 "Детективы"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05, 03.35 "Родить вундеркинда"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.35 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.55 "Богатая и любимая"
12.55 "Райские яблочки"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Тайны следствия". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
17.35 "Дворик", 92-я серия
18.05 "Ефросинья", 101-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Вы заказывали убийство", 9-я и 10-я серии
22.55 "Дворжецкие. Вызов судьбе". Док. фильм
23.50 "Фестиваль "Славянский базар-2010"
00.55 "Вести+"
01.15 "Честный детектив"
01.45 "Как найти идеал". Комедия
04.30 "Городок"

### НТВ
06.00 "Рублевка. Live"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Кулинарный поединок"
09.30 "Чистосердечное признание"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.25 "Профессия - репортер"
11.00 "Агент особого назначения". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.30 "Адвокат". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Столица греха". Сериал
21.30 "Глухарь". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Сеанс с Кашпировским"
00.25 "Таксист"
01.15 "Футбольная ночь"
01.50 "Человек, несущий смерть"
04.50 "Особо опасен!"
05.05 "2,5 человека"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 "Ватан. События недели"**
**10.10 "Погода"**
**10.15 "Виктория"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 "Фильм-детям"**
**12.40 "Мультфильм"**
**13.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.15 "Музыка на канале"**
**13.30 "Сельский час"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.15 Художественный фильм**
**16.45 "Эмиль из Леннеберги"**
**17.10 "Виктория"**
**18.05 "Любимые мелодии"**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.30 "Автограф"**
**20.00 "Полезные новости"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "Судьба"**
**21.00 "Деловой форум"**
**21.30 Новости (на русск.яз.)**
**22.00 "Спортивный интерес"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.05 Код истории. По окончании: погода**

## 13 ИЮЛЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Большая нефть". Драма
22.20 "Неделя Франции на Первом". "Тур де Франс".
23.30 "Мои звезды прекрасны". Комедия
01.00 "Американская семейка". Сериал
01.30, 03.05 "8 миллионов способов умереть"
03.00 "Новости"
03.50 "Дурнушка"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.35 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.55 "Богатая и любимая"
12.55 "Райские яблочки"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Тайны следствия". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
17.35 "Дворик", 93-я серия
18.05 "Ефросинья", 102-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Вы заказывали убийство", 11-я и 12-я серии
22.55 "Загремим под фанфары. Борис Новиков". Док. фильм
23.50 "Фестиваль "Славянский базар-2010"
00.55 "Вести+"
00.15 "Как только сможешь"
03.30 "Девушка-сплетница"

### НТВ
06.00 "Рублевка. Live"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Квартирный вопрос"
09.30 "Чистосердечное признание"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.25 "Профессия - репортер"
11.00 "Агент особого назначения". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Адвокат". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Столица греха". Сериал
21.30 "Глухарь". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Сеанс с Кашпировским"
00.25 "Таксист"
01.25 "Сталин. Live"
02.25 "Помутнение". Фантастика
04.10 "Контора"
05.10 "2,5 человека"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.25 "Полезные новости"**
**09.35 "Виктория"**
**10.30 "Автограф" Т. Даянова**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 "Фильм-детям"**
**13.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.15 "Музыка на канале"**
**13.30 "Действующие лица"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск.яз.)**
**15.15 "Млечный путь" М. Идрисов**
**16.05 "Шежере". Гафурийский район**
**16.35 "Мультфильм"**
**16.50 "Эмиль из Леннеберги"**
**17.15 "Виктория"**
**18.10 "Любимые мелодии"**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.30 "Точка зрения"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.35 "Школа труда". VI Всероссийский слет ученических производственных бригад**
**21.30 Новости (на русск.яз.)**
**22.00 "Уфимское "Времечко"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.05 "Криминальный спектр"**
**23.25 "Код истории". По окончании: погода**

## 14 ИЮЛЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Большая нефть". Драма
22.20 Неделя Франции на Первом. "Мадам Анни Жирардо"
23.30 "Последний урок". Драма
01.10 "Американская семейка"
01.40, 03.05 "Под солнцем Тосканы". Мелодрама
03.00 Новости
03.50 "Дурнушка"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Секрет его молодости. Карел Готт"
10.00 "О самом главном"
11.00, 14.00 "Вести"
11.35 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.55 "Богатая и любимая"
12.55 "Райские яблочки"
13.40 "Вести. Дежурная часть"
14.30, 17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Тайны следствия". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.35 "Дворик", 94-я серия
18.05 "Ефросинья", 103-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Вы заказывали убийство", 13-я и 14-я серии
22.55 "Двое против Фантомаса. Де Фюнес - Кенигсон". Док. фильм
23.50 "Фестиваль "Славянский базар-2010"
00.55 "Вести+"
01.15 "Монолог". Психологическая драма
03.20 "Горячая десятка
04.25 "Городок"

### НТВ
06.00 "Рублевка. Live"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Дачный ответ"
09.30 "Чистосердечное признание
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.25 "Профессия - репортер"
11.00 "Агент особого назначения"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Адвокат". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Столица греха". Сериал
21.30 "Глухарь". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Сеанс с Кашпировским"
00.30 "Таксист"
01.30 "Сталин. Live"
02.25 "Марсельский контракт"
04.15 "Контора"
05.10 "2,5 человека"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00, 13.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.25 "Виктория"**
**10.20 "Музыкальный момент"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 Фильм-детям**
**12.45 "Мультфильм"**
**13.15 "Музыка на канале"**
**13.30 "Сокращая расстояния"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.15 "Байык"**
**16.05 "Инсан". А. Гаязов**
**17.15 "Виктория"**
**18.10 Новости (на башк. яз.)**
**18.35 "Родословная малой Родины"**
**18.55 "Кубок России по футболу 1/16 финала. "Горняк" (Учалы) - "Локомотив (Москва). Прямая трансляция**
**21.00 "Сэнгелдэк"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Тай-тулак"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.05 "Историческая среда"**
**23.05 "Хрустальный соловей-2010"**
**По окончании: погода**

## 15 ИЮЛЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 "Новости"
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят" с Андреем Малаховым"
21.00 Время
21.30 "Большая нефть". Драма
22.20 "Человек и закон"
23.30 "Обмани меня". Сериал
01.20 "Калифрения". Зак. серия
00.20 "Париж! Париж!". Музыкальная комедия
02.30, 03.05 "Воссоединение семьи Медеи". Комедия
03.00 Новости

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00, 14.00, 17.00 "Вести"
11.35 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.55 "Богатая и любимая"
12.55 "Райские яблочки"
14.30, 17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Тайны следствия". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры"
17.35 "Дворик", 95-я серия
18.05 "Ефросинья", 104-я серия. Сериал
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Вы заказывали убийство", 15-я и 16-я серии
22.55 "Русские в Югославии. Между молотом и наковальней". Док. фильм
23.50 "Фестиваль "Славянский базар-2010"
00.55 "Вести+"
01.15 "Террорист"
03.30 "Девушка-сплетница"

### НТВ
06.00 "Рублевка. Live"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Следствие вели..."
09.30 "Чистосердечное признание"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.25 "Профессия - репортер"
11.00 "Агент особого назначения"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Адвокат". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Столица греха". Сериал
21.30 "Глухарь". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Сеанс с Кашпировским"
00.30 "Таксист"
01.25 "Сталин. Live"
02.25 "Квентин Дорвард"
04.15 "Контора"
05.10 "2,5 человека"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.25 "Полезные новости"**
**09.35 "Виктория"**
**10.20 Мультфильм**
**10.30 "Тай-тулак"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 "Фильм-детям"**
**13.00, 19.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.15 "Музыка на канале"**
**13.30 "Историческая среда"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.15 Художественный фильм**
**16.55 "Концерт хоровой капеллы"**
**17.20 "Виктория"**
**18.10 "Учим башкирский язык"**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.30 "Исторический Башкортостан"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "Пятая четверть"**
**21.00 "Сельский час"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "От Ика до Яика"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.05 "Код истории". По окончании: погода**

## 16 ИЮЛЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 "Новости"
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "Поле чудес"
19.10 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 Время
21.30 "Пророк". Криминальная драма
00.20 "Ни жив, ни мертв". Триллер
02.20 "Телеведущий". Комедия
0400 "Гуру". Комедия

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Мой серебряный шар"
10.00 "О самом главном"
11.00, 14.00 "Вести"
11.35 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.55 "Богатая и любимая"
12.55 "Райские яблочки"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Тайны следствия". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
17.35 "Дворик", 96-я серия
18.05 "Ефросинья", 105-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Юрмала"
22.55 "Славянский базар в Витебске"
00.30 "Девчата"
01.20 "Держи ритм". Драма
03.45 "Еще одна пятница"
05.25 "Городок"

### НТВ
06.00 "Рублевка. Live"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Главный герой представляет"
09.30 "Чистосердечное признание"
10.00, 13.00, 16.00 "Сегодня"
10.25 "Профессия - репортер"
11.00 "Агент особого назначения"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Адвокат". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.30 "Следствие вели..."
20.30 "Семин". "Отступники". Детективный сериал
22.25 "НТВшники. Хочу быть боссом"
23.25 "Диктатура мозга"
00.35 "Женский взгляд" Оксаны Пушкиной"
01.10 "Сталин. Live"
02.10 "Нирвана". Драма
03.55 "Контора"
04.55 "2,5 человека"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.30 "Виктория"**
**10.20 Мультфильм**
**10.30 "Телекомпас"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 "Фильм-детям"**
**12.45 "Топ-топ, топает малыш"**
**13.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.15 "Музыка на канале"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.15 "Художественный фильм"**
**17.05 "Виктория"**
**17.55 "Йома"**
**18.20 "Любимые мелодии"**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.00 "Новости" (на башк. яз)**
**19.30 "Точка зрения"**
**20.05 "Полезные новости"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "Историческая среда"**
**21.00 "Райхан"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Уфимское "Времечко"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.05 "Криминальный спектр"**
**23.25 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 17 ИЮЛЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости
06.10 "Федорино горе". Мультфильм
06.20 "Один из нас"
08.10 "Дисней-клуб"
09.00 "Играй, гармонь любимая!"
09.40 "Слово пастыря"
10.00, 12.00 Новости (с субтитрами)
10.10 "Непутевые заметки"
10.30 "Смак"
11.10 "Моя родословная. Евгений Гришковец"
12.20 "В логове сомалийских пиратов"
13.20 "Неделя Франции на Первом. "Пьер Ришар. Невезучий счастливчик"
14.20 "Беглецы". Комедия
16.00 "Цирк со звездами"
18.00 "Футбол. Чемпионат России. XIII тур. "Спартак" - "Рубин". Прямой эфир.
20.00 "Кто хочет стать миллионером?"
21.00 "Время"
21.15 "По ту сторону кровати". Комедия
23.00 "Генсбур. Любовь хулигана". Драма
01.30 "Пять легких пьес". Мелодрама
03.30 "Остров"

### РОССИЯ 1
05.55 "Табор уходит в небо"
08.00 "Вести"
08.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
08.20 "Ну, Котеночкин, погоди!"
09.20 "Приключения мышонка Переса". Семейная комедия
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.20 "Паблисити"
11.40 "Качество жизни"
11.55 "Формула совершенства"
12.15 "Комната смеха"
13.20 "Сто к одному"
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Она вас любит?". Комедия
16.05 "Кто хочет стать Максимом Галкиным"
17.05 "Субботний вечер"
19.00 "Первая попытка". Мелодрама
20.00 "Вести"
20.25 "Первая попытка". Продолжение
23.20 "Теория хаоса". Романтическая комедия
01.00 "Джон Кью"
03.25 "Выше холма"
05.30 "Городок"

### НТВ
05.45 "Рублевка. Live"
06.45 "Люди Икс: эволюция"
07.30 "Сказки Баженова"
08.00, 10.00, 13.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ". Лотерея
08.50 "Без рецепта"
09.25 "Смотр"
10.20 "Главная дорога"
11.00 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.25 "Особо опасен!"
14.05 "Лучший город земли. Москва бандитская"
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Очная ставка"
17.10 "Преступление будет раскрыто". Сериал
19.00 "Сегодня"
19.25 "Самые громкие русские сенсации: Место под звездами. Короли и шуты"
21.05 "Ты не поверишь!"
21.40 "Гром ярости". Детектив
23.30 Легенды видео". "Полицейская академия-2": их первое задание. Комедия
01.20 "Радиоволна"
03.55 "Контора"
04.50 "Мужчины в большом городе"

### БСТ
**08.00 Новости (на русск. яз.)**
**08.00 "Доброе утро!"**
**08.50 Погода**
**08.55 Мультфильм**
**10.25 "Советы садоводам"**
**11.00 "Волшебный курай"**
**11.35 "К. Гольдони. "Кьоджинские перепалки". Спектакль Башкирского академического театра драмы им. М. Гафури**
**14.00 Новости (на башк. яз.)**
**14.25 "Сулпылар"**
**14.45 "Черный плащ"**
**15.10 "Дарю песню"**
**16.15 "Позитив"**
**16.35 "Аплодисменты". Р. Зиганов**
**17.30 "Малый купол мира-2010". Передача 1-я**
**18.00 "Антракт". А. Салаватов**
**18.40 "Вестник Газпромтрансгаз Уфа"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.20 "Дарю песню"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.33 "Династии"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На сон грядущий"**
**22.45 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 18 ИЮЛЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.50, 06.10 "Городской романс"
06.00 Новости
07.50 "Служу Отчизне!"
08.20 "Дисней-клуб"
09.10 "Здоровье"
10.00, 12.00 Новости
10.20 "Пока все дома"
11.10 "Счастье есть!"
12.10 "Подари мне жизнь!"
12.40 "Коко Шанель". Драма
16.20 Док. фильм
17.00 "Черный принц". Детектив
18.30 "Олимпиада-80. 30 лет спустя"
21.00 Воскресное "Время"
21.15 "Концерт"
23.40 "Цыпочка". Комедия
01.20 "Футбол. Чемпионат России. XIII тур" Мелодрама
03.20 "Дурнушка"

### РОССИЯ 1
05.55 "31 июня"
08.40 "Утренняя почта"
09.15 "Приключения мышонка Переса"
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести - Башкортостан". Неделя в городе"
11.50 "Городок"
12.20 "Любовь земная"
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Честный детектив"
15.00, 03.50 "Шерлок Холмс и доктор Ватсон". Рождение легенды"
16.00 "Смеяться разрешается"
18.10 "Осенние заботы". Мелодрама
20.00 "Вести"
20.25 "Ромашка, Кактус, Маргаритка". Комедия
22.15 "Человек, который знал все". Фантастика
00.20 "Незнакомцы". Драма
02.00 "Сплетня"

### НТВ
05.45 "Рублевка. Live"
06.45 "Люди Икс: эволюция"
07.30 "Дикий мир"
08.00, 10.00, 13.00, 16.00 "Сегодня"
08.15 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.20 "Первая кровь"
11.00 "Кремлевские жены. Нина Берия. Жена дьявола"
12.00 "Дачный ответ"
13.25 "Золото партии". Драма
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "И снова здравствуйте!"
17.10 "Преступление будет раскрыто"
19.00 "Сегодня. Итоговая программа" с Кириллом Поздняковым"
19.25 "Чистосердечное признание"
19.55 "Дорожный патруль". Сериал
00.00 "Авиаторы"
00.30 "Брачный контракт". Сериал
02.30 "Поймать и посадить"
04.10 "Контора"
05.15 "Мужчины в большом городе"

### БСТ
**08.00 Новости (на русск. яз.)**
**08.00 "Для вас, ветераны!"**
**08.45 Погода**
**08.50 Мультфильм**
**10.05 "Ребятам о зверятах"**
**10.30 "Бабушкин сундучок"**
**11.00 "Тэмле"**
**11.30 "Сулпылар"**
**11.50 "Семер"**
**12.05 "Байтус"**
**12.25 "Артылыш"**
**13.00 "Ностальгия"**
**14.15 "Книжный дом"**
**14.40 "Дарю песню"**
**15.40 "Салям"**
**16.00 Мультсериал**
**16.25 "Измени жизнь"**
**16.45 "Сокращая расстояния". Пермский край**
**17.15 "Автограф" С. Бадретдинов**
**18.00 "Дарю песню!". Концерт по заявкам**
**19.00 "Новое кино"**
**19.20 "Тропинки судьбы"**
**20.00 "В центре внимания"**
**20.25 "Байык"**
**21.10 "Урал Лото 6 из 40"**
**21.30 "Ватан". События недели"**
**22.40 Погода**
**22.45 "Вечер.com"**
**23.30 Художественный фильм. По окончании: погода**

Өфөнөң 1-се педагогия колледжы уҡытыусылары һәм студенттары коллективы, элекке директор, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны
**Ғөбәйҙуллин Исмәғил Ибраһим улының**
вафаты менән бәйле, унның туғандарының һәм яҡындарының ауыр ҡайғыһын уртаҡлаша.

ЙӘШЕЛ ДАУА

# АЯҠ АҪТЫНДА БИТ ДАРЫУЫҢ...



Ҡыҙыл көртмәле

**Элек-электән ата-бабаларыбыҙ ҡыҙыл көртмәленең дауалау үҙенсәлектәрен белгән һәм уны һәр осраҡта ла әүҙем ҡулланған. Ҡыҙыл көртмәле емештәре йөрәк мускулдарын әүҙемләштерә, артериаль ҡан баҫымын төшөрә, ҡан көпшәләренең ныҡлығын һәм һығылмалығын арттыра. Япраҡтарын төнәтеп, артрит, ревматизм менән яфаланғанда, умыртҡа һөйәге имгәнгән осраҡта эсәләр, шулай уҡ япраҡтарын лейкоз ваҡытында ла киң ҡулланалар. Япраҡтарынан ҡайнатылған сәй шәкәр диабеты ваҡытында файҙалы.**

**Дисбактериоз.** Сәйгә яңы йәки киптерелгән емештәрен һалырға (антибиотиктар менән дауаланған ваҡытта).

**Лейкоз.** 1 ҡалаҡ киптерелгән япраҡтарҙы бер стакан ҡайнар һыуҙа бешерергә, 1 сәғәт төнәтергә. Көнөнә өс тапҡыр ярты стакан ҡабул итергә (комплекслы дауаланғанда ҡарабойҙай сәскәһе, ҡара көртмәле һәм ер еләге япраҡтары, кәкүк емеше үләне йәки һуты, бысағулән тамыры төнәтмәләре менән ҡушырға мөмкин).

**Радиоактив нурланыш, аҙ ҡанлылыҡ, диабет.** 1 ҡалаҡ емеште 1 стакан һыуҙа ҡайнатырға, 1 сәғәт төнәтергә. Ашағандан һуң көнөнә 2 тапҡыр 1 стакан эсергә.

**Подагра, остеохондроз, артрит, полиартрит.** 100 г кипкән япраҡты 2,5 л ҡайнаған һыуға һалып, ҡапҡаслап, быуҙа тоторға, һарҡытырға. Һуңынан бер стакан араҡы өҫтәргә, ҡайнатмай ғына 15 минут утта быҡтырып алырға. Ашауҙан ярты сәғәт алда стакандың өстән бер өлөшөн ҡабул итергә. Дауаланыу ваҡыты 6 ай. Ә полиартрит булғанда һеҙҙектә төпрәләр бөткәнсе дауам итергә.

**Ашҡаҙандың сей яраһы.** 1 ҡалаҡ япраҡтарҙы 2 стакан ҡайнар һыуға һалып, 15 минут һыу быуында бешереп алырға, 45 минуттан һуң һарҡытырға. Баштағы күләмгә еткәнсе ҡайнаған һыу ҡойорға. Ашағанға тиклем көнөнә 3-4 тапҡыр 50 миллиграмм эсергә.

**Тиреләге яман шеш ауырыуы.** Көн һайын бер йәки ярты стакан ҡыҙыл көртмәлене өҫтәмә дауаланыу менән ҡушып көнөнә 1-2 тапҡыр ашарға.

**Ҡара көртмәлене гипотониктарға һаҡ ҡулланырға кәңәш ителә, сөнки уның япраҡтары, бигерәк тә емешенән яһалған һуты баҫымды тиҙ төшөрә. Бөйөр менән ауырыусыларға ла һаҡ ҡулланырға кәрәк.**



Меңъяпраҡ

**Меңъяпраҡ ҡан ағыуҙы туҡтатырға ярҙам итә. Хатта уның тәьсире медицина белгестәре киң ҡулланған кальций хлоридынан ике тапҡыр күберәк тиҙәр. Меңъяпраҡ ҡыҫҡа ваҡыт эсендә ҡанды туҡтатып ҡына ҡалмай, шул уҡ ваҡытта яраларҙы ла тиҙ уңалта. Уны бөйөр, гепатит, холецистит, дизентерия, ашҡаҙандың сей яраһы һәм бөйөн эсәге ауырыуҙарынан, һейҙәк ҡыуығы шешкәндә, йөрәк һәм нервы ауырыуҙары булғанда ҡулланалар. Меңъяпраҡтан яһалған препараттар ҡан таҙартыу һәләтенә эйә, аллергияға ҡаршы тәьҫир итә, тромбоциттарҙы күбәйтә.**

Был үләндең төнәтмәһен һәм һарҡындыһын баш һәм ашҡаҙан ауырыуҙары ваҡытында эсәләр (ашҡаҙан ауыртыуҙары 15-25 минут эсендә баҫыла).

**Астма (инфекциялы-аллергиялы).** 2 ҡалаҡ үләнде 1 л һыуға һалып талғын утта 20 минут ҡайнатырға, 40 минут төнәтергә. Көнөнә 4 тапҡыр яртышар стакан-лап эсергә. Курсты 2 аҙнанан 2-4 айға тиклем дауам итергә.

**Күрем ваҡыты боҙолғанда.** Йәйгеһен көнөнә өс тапҡыр 2 ҡалаҡ үлән һутын ашар алдынан ҡабул итергә. Циклды яйлаштыра, йөрәк эшмәкәрлеген яҡшырта.

**Геморрой.** 1 стакан һыуға 1 ҡалаҡ үлән һалырға. 15 минут ҡайнатырға, 45 минут төнәтергә, һарҡытырға. Ашар алдынан көнөнә өс тапҡыр 1 ҡалаҡ эсергә (юғары кислоталы гастрит булғанда ярамай).

**Аҙ ҡанлылыҡ (анемия).** 100 г сәскәле кипкән үләнде 2 л һыуға һалырға, 2 аҙна төнәтергә. Ашар алдынан 2 ҡалаҡ эсергә.

Меңъяпраҡты ҡан ойошо юғары булғанда ҡулланырға кәңәш ителмәй. Гипотония ваҡытында ла меңъяпраҡ препараттары ҡулланыу тыйыла. Шулай уҡ ул ауырлы ҡатындарға ла зыянлы булыуы мөмкин.



Ҡайын

**Ҡайын бөтә ауырыуҙан да - һыуыҡ үтеүҙән башлап яман шештәргә тиклем ярҙам итә. Дауаланыу сифатында уның бөрөләре, япраҡтары, сәскә һырғалары, һуты, бәшмәге, ҡайырыһы, туҙы ҡулланыла. Тик самаһын белеп ҡуллана ғына бел.**

**Параметрит (балаятҡы эргәһендәге туҡыманың шешеүе).** Ҡайындың туҙ аҫтында торған ҡыҙыл ҡайырыһын киптерергә. 1 ҡалаҡ тултырып 1,5 стакан ҡайнар һыуға һалырға, һыу быуында 30 минут тоторға. 10 минут төнәтергә, һарҡытырға. Көнөнә 2 тапҡыр ашауҙан һуң 30-40 минут үткәс, ярты стакан ҡабул итергә.

**Нервы системаһы туберкулезы.** Нервы системаһы туберкулез менән зарарланған осраҡта (туберкулез менингиты, баш мейеһенән туберкулезды бөтөрөү һ.б) стаканға ҡайын бөрөләре, бал һәм спирт һалып бутарға. 9 көн төнәтергә. Көнөнә өс тапҡыр 1 ҡалаҡ эсергә.

**Шәкәр диабеты.** 2-3 ҡалаҡ ҡайын бөрөһөн 2 стакан ҡайнар һыуға һалырға, 6 сәғәт төнәтергә. Тәүлек буйына эсергә. Курсты ҡанда шәкәр күрһәткесе кәмегәнсе 1-2 аҙна дауам итергә.

**Панкреатит.** Ҡайын бөрөләрен былай төнәтәләр: бөрө һалынған ярты литрлыҡ банканы тултырғансы араҡы ҡойоп, ныҡ итеп ябып, 2-3 айға ҡуйырға. Төнәтмәне балғалаҡлап көнөнә 3-4 тапҡыр ҡулланырға.

**Варикоз.** Үрҙә килтерелгән төнәтмәне бармаҡтар менән ҡан тамырҙарына һөртөргә һәм 10-15 минут ял иткәндән һуң ҡабатларға. Ул һеңергә һәм кибергә тейеш.

**Ҡуҙ ҡабағы шешеүе.** 1 ҡалаҡ яңы сыҡҡан япраҡтарға ҡайнаған һыуыҡ һыу ҡойоп, 8 сәғәт төнәтергә.



Эре кесерткән

**Иң ныҡ таралған ҡый үләне булған кесерткәндән яҙ һайын һәр ғаилә витаминлы аш әҙерләп ҡыуана, шулай уҡ ул күп төрлө ауырыуҙарға ҡаршы дауа ла булып тора.**

Дауаланыу маҡсатында уның япраҡтарын һәм тамырын ғына түгел, ә сәскәһен дә, орлоҡ емешен дә, шулай уҡ яңы үләндән һығылған һутын да ҡулланалар. Мәҫәлән, уның һутын һәм яңы орлоҡ емештәрен остеомиелит, варикоз һәм трофик яман шеше менән ауырығанда ҡулланалар, һутын ала ауырыуынан (витилиго) ҡотолор өсөн тәнгә һөртәләр. Шәкәр менән бешекләнгән тамырҙарын һәм киптерелгән орлоҡтарын бөйөргә һәм үт ҡыуығына таш ултырғанда ҡулланалар. Сәскәһенең һарҡындыһын диабет, хроник тире ауырыуҙары, яман шеш менән ауырығанда эсәләр. Кесерткән ҡанда эритроциттарҙың күләмен арттыра, углеводтар алмашыныуына тәьҫир итә, шуға күрә уны йыш ҡына аҙ ҡанлылыҡ булғанда ҡулланалар: киптерелгән япраҡтар порошогын бал менән бутайҙар һәм көнөнә бер нисә тапҡыр бер сәй ҡалағы ҡабул итәләр.

Шуны иҫтә тоторға кәрәк: кесерткән препараттарын ҡандың ойошҡанлығы юғары булған осраҡта, гипертония, атеросклероз булғанда ҡулланырға ярамай. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың күп ауырыуҙарына ярҙам итһә лә, кесерткән полип, һыулы шеш (киста), түлләк һәм аналыҡ биҙе арҡаһында барлыҡҡа килгән ҡан ағыуҙар ваҡытында кире тәьҫир итә.

Кесерткәнде йөклө ҡатындарға, бигерәк тә йөкләлектең һуңғы айҙарында ҡулланырға ярамай. Шулай уҡ был осраҡтарҙа баҡса кесерткәнен дә ҡулланырға ярамай. Дымлы кесерткәндең бөйөрҙәрҙе зарарлауы мөмкин. Һипкелдәр, пигмент таптар булған осраҡта кесерткәнде аҙыҡҡа ҡушырға ярамай, сөнки ҡояш нурҙарына һиҙгерлек арта.

**Рим ӘХМӘДОВ.**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# ЙӨРӘК СИРЛЕЛӘРГӘ...

## йәйге кәңәштәр

**Йәйге эҫе көндәр йөрәк сирҙәре менән яфаланыусыларҙың сәләмәтлегенә кире йоғонто яһауы ла ихтимал. Әммә был уларға йәйҙе өйҙә генә үткәрергә кәрәк, тигәнде аңлатмай. Йәйге ялдарҙың, диңгеҙҙә йөҙөүҙең һәм сәйәхәт итеүҙең бәхетле мәлдәрен төрлө күңелһеҙ ваҡиғаларһыҙ үткәреү тураһында Ғ. Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһының кардиология бүлеге етәксеһе, медицина фәндәре кандидаты Әлфирә РӘХМӘТУЛЛИНА һөйләй.**

Кардиологтарҙың Бөтөн Рәсәй ғилми йәмғиәте мәғлүмәттәре буйынса, илдә һуңғы 15 йыл эсендә йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы ауырыуҙарынан үлеүселәр һаны 1,5 тапҡырға артҡан һәм уртаса Европа күрһәткестәрен 3 тапҡырға үтеп киткән. Был халыҡ һаны кәмеүенең төп сәбәптәренең береһе булып тора. Бөгөнгө көндә 35-50 йәштәге һәр унынсы рәсәйле йөрәк ауырыуҙарынан яфалана. Медицина статистикаһы буйынса, Рәсәйҙә көн һайын йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренән 3 мең кеше үлә, юғары ҡан баҫымы менән яфаланыусыларҙың дөйөм һаны - 49 миллион кеше.

Йәй көнө йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре, башҡа миҙгелдәр менән сағыштырғанда, 4 тапҡырға йышыраҡ осрай. Климат үҙгәртеү, йәйге эҫе, дымлылыҡ күтәрелеүе инфаркт һәм инсульт сәбәпсеһе була. Йәйге көндә баҡсала ал-ял белмәй эшләүселәр ҙә дауаханаға эләгеүе ихтимал. Бынан тыш, тәбиғәт ҡосағында ял итеүселәр ҙә хәүеф төркөмөнә инә, сөнки оҙайлы ваҡыт ҡояштың эҫе нурҙары аҫтында булыу гипертоник криз йәки стенокардия өйәнәгенә килтереүен иҫтә торорға кәрәк. Спиртлы эсемлектәр эсеү менән мауығыу эҫе көндәрҙә айырыуса тыйыла.

Йәйге эҫе көндә һау кеше лә тын ҡыҫылыуы, йөрәк тибеүе йышайыуы менән яфалана. Ә һау булмаған йөрәк был осорҙа бигерәк көсөргәнешле эшләргә мәжбүр була. Шуға ла уларға йәй башында уҡ табипҡа мөрәжәғәт итеп, профилактик тикшереныү үтеү мөһим.

Йәйге ялын баҡсала уҙғарыусыларға ауыр эштәрҙе көндең эҫе мәленән алда йәки ул бер аҙ һүрелгәс башҡарыу кәңәш ителә. 30-40 минут эшләп алһағыҙ, туҡтап ял итеп алығыҙ. Әгәр ҙә тынығыҙ ҡыҫыла, башығыҙ әйләнә йәки үҙегеҙҙе хәлһеҙ тояһығыҙ икән, шунда уҡ эшләүҙән туҡтағыҙ. Башты аҫҡа эйеп йәки әйелеп еләк-емеш йыйырға ла тырышмағыҙ, был осраҡта ҡан әйләнеше боҙолоп, баш әйләнеүе, артериаль ҡан баҫымының ҡапыл күтәрелеүе, иҫте юғалтыу, инсульт кисереү мөмкинлеге бермә-бер арта. Ындай эштәрҙе бейек булмаған ултырғысҡа ултырып башҡарырға кәрәк. Ныҡ эҫе көндәрҙә асыҡ ҡояшта 15 минуттан артыҡ булмағыҙ. Әгәр ҙә йөрәгегеҙ ауырта башлаһа, хәлегеҙ насарайһа, һалҡын бүлмәгә инергә тырышығыҙ. Асыҡ һауала ялан баш йөрөү тыйыла.

Йөрәктең ишемик сирҙәре менән яфаланыусыларға эҫе көндә һыуыҡ һыуға төшөү ҙә ярамай. Һыуыҡ һыу ҡан тамырҙарын ҡапыл тарайтасаҡ һәм стенокардияға, хатта миокард инфарктына килтерәсәк. Тирләгән мәлдә һыуға төшөргә тырышмағыҙ, сөнки температураның ҡапыл үҙгәреүе ҡан тамырҙары өсөн зарарлы. Ярҙан йыраҡ йөҙөп китмәгеҙ.

Ит һәм майҙы аҙыраҡ, үҫемлек һәм һөт аҙыҡтарын күберәк ашағыҙ. Эҫе көндә күп ашарға тырышмағыҙ, әммә һыуҙы мөмкин тиклем йышыраҡ эсеү мөһим. Тирләү - йылы климатта организмдың һаҡланыу реакцияһы. Ә тирләү өсөн организмға һыу етерлек кәрәк.

Һуңғы йылдарҙа күптәр ял итергә сит илгә сыға. Йөрәге ауыртҡан кешеләргә тропик һәм экваториаль илдәрҙә һайларға кәңәш ителмәй. Йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы сирҙәре менән яфаланған оло кешеләргә илдең Европа өлөшөндәге курорттарҙа ял итеү файҙалы. Иң мөһиме, йәй көнө дарыуҙар ҡабул итергә онотмағыҙ.



## КОТЛАЙБЫҘ!

Сибай ҡалаһында йәшәүсе йәндәй күргән әхирәтем, бала саҡ дуҫым, һөйөклө **Римма Лоҡман ҡыҙы Юнысова-Йәрмөхәмәтованы** тыуған көнө менән ҡотлайым!

Гел шулай йәш, сибәр, фәрештәләй изге күнелле бул, ғаилә, бала-сағаларың ҡыуанысына сорналып, оҙаҡ, бәхетле йәшәргә насип итһен Хоҙай һинә.

**Өфө ҡалаһынан әхирәтең Фәүзиә.**

✓ *Маҡтансыҡ үҙен маҡтап ҡыуаныр, бәхетһеҙ үҙен алдап йыуаныр.*
*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



ЗАУЫҠ

# МОДА БАҘАРЫНДА...

## башҡорт милли кейеме

**Йәштәребеҙ һәр саҡ Европа модаһын өҫтөн күрҙе: ҡыҙҙарыбыҙ тәндәрен мөмкин тиклем асыҡ ҡалдырып кейенеүҙе модаға һанаһа, егеттәребеҙ һығып торған салбар кейеүгә, ҡолаҡтарына алҡа тағыуға тиклем барып етте. Әммә һуңғы осорҙа донъя модаһында этник һыҙаттарға өҫтөнлөк бирелә башланы. Шул уңайҙан йәштәребеҙгә: "Төрлө байрамдарға, кисәләргә йөрөгәндә стилләштерелгән башҡорт кейемдәре кейер инегеҙме? Был теләкте тормошҡа ашырыуға нимә ҡамасаулай?" - тигән һорауҙар менән мөрәжәғәт иттек.**

**Айһылыу БИКМУРЗИНА, уҡытыусы:** Баш ҡалабыҙҙа уҙғарылған сараларға йөрөгәндә бер апайҙы гел генә башҡорт кейемендә күрәм. Ул хатта ябай күлдәк кейһә лә, һаҡал таға, беләҙектәре, һырғалары ла шул тиклем матур. Уның илһөйәрлеге, рухлы икәнлеге йөҙөнә сыҡҡан. Ни өсөн барыһы ла шулай стилләштерелгән башҡорт кейеме киймәй? Бында мин ике сәбәпте күрәм: беренсеһе - илһөйәрлек, милләтең менән ғорурлыҡ тойғолары етмәүе (башҡалар ни әйтер, тип ҡурҡыу), икенсеһе - мөмкинлектәр булмауы (уларҙы тектереп алыу бындай кейемгә ҡарағанда ике тапҡырға ҡиммәтерәккә төшә). Ә милли колоритлы, стилләштерелгән башҡорт кейемдәре башҡа халыҡтарҙа гел һоҡланыу ғына уята. Беҙ Төркиәгә барғанда махсус рәүештә тектереп алған орнаментлы туникалар кейеп, сәсебеҙгә сулпылар тағып йөрөнөк. Был төрөк халҡында шул тиклем һоҡланыу уятты, һатығыҙ, тип аптыраттылар. Стилләштерелгән милли кейемдәр ярҙамында сит тарафтарҙа үҙеңде, милләтеңде, республиканды таныта алаһың. Шуға күрә, көн дә яңырып торған модаға эйәреүҙән туҡтап, булған ҡаршылыҡтарҙы еңеп, үҙебеҙҙең асылыбыҙға, булмышыбыҙға тап килгән кейемдәргә өҫтөнлөк бирергә, уларҙы модаға индерергә кәрәктер. Барыһы ла үҙебеҙҙән тора.

**Сулпан МӘҮЛИТОВА, уҡытыусы:** Һуңғы йылдары һатыуҙа стилләштерелгән башҡорт кейемдәре күҙгә салына башланы. Уларҙы кейгән саҡта беҙҙә милли рух тойғоһо тағы ла көсәйә, һин үҙеңдең башҡорт милләтенән булыуың менән ғорурланаһың, башҡаларҙан айырылып тораһың. Беләгемә һәр саҡ өләсәйем бүләк иткән боронғо көмөш беләҙекте тағып йөрөйөм, шулай уҡ башҡа биҙәүестәрем дә боронғо башҡорт биҙәүестәренә оҡшаған. Концерттарға, театрға йәки башҡа сараларға барған саҡта оҙон сәстәремә сулпыларымды тағам. Бөтәһе лә ҡалын оҙон толомдарыма һоҡланып ҡарай, шуға күрә ошо сулпылар яман ҡараштан, күҙ тейеүҙән дә һаҡлайҙыр, тип ышанам.

**Руфия ҒӘЛИНА, студент:** Минә башҡорт милли кейемдәре бик оҡшай. Тик һатыуҙа улар бигерәк ҡиммәт тора, әле уларҙы алырға студент кеҫәһе таҡырыраҡ. Мөмкинлегем булғас, бындай кейемдәрҙе байрамдарға, кисәләргә бик теләп кейер инем. Һуңғы йылдарҙа беҙҙә дини ҡанундарыбыҙға ярашлы кейенеүселәр күбәйҙе. Төркиәнән һатып алынған тоҡ кеүек кейемдәрҙә йөрөгәнсе, башҡорт милли кейемен стилләштереп кейһәләр, мосолман ҡыҙҙарыбыҙ тағы ла күркәмерәк күренер ине.



**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Мода тигәнең бик ылыҡтырғыс күренеш инде ул. Төрлө илдәрҙең модельерҙары үҙ халҡының йәштәре өсөн кейем өлгөләре ижад иткәндә барыбер ҙә халыҡсан традицияларға, милли һыҙаттарға мөрәжәғәт итә. Мәҫәлән, беҙҙең баҙарҙарҙы ла баҫып алған Ҡытай, Япон стилендәге кейемдәр. Беҙ уларҙы кейергә атлығып торабыҙ. Әммә башыбыҙға "Нимә үҙебеҙҙең милли стилдәге кейемдәрҙе киймәйбеҙ әле?" тигән һорау инеп тә сыҡмай. Ә һеҙ, гәзит уҡыусылар, стилләштерелгән башҡорт кейемдәре кейеүгә нисек ҡарайһығыҙ?**

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА**
**яҙып алды.**

АТЫҢ КЕМ?

# ИЗГЕ БЕР ИШАРАЛЫР



Ҡәҙер төнө - Ислам дինендә мөбәрәк кисәрҙәң иң ҡиммәтлеһе. Был кисten өҫтөнлөгө хаҡында Ҡөрьән-Кәримдә лә, хәҙистәрҙә лә бик күп әйтелә. Ана ошо мең айҙан да хәйерле булған был кистә Ҡулбирҙиндар ғаиләһендә гүзәл бер ҡыҙ бала донъяға килә. Раббыларының рөхсәте һәм төрлө бойороҡтар менән күктәрҙән фәрештәләр төшкән ваҡытта якты донъяға килгәнлеген белдереп, тәүге ауазын һала. Ошо изге кистә донъяға килгән өсөн дә өләсәһе Гөлшат күп уйлап та тормаҫтан ейәнсәрен Ҡәҙриә тип атай. Мөбәрәк бер төндә донъяға килеүе лә изге бер ишаралыр, тип өмөт итәйек. Йөҙә айҙай нурлы, күләкәс, иркә, наҙлы был ҡыҙ һау-сәләмәт, аҡыллы, тәүфиҡлы ғына булып үҫеп етһен инде, тип теләйек. Иң мөһиме, исеменә тоғро ҡалып, үҙе лә гел Аллаһы Тәғәләнең юлында изге эштәр башҡарһын, кешеләргә ярҙам итһен, милләтенең аҫыл ҡыҙы булып үҫеп етһен, иншалла.

**Нәзирә АЙЫТОВА.**

# БЕҘГӘ ӨҪӘҮ КӘРӘК!

Журналист һөнәре ҡыҙыҡ бит ул: әллә күпме кеше менән осрашаһың, бихисап тәьҫораттар алаһың. Ләкин ҡайһы бер мәҡәләләр, һүрәтләмәләр кемгәлер кәрәк булғаны өсөн яҙыла һәм бер аҙ ваҡыт үткәс, уның тураһында, хатта үҙеңдең нимә яҙыуың хаҡында бөтөнләй онотаһың. Ә бына "Мәскәү башҡорттары" төбәк йәмәғәт ойошмаһы лидеры менән әңгәмәнең бер өлөшө һаман иҫтә. Исемдәргә ҡағыла ине ул.

Әбйәлил районы ҡыҙы Әнүзә менән Һарытау башҡорто Батырхан Мырҙабаевтарҙың ғаиләһендә өс бала үҫә. Билдәле, Мәскәүҙә улар өсөн генә балалар баҡсаһында башҡорт бүлеге асып тормайҙар. Әммә улдары Азамат, Салауат, ҡыҙҙары Әҙилә төрлө сараларҙа башҡортса сығыш яһап, "Шайморатов генерал" йырын йырлап үҫә. Әммә ғилә унда ла түгел. Бер ваҡыт ошо балалар менән бер баҡсала йөрөгән урыҫ малайынан ғаиләләре артырға тороуын белеп-күреп йөрөгән тәрбиәселәр: "Ә һин әсәйеңдең кемде алып ҡайтыуын теләйһең - ҡустымы, һеңлеме?" - тип һорағас: "Мин бер юлы өсәүҙе теләйем: Азаматты, Салауатты һәм Әҙиләне", - тигән яуап алалар.

Бала теле менән хәҡиҡәт һөйләнә. Бала саҡта әле милләт айырмайһың айырыуға, әммә әлеге осраҡта бәләкәй милләттәштәребеҙ үҙҙәренең ҡылығы, үҙ-үҙҙәрен тотошо менән дуҫтары күңеленә оҫҡон һалып, уларҙы битараф ҡалдырмаған, үҙ исемдәрен лайыҡлы аҡлаған. Бәлки, беҙгә, ололарға, ошо балаларҙан өлгө алырға кәрәктер?

**Земфира ХӘБИРОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# НӘФСЕНЕ ҺИМЕРТҺӘҢ...

## үҙеңә бәлә өҫтәр

- Бала үҫтерһәң, буйын ғына түгел, аҡылын да үҫтер.
- Баланың хәсрәте үҙе менән бергә үҫә.
- Маҡтансыҡ үҙен маҡтап ҡыуаныр, бәхетһеҙ үҙен алдап йыуаныр.
- Йүнһеҙҙе эшкә ҡуш, артынан үҙең эшлә.
- Кешегә түбәнселек ит, үҙең түбәнһенмә.
- Йәш үҙенә ышаныр, ҡарт тәжрибәһенә ышаныр.
- Ерең һатһаң, ауылыңа һат: бер осона үҙең барып ултырырһың.
- Дуҫың күп булһа, дошманың үҙе үлер.
- Изелеп йәшәгәнсе, үҙеңә үҙең баш булып йәшә.
- Бирәү бар - үҙе яратыр, бирәү бар - үҙен яратҡанды яратыр.
- Ялғанлаған ямандың үҙ башына теле яу.
- Әтәс үҙ сүплегендә үҙе мырҙа.
- Алма үҙең һөйгәнде - алданырһың; ал үҙеңде һөйгәнде - ҡыуанырһың.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл:" Бер көнсығыш байына ҡурҡыныс төш инә, имеш, уның бер-бер артлы бөтә тештәре төшөп бөткән. Бик ныҡ тулҡынланып, ул әргәһенә төш юраусыны саҡырып ала. Тегенеһе уны тыңлағандан һуң, шулай ти: "Батшам, мин һиңә насар хәбәр әйтергә тейешмен. Һин бер-бер артлы бөтә яҡын кешеләреңде юғалтасаҡһың". Был һүҙҙәр батшаның асыуын килтерә. Ул төш юраусыны төрмәгә ябырға ҡуша һәм үҙенә икенсе бер төш юраусыны саҡырып ала. Быныһы, төш тураһында тыңлағас, шулай ти: "Яҡшы хәбәр, батшам! Һин үҙеңдең барлыҡ яҡын кешеләреңдән дә оҙағыраҡ йәшәйәсәкһең". Батша был хәбәргә нык ҡыуана һәм төш юраусыны йомарт бүләкләй. Батшаның хеҙмәтселәре был хәлгә ғәжәпләнеп икенсе төш юраусынан: "Һеҙ бит хакимға тәүге төш юраусы менән бер үк хәбәрҙе еткерҙегеҙ, ни өсөн ул хөкөм ителде, ә һин бүләкләндең?" - тип һораған. "Эйе, беҙ был төштө бер төрлө юраныҡ. Ләкин хәбәрҙең ниндәй булыуы мөһим түгел, уны нисек итеп еткереүең мөһим бит", - тип яуап ҡайтарған төш юраусы.**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
**Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru**
**E-mail: info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673

Тиражы - 6035
Заказ 2704